ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

25-3 февраль - март (шаҡай - буранай) 2023

№7 (1049)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Рәсәйҙең хоҡуғы - көслө булыу!**



4

**Башҡорт теле...**

Федераль олимпиадала



5

**Ил һаҡлау һөнәре...**

ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған



6

**Яһалма интеллект Һомай...**

башҡортса һөйләшә



8-9

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Мартта ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 2023 йылдың икенсе яртыһы өсөн ваҡытынан алда 800 һум 10 тингә яҙыла һәм квитанцияларығыҙҙы редакцияға ебәреп, матур китаптар менән бүләкләнә алаһығыҙ. Кемдәр йылдың беренсе яртыһы өсөн яҙылмай ҡалған, улар 17 мартҡа тиклем ҡалған өс айға 399 һумға яҙыла һәр гәзитебеҙҙе апрелдән алдыра башлай ала. Бергә булайыҡ!***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ? Бөгөн йәштәрҙе һәм үсмерҙәрҙе илһөйәр итеп тәрбиәләү иң көнүҙәк бурыстарҙың береһе. Илһөйәр - ул телһөйәр ҙә. Сит телдән үҙләштерелгән һәм һүгенеү һүҙҙәре ҡулланыуҙан телмәребеҙ сафлығын нисек һаҡларға?

***Фирүзә ИШБИРҘИНА, хеҙмәт ветераны:*** Бөгөн был һорау, ғөмүмән, йәмғиәтебеҙ алдына һыңлабыраҡ булһа ла, бик урынлы ҡуйыла. Әлбиттә, тәрбиә һәм әхлаҡ мәсьәләләре онотолоп, мәҙәнилек һәм тәртип йәһәтенән үҙ ихтыярына ҡуйылған "интернет тәрбиәләнеүселәре"нең бер нисә быуыны үҫеп сыҡты инде. Юғалған быуын, тип әйтергә лә булалыр улар араһындағы Көнбайыш һәм АҠШ шойҡонона биреләп, үҙҙәрен "ирекле" тип иҫәпләүсе күпселекте. Уларҙың бәғзеләре үҙе уҡып киткән мәктәпкә ҡорал тотоп килеп, кеше үлтерә, наркотик һәм аҙҙырғыс уйындар тотҡонона, урам йоғонтоһона бирелә, рәшәткә артына эләгә... Уларға Тыуған ил, илһөйәрлек тойғоһо ят, ашаған табағына төкөрөп, Ватанын һатырға ла күп уйлап торманы ундайҙар. Яңы закон буйынса армия сафына саҡырылып, шунда ғына тәртипкә күндерелмәһә, мәктәп ошоға тиклем күпте юғалтты, артабан ни булыр... Әйткәндәй, әле лә мәктәп янынан үтеп барышлай ҡолаҡ япраҡтарыңды шиңдерерҙәй әшәке һүгенеү һүҙҙәренән ытырғанаһың. 14-17 йәшлектәре генә түгел, күрәһең, уларҙан күрмәксе, текә күренергә теләпме, әллә ғәҙәттәренә ингәнме - ваҡ ҡына малай-шалай ҙа, хатта ҡыҙ балаларға тиклем бөтәһе лә тип әйтерлек ололарса "оҫта" һүгенә. Эргәләрендә туҡтап, оялтырға маташып ҡара, үҙеңә "киммәткә" төшәсәк был, йә булмаһа, артыңдан ҡар сәпләп ҡалырҙар һәм шунан мәрәкә табып, шарҡылдашырҙар... Был күренеш, миңә ҡалһа, ҡала мәктәптәренә хас, ә ауылдарҙа улай уҡ түгелдер, тейем. Һәр хәлдә, башҡорт мөхитендә был йәһәттән әҙәплерәк күренә балалар, тик баяғы мөхит һәм дә урам йоғонтоһо үксәләренә баҫып килә баҫымсаҡтарҙың да.

Ғөмүмән, һүгенеү һүҙҙәре һәм ғәҙәте беҙҙең милли мөхиткә сит телдәрҙән килеп ингән, тип йыш ишетергә һәм уҡырға тура килә. Телмәр мәҙәниәте хаҡында байтаҡ хеҙмәттәр яҙған һәм был тиҫкәре күренештең сәбәптәрен өйрәнеүсе психолог Людмила Редькина фекеренсә, һүгенеү һүҙҙәрен иң күп һәм йыш ҡулланыу, нигеҙҙә, славян халыҡтарына хас. Славян филологияһы тарихынан күренеүенсә лә һүгенеү һүҙҙәрендә славян лексикаһы өҫтөнлөк итә. Элегерәк замандарҙа һүгенеү ғәҙәте фәҡәт йәмғиәттең түбәнге ҡатламдарына хас тип ҡаралды, сөнки фәҡирлек һәм ауыр тормош шарттары уларҙа асыу, нәфрәт, агрессия тыуҙырған, психикалары ҡаҡшауға килтергән һәм шунлыҡтан улар үҙ ҡылыҡтарына әһәмиәт бирмәгән. Рус Православие Сиркәүе һүгенеү һүҙҙәрен юҡҡа ғына шайтан, ен ҡотортоуы тип иҫәпләмәй, күрәһең. Һүгенгән кеше үҙенә һәм нәҫеленә ана шул ҡара көстәр шауҡымын тарта һәм был бер ҙә яҡшыға алып килмәй, ти дин әһелдәре. Мәғлүм булыуынса, һүгенеү һүҙҙәренән һыуҙың күҙәнәк төҙөлөштәре боҙола, ә кеше организмы 75 процент һыуҙан тора. Тимәк, әлеге боҙолған молекулалар сылбыры кеше нәҫеленең генетик кодын да боҙа һәм бутай, тигән һүҙ.

Миненсә, мәктәптәрҙә, юғары уҡыу йорттарында йәштәргә һәм балаларға быны ошо турала аңлайышлы һәм дәлилле итеп һөйләргә, уларҙың аңдарында тетрәнеү яһарлыҡ итеп еткерә белергә кәрәк. Был уҡытыусыларҙың, психологтарҙың, шул уҡ ваҡытта ата-әсәләрҙең дә мөһим бурысына әйләнергә тейеш. Ә, бәлки, уҡыу йорттарында әхлаҡ дәрестәре йә булмаһа, элекке политинформациялар рәүешендә әхлаҡ сәғәттәре үткәреү тәртибен булдырырға кәрәктер? Ошонда уҡ телмәребеҙҙе сит тел һүҙҙәре менән сыбарламау, үҙебеҙҙең тел байлығын мөмкин тиклем тулыраҡ файҙаланыу кәрәклеген дә өйрәтеү мотлаҡ, тип уйлайым. Был саралар ватансылыҡ һәм илһөйәрлек тәрбиәһе сиктәрендә үҙ урынын алырға тейеш, шунһыҙ, ниндәйҙер закондар ҙа, штрафтар ҙа ярҙам итмәйәсәк. Йәш быуында тормошобоҙҙа ныҡлы урын алып өлгөргән әшәке һәм сүп-сар һүҙҙәргә ҡарата ытырғаныу уятыу, юғары көс ҡөһөрөнән үҙ-үҙҙәрен һаҡлау теләге тыуҙырып, психикаларын ыңғай тарафҡа бора белергә тейешбеҙҙер. Быны өсөн, әлбиттә, уҡытыусыларҙан педагогик оҫталыҡ, әҙәп һәм мәғлүмәтлелек талап ителә.

БАШҠОРТ ҒАИЛӘҺЕ

## МӘҘӘНИӘТЕБЕҘ...

### ауылдарҙы һаҡлар усаҡ бит ул

**Һәр өлкәлә, һәр йәмғиәттә дөйөм эште башлап йөрөүселәр була. Ауылдарҙа, ғәҙәттә, ауыл мәҙәниәт йортонда эшләүселәр башлап йөрөй бар изге эштәрҙе. Һәр хәлдә, Көйөргәҙе районының "Айыҡ ауыл" конкурсында еңеп, башҡа еңеүҙәргә лә дәртле йүнәлеш алған Яҡут ауылында шулай: Рәмзиә һәм Рәүеф ӘБЙӘЛИЛОВтар оҙаҡ йылдар ошо ауылдың мәҙәниәт йортон ғына түгел, ғөмүмән, ауыл мөхитен йәнләндереп, тыуған төйәкте төрлө еңеүҙәргә, төрлө сараларға әйҙәгән лидерҙар булып тора. "Башҡорт ғаиләһе" көнө алдынан улар менән әңгәмә ҡороп алдыҡ.**

(Дауамы 10-сы биттә).



Өләсәй һәм өйәнсәр.

12+

✔ ***Психологтар шундай ғибрәтле күҙәтеү теркәгән: һүгенеү һүҙҙәре йыш һәм күп ҡулланылған илдәрҙә Даун, ДЦП менән балалар күберәк тыуа, ә иман нигеҙҙәре көслө булған халыҡтарында сирле балалар юҡ кимәлендә икән.***



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ШӘЖӘРӘЛЕБЕҘ

***Илнур МӘХМҮТОВ, Башҡортостан Үҙәк һайлау комиссияһы хеҙмәткәре, 2021 йылда "Өлгөлө башҡорт ғаиләһе" асыҡ республика конкурсында еңеүсе ғаилә башлығы:*** Һәр ғаиләнең ныҡлығы тәү сиратта ир менән ҡатындың үҙ-ара дуҫтарса мөнәсәбәтенә бәйле. Улар бер-береһен тыңлай, аңлай, кәрәк саҡта күтәрмәләй алһа, ғаиләләре ныҡлы буласаҡ. Ә инде "Башҡорт ғаиләһе ниндәй булырға тейеш?" тигәндә, иң беренсе сиратта ул үҙ халҡының традицияларына, тамырҙарына нигеҙләнергә тейеш, тип яуаплар инем. Ҡатыным менән беҙ тап бына ошоларҙы күҙ уңынан ысҡындырмаҫҡа, балаларҙы ла үҙебеҙҙең йолалар ярҙамында тәрбиәләп үҫтерергә тырышабыҙ. Башҡорт ғаиләһен тағы бик ҡунаҡсыл тип күҙ алдына килтерәбеҙ. Ҡунаҡсыллыҡ арҡаһында ике яҡ туғандар менән бәйләнешебеҙ нығына икәнен үҙ тәжрибәбеҙ аша беләбеҙ: күмәк йыйылып аралашабыҙ, милли аш-һыуҙар бешереп, бер-беребеҙҙе ҡәҙер итәбеҙ. Ҡатыным да, мин дә бала саҡтан туғандар араһында шундай йылы мөнәсәбәттәрҙе күреп үҫкәнбеҙ. Әйткәндәй, ҡатыным бишбармаҡ, ҡаҙы, тултырма, йыуаса һәм башҡа үҙебеҙҙең ризыҡтарҙы бик тәмле бешерә. Балалар башҡорт халыҡ кейемдәре, орнаменттарын да күреп беләләр, милли кейемдәре лә бар.

Башҡорт ғаиләһе, әлбиттә, нәҫел шәжәрәһен белергә бурыслы. Беҙ ҙә шәжәрәбеҙҙе өйрәндек. Быныһы бик ҡыҙыҡ һәм үҙенән-үҙе килеп сыҡты. Малайҙар бәләкәйерәк саҡта минең эргәлә ятып йоҡлайҙар ине һәм уларға көн дә берәй әкиәт һөйләргә кәрәк була торғайны. Шулай, белгән матур әкиәттәрҙе һөйләп бөтөп, аптырағандан үҙемдең бала саҡтағы ҡыҙыҡлы хәл-ваҡиғалар, матур иҫтәлектәрем менән бүлешә башланым.  Балалар бик ылығып, ҡыҙыҡһынып китте һәм олатай-өләсәйҙәре, уларҙың ата-әсәһе һәм нәҫелдәге башҡа ололар нисек йәшәгән, кем булғандар, тип һораша башланылар. "Минең олатайым Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, ә уның атаһы кулак булараҡ хөкөм ителгән. Ул тырыш кеше булған, хәлле йәшәгән", тип һөйләйем. Быларҙы ишеткән балаларҙың күңелендә ғорурланыу тойғоһо уяныр, был уларға матур үрнәк булыр, тигән өмөттәмен. Малайҙарға ир-егет абруйы, ғаилә башлығы булараҡ яуаплылыҡ тойоу кеүек тәрбиәне лә, туған телгә һөйөүҙе лә бәләкәйҙән бирергә кәрәк. Хәҙер интернет һәм телевидениеның йоғонтоһо бик ҙур бит. Ғаиләлә тик башҡортса ғына һөйләшеүебеҙгә ҡарамаҫтан, даими рәүештә күҙ уңында тотмаһаң, балалар тиҙ генә урыҫ теленә күсергә әҙер тора. Шуға тиңдәштәремде, йәштәрҙе шулай тип өндәр инем: әйҙәгеҙ, балаларҙың телмәрен контролдә тотайыҡ, сит йоғонтонан һаҡлайыҡ! Һәр ғаиләлә башҡорт телле мөхит булдырайыҡ.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

ЯУГИР ҺҮҘЕ

# ӨЙҘӘРЕБЕҘҘӘ ЛӘ...

## именлек булһын!



**"Яҡташтар, артыҡ ҡайғырмағыҙ!" Был һүҙҙәр - һөнәри хәрби, Мәләүез егете Артур Самат улы Йомғужиндың яҡташтарына, Башҡортостан халҡына, яҡындарына теләгән теләге.**

Уның әйткәндәре, әлбиттә, тулыһынса тынысландырмаҫ та, әммә Ватан һаҡсыһы ошо мәлде һыҙыҡ өҫтөнә алыуҙы үтенде. "Беҙгә, махсус хәрби операциялағы хәрбиҙәргә, өйөбөҙҙә, ғаиләбеҙҙә барыһы ла имен, һәйбәт булыуын, яҡындарыбыҙ матди һәм әхлаҡи ауырлыҡ кисермәүен, уларҙың көнө борсолоуһыҙ, төнө тыныс үтеүен белеү бик тә мөһим. Зинһар өсөн, сабыр булығыҙ, ныҡ булығыҙ", - тине өлкән механик-водитель.

Артур менән февраль башында, уның ҡыҫҡа ваҡытҡа отпускыға ҡайтҡан мәлендә таныштыҡ. Махсус хәрби операция башланғас, тыуған яҡҡа икенсе тапҡыр ҡайтыуы ине уның. Егеткә 22 йәш. Мәләүез ҡалаһының 1-се мәктәбен тамамлаған, артабан Салауат индустриаль колледжында төҙөүсе һөнәренә уҡыған. Әммә бәләкәйҙән хәрби һөнәрҙәр менән ҡыҙыҡһыныусанлығы армияла хеҙмәт итеүҙең һуңғы көнөндә етди ҡарарға килтерә - контрактҡа ҡул ҡуя. Танкист булып хеҙмәт итә, башта Читала учебка үтә, аҙаҡ уны Волгоград өлкәһе Камышин ҡалаһына ебәрәләр. Махсус хәрби операция зонаһына 2022 йылдың 9 мартында эләгә. Луганск Халыҡ Республикаһы территорияһын азат итеүҙә ҡатнаша.

Өлөшләтә мобилизацияланыусылар килгәс, яҡташыбыҙ һәм уның хеҙмәттәштәре уларҙы инструктор сифатында хәрби техника менән эшләргә өйрәтә. "10-20 йыл элек хеҙмәт итеүҙәренә ҡарамаҫтан, ир-егеттәрҙең хәрби күнекмәһен юғалтмауы һоҡландырҙы, - ти Артур. - Унда беҙ бер туғандар кеүек. Беҙгә иң мөһиме - яҡташтарҙан хат һәм иғтибар. Дөрөҫөн әйтәм, бөгөн мобилизацияланғандарға ҙур иғтибар бирелә. Ә беҙ, контрактниктар, аҙыраҡ ситтәрәк ҡалдыҡ. Гуманитар ярҙам көтмәйбеҙ, сөнки бөтә нәмә менән тәьмин итәләр. Күңелде йылытҡан, рухты нығытҡан хат, ябай ғына сувенирҙар кәрәк. Бына миңә йәш техниктар станцияһында уҡыусылар эшләгән "Беҙҙең геройҙарға" тип аталған сувенир бүләк иттеләр. Уға егеттәр бик шат буласаҡ!"

Отпуск ваҡытында Артур шулай уҡ Кинйә Арыҫланов исемендәге 9-сы башҡорт гимназияһы уҡыусылары менән осрашырға өлгөрҙө. Ҡалған ваҡытын яҡындары, ағалары (Артур ғаиләлә өсөнсө ул, ике ағаһы Өфөлә йәшәй - **Авт.**), дуҫтары менән үткәрҙе. Әле Артур үҙенең хәрби часында. Уға һәм Тыуған ил һағында торған бөтә ир-егеттәргә батырлыҡ, ныҡлыҡ һәм өйҙәренә иҫән-һау әйләнеп ҡайтыуҙарын теләйбеҙ!

Әйткәндәй, Артур уларҙың хәрби часында матди тәьминәт менән проблемалар юҡлығын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Ә шулай ҙа Мәләүез ҡалаһы танкистар ойошмаһы рәйесе Фәнис Бикташев башланғысы менән йыйылған иҫтәлекле сувенирҙар, хаттар, бал һәм йылы кейемдәрҙе Артур һәм уның хеҙмәттәштәре рәхмәтле булып ҡабул иткәндер, тип ышанабыҙ. Шулай уҡ тутыҡмай торған ҡоростан хәрбиҙәрҙең ҡушаматтары яҙылған медальондар ҙа оҡшағандыр, тип ышанабыҙ.

**Гөлиә ШАҺИҒӘЛИНА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Бөгөн йәштәрҙе һәм үҫмерҙәрҙе илһөйәр итеп тәрбиәләү иң көнүҙәк бурыстарҙың береһе. Илһөйәр - ул телһөйәр ҙә. Сит телдән үҙләштерелгән һәм һүгенеү һүҙҙәре ҡулланыуҙан телмәребеҙ сафлығын нисек һаҡларға?***

***Гөлфиә БАЙРАМОВА, Өфө фән һәм технологиялар университеты студенты:*** Бөгөнгө йәштәштәремдең үҙ-ара әңгәмәләшеүенә йәки улар янынан үтеп барышлай осраҡлы телмәр өҙөктәренә шаһит булырға һәм шунлыҡтан бик ныҡ ҡыҙарырға тура килгеләй, сөнки улар һәр һүҙҙәре аралаш һүгенергә ғәҙәтләнгән. Мин бында үҙемдең төркөмдәштәрем араһында ундайҙарҙың булмауына һөйөнһәм дә, ғөмүмән, йәштәр өсөн борсолам. Әлбиттә, юғары уҡыу йорттарында әҙәпһеҙ телле студенттар мәктәптәрҙәге кеүек аҙым һайын, тип әйтә алмайым, тик барыбер телдәрен тыя алмаусылар байтаҡ ҡына.

Мин үҙем баш ҡалабыҙҙың төрлө милләт балалары белем алған мәктәптәренең береһендә уҡыным. Ҡайһы бер малайҙар һис бер тартыныуһыҙ класта, коридорҙа ҡысҡырып һүгенә торғайнылар. Ындай малайҙарҙың күпселеге етешһеҙ донъя көткән, атаһы йәки әсәһе эскесе һәм уларҙың интеллект кимәле түбән именлекһеҙ ғаиләләрҙән ине. Бер яҡтан, ундай шарттарҙа йәшәгән балалар йәл дә булып китә, сөнки уларҙың әхлаҡһыҙлыҡ юлына баҫыуына фәҡәт ата-әсәләре ғәйепле, тимәк, улар ғәҙәтен отоп алыусы бала ғәйепһеҙҙән ғәйепле булып сыға. Икенсе яҡтан, ундай балалар урам йоғонтоһо ҡорбандары ла. Күптәре үҙҙәре йәшәгән, уҡыған шарттарға, уҡытыусы йәки ғаиләһе баҫымына ҡарата протест билдәһе булараҡ та һүгенеү ғәҙәтенә бирелә.

Психологтар шундай ғибрәтле күҙәтеү теркәгән: һүгенеү һүҙҙәре йыш һәм күп ҡулланылған илдәрҙә Даун, ДЦП менән балалар күберәк тыуа, ә иман нигеҙҙәре көслө булған һәм шаҡшы һүҙҙәр ҡулланылмаған Көнсығыш халыҡтарында тыумыштан сирле балалар юҡ кимәлендә икән. Был яман ғәҙәткә ҡаршы көрәшеп буламы? Ошо йәһәттән психологтар кешенең үҙ-үҙен тотошона контролдең ябай ғына бер нисә төрөн кәңәш итә. Мәҫәлән, "боросло" һүҙҙе ысҡындырған һайын янығыҙҙа йышыраҡ булған кешенең һеҙҙе иҫкәртеүен һорарға. Асыуға тейеүсе киҫкен хәлдәрҙән һәм конфликттарҙан ҡасырға тырышыу ҙа ыңғай һөҙөмтә биреүе бар. Ҡулға резина беләҙек кейергә һәм яман һүҙҙе әйткән һайын уны тартып, беләккә һуҡтырырға. Был осраҡта әр һүҙе ауыртыныу тойғоһо менән тиңләшә һәм кеше алама ғәҙәттән тыйыла ала. Махсус көшөлөк йә ҡумтаға яман һүҙ һайын күпмелер күләмдә аҡса - "штраф" һалып барырға, тик йыйылған сумма һүгенгән кешегә тәтемәһен. Ғәҙәттә, шаҡшы һүҙҙәр көслө тиҫкәре эмоция ваҡытында ысҡыныусан. Ындай осраҡҡа алдан "гонаһһыҙ" һәм яғымлыраҡ икенсе берәй һүҙ ятлап алығыҙ. Иң мөһиме, кеше үҙенә контролде юғалтмаҫҡа, тыныс һәм әҙәпле булырға тырышырға тейеш, тип кәңәш итә белгестәр.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Халыҡ-ара туған телдәр көнөндә республиканың дөйөм белем биреү ойошмаларында мәктәп линейкалары; тарих, йәмғиәтте өйрәнеү, тел һәм әҙәбиәт дәрестәрендә туған телдең матурлығы тураһында әңгәмәләр, әсә телдәрендә "Туған тел. Төрлөлөктә - берҙәмлек" кластан тыш дәрестәр үткәрелде. Башҡа саралар, шул иҫәптән китап акциялары, профиль дәрестәре менән таныштырыу, "Ағиҙел" төбәк-ара полилингваль олимпиадаһы уҙғарылды. Өфөнөң "Торатау" конгресс-холында "Әҙәбиәттә туған телдең бөйөклөгө" тигән әҙәби осрашыу ойошторолдо.

✔21 февралдә Төркиәлә 5,8 һәм 6,4 магнитудалы яңы ҡеүәтле ер тетрәүҙәре теркәлгән. Был юлы ла илдең көньяҡ-көнсығышы, Хатай провинцияһы зыян күргән. Шулай уҡ Сүриә, Ливан, Израиль, Ираҡ, Палестина һәм Кипрҙа тирбәлеүҙәр тойолған. Төркиә властары хәбәр итеүенсә, Дефне, Хатай райондарында йорттар емерелгән. Сүриәлә шулай уҡ йорттар емерелгән, мәҫәлән, Эль-атариб, Алеппо ҡалаларында, унда ла емереклектәр аҫтында кешеләр ҡалған. Анталья, Мерсин һәм Хатай провинциялары властары халыҡты диңгеҙҙән алыҫ булырға саҡыра, сөнки бында уның кимәле күтәрелеү хәүефе бар.

✔Күгәрсен районының Мораҡ ауылында Ватандан ситтә үҙ бурысын үтәгән яугир-интернационалистарҙы иҫкә алыу көнөнә арналған тантаналы митинг уҙҙы. "Бөгөн беҙ мөһим датаны - совет ғәскәрҙәрен Афғанстандан сығарыуға 34 йыл тулыуҙы билдәләйбеҙ. Был һуғышта Башҡортостандан 10 меңгә яҡын һалдат ҡатнашты. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, 343 яугир өйөнә әйләнеп ҡайтманы. Улар иҫәбендә яуҙа батырҙарса һәләк булған дүрт Күгәрсен егете бар", - тине сарала сығыш яһап Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров.

✔Башҡортостанда быйыл да аҙыҡ-түлек етештереүселәргә ярҙам күрһәтеләсәк, тип белдерҙе ауыл хужалығы министры Илшат Фазрахманов. Быйылдың өсөн республика бюджетында 100 млн һум ҡаралған. Былтыр икмәк бешереү менән шөғөлләнеүселәрҙең сығымдарын өлөшләтә ҡаплау өсөн бүленгән 64 млн һумлыҡ субсидиялар икмәккә хаҡтарҙы арттырмаҫҡа мөмкинлек биргән. Һөт эшкәртеүҙе арттырыу өсөн дә дәүләт ярҙамы буласаҡ.

✓ *Ҡолаҡты ярып килеп ингән аутсоринг, менеджмент, тренд, анимация, спикер, тендер, консенсус, агломерация, кластер һәм башҡа шундай һүҙҙәрҙең синонимдарын табып, үҙебеҙсә әйтергә йә яҙырға булмаймы ни?*



ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...

**Бер ямандың... бер "осо" килеп сыға шул ул. Заманына күрә әйтемдәрҙе лә үҙгәртеберәк бороп ебәрергә тура килә, шуға ла "яҡшыһы" тип әйтеүе бәғзе бер даирәләргә оҡшамауы ла бар. Унан һуң, кеше бәләһенә ҡыуанған һымағыраҡ та ҡабул ителер. Әммә был хаҡта өндәшмәй ҡалыу ҙа мөмкин түгел, сөнки, дөрөҫөн әйткәндә, Рәсәйҙән ситкә сығарылыусы ғәйәт ҙур суммаларҙағы капитал ағымы, асылда, ил байлығын талау менән бәрәбәр икәне һәр кемгә аңлашыла.**

# ҠЫҘҒАНҒАНЫ - ҠЫҘЫЛ ЭТКӘ...



Ҡайһы бер иҫәпләүҙәр буйынса, Рәсәй бөтөн Ер шарындағы тәбиғи ресурстарҙың 40 процентын биләп тора һәм шунан сығып, ил байлығы йөҙәрләгән трлн доллар тәшкил итә. Ҡара иҫәп менән шартлы рәүештә был һәр рәсәйлегә 2-2,5 млн доллар тура килә, тигән һүҙ. Ләкин ике тиҫтәләп млн халҡы фәҡирлек сигендә йәшәүсе илдең иң бай бер проценты ғына милли байлыҡтың 57-60 процентына хужа, тип иҫәпләй эксперттар. Ә бит уйлап ҡараһаң, бер процент - ул 1,4 млн кеше тигән һүҙ. Тимәк, улар араһында хәлле, бай һәм үтә бай кешеләр бар, сөнки ил иҡтисадында "көн торошо" яһарҙай төркөм, Forbesтың былтырғы мәғлүмәттәренә ярашлы, доллары 88 миллиардер иҫәпләнә, ә бынан йыл ярым элек был һан 123 кеше булған. Ғәжәп, ә 35 миллиардер ҡайҙа булған? Әлеге 88 үтә байҙың дөйөм байлыҡ суммаһы 352,8 млрд доллар иҫәпләнә. Был, тимәк, Рәсәйҙең йыллыҡ ҡаҙна килеме менән тиңләшә яҙа. Ә Forbes миллиардерҙары исемлегенән төшөп ҡалған теге 35 үтә байҙың килемен дә ҡушҡанда, байҙар килеме ил ҡаҙнаһы суммаһынан байтаҡҡа артып киткән булыр ине.

Әйтеүҙәренсә, "төшөп ҡалғандар"ҙың килем күләме Америка һәм Көнбайыш санкциялары арҡаһында бөҫкәрә төшкән икән. Әле башҡа миллиардерҙар байлығына ла янауҙар булып тора. Мәҫәлән, яңыраҡ ҡына, үҙегеҙгә мәғлүм булыуынса, АҠШ властары тарафынан Рәсәй бизнесмены Константин Малофеевтың 5,4 млн доллар аҡсаһы тартып алынған һәм матди ярҙам рәүешендә Украинаға күсерелгән. Әлбиттә, миллиардер ҡарамағына был әллә ни ҙур сумма ла түгелдер, ләкин Рәсәйҙең башҡа байҙары өсөн етди генә янау ул. Америка менән Көнбайыш, тәбиғи, бының менән генә сикләнеп ҡалмаясаҡ. Рәсәйҙең фәҡир халҡына иһә был хәлдән "эҫе лә, һалҡын да" түгел, әлбиттә. Ләкин, уйлап ҡарағанда, әгәр байҙар аҡсаларын сит ил банктарына йәшермәйенсә, Рәсәйҙең үҙендә ҡалдырып, һалым проценттарын үҙебеҙҙең ҡаҙна файҙаһына күсереп барған хәлдә, улар ҙа, ил иҡтисады ла отор ғына ине. Ә былай, халыҡ тапҡыр итеп әйтмешләй, үтә байҙарҙың "ҡыҙғанғаны - ҡыҙыл эткә" тигәнсә килеп сыға лабаһа!

Бынан алдараҡ ил Президенты Владимир Путин күп тапҡырҙар миллиардерҙарҙы аҡсаларын офшорҙарҙан Рәсәйгә ҡайтарыу тураһында иҫкәртә килде, ләкин, кемдер әйтмешләй, урланғанды кире ҡайтарғанды кемдең күргәне бар? Билдәле иҡтисадсы Михаил Хазин фекеренсә, аҡсаларын Көнбайышта һаҡлаусы олигархтар иртәме-һуңмы уҙ иҫәптәрен барыбер юғалтасаҡ. Был ҡалын кеҫәле әфәнделәр, бәлки, Рәсәйҙә талап, иҡтисадын көсһөҙләндереүгә өлөш индергәндәре өсөн үҙҙәрен Көнбайышта яратырҙар һәм яҡларҙар, тип уйлағандарҙыр, тигән һорау ҡуя эксперт. Юҡ, улар сит илдәргә ҡасып, һыйыныр урын тапҡан хәлдә лә, барыбер килмешәк булып ҡалалар. Шуның өсөн дә бит миллиардерҙарҙың бәғзеләре Британияның һәр төрлө мәрхәмәтлек фондтарына тос ҡына иғәнәләре менән дә, хатта Украина хәрби көстәренә аҡса күсереп тә барыбер сит властарға ярай алмаһы - проблемаларҙан баштары сыҡмай, тыныс көндәр бөттө байҙарға. Әленән-әле кемеһенендер күсемһеҙ милке, бай яхталары, шәхси самолеттары, картиналары, текәнән-текә автомобилдәре ҡулға алыныу хаҡында хәбәрҙәр килеп кенә тора.

Эйе, араларында ниндәйҙер юлдар һәм әмәлдәр менән ситтәргә ярай алғандар ҙа барҙыр, уныһы беҙгә ҡараңғы. Ни тиһәң дә, үҙҙәре һайлаған яҙмыш, ә донъя бит шулай бер алдын, бер артын күрһәтә, ҡотороп байыуҙың да сиге бар. Байҙар ҙа илай, тип юҡҡа әйтмәйҙәр, күрәһең...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Бөгөн йәштәрҙе һәм үсмерҙәрҙе илһөйәр итеп тәрбиәләү иң көнүҙәк бурыстарҙың береһе. Илһөйәр - ул телһөйәр ҙә. Сит телдән үҙләштерелгән һәм һүгенеү һүҙҙәре ҡулланыуҙан телмәребеҙ сафлығын нисек һаҡларға?***

***Тимер НИӘТШИН, яҙыусы, публицист, йәмәғәт эшмәкәре:*** Эйе, бөгөн йәштәрҙең аңына илһөйәрлек үә телһөйәрлек тойғолары һеңдереү иң мөһим бурыстарҙың береһе. Был эш сирек быуатҡа яҡын ваҡыт эсендә илебеҙ сәйәсәтенән дә, шул арҡала мәҙәниәт, мәғрифәт һәм мәғариф өлкәләренән дә төшөп ҡалды һәм уҙағышына ҡуйылды. Шул арҡала Көнбайыш йогонтоһона бирелеп, үҙ иле һәм теленә битараф 20-30 йәшлектәр быуыны үҫеп етте. Уларға етәһе йәштәр һәм мәктәп балалары ла шул ағай-апайҙарына оҡшарға тырыша, улар ҡылығын отоп ала. Телмәребеҙ сафлығынан алда иң тәүҙә күңел сафлығын, әхлаҡ һәм әҙәп ҡанундарын һаҡлау бурысы тора алдыбыҙҙа, сөнки Көнбайыштың "шәхес азатлығы" тырнаҡтары артына йәшеренгән ирекле мөхәббәт, эгоизм, наркоманлыҡ, гомосексуализм, лесбиянлыҡ кеүек әхлаҡи боҙоҡлоҡ һәм йән зәғифлеге ҡәҙимге тәртип ҡағиҙәләре рәүешенә әйләнә бара. Был иһә беҙҙең халҡыбыҙға ятһынған рухтың сағылышы. Ә бит илһөйәрлек принциптары кешенең әхлаҡ сифаттарына туранан-тура бәйле. Бына ни өсөн беҙгә үҙ йөҙөбөҙҙө, асылыбыҙҙы, илебеҙҙе-телебеҙҙе һаҡлап алып ҡалыу иң беренсе бурыс. Илен һөйгән генә телен дә һөйәр, ҡәҙерләр.

Бөгөн, күреүебеҙсә, дөйөм ҡулланылышҡа бик күп сит тел һүҙҙәре килеп инде. Мин бында интернет донъяһына ҡағылышлы терминдарҙы ғәйепләмәйем, уларҙы, үҙ сығанаҡтарына ярашлы, башҡа ниндәйҙер тар ҡулланылыштағы һүҙҙәр менән алыштырыу маҡсатҡа ярашлы ла түгелдер; интернациональ лексика хоҡуғында йәшәргә тейеш улар. Ә бына сәйәсәт, иҡтисад, финанс, сәнғәт һәм мәҙәниәт өлкәһенә ҡолаҡты ярып килеп ингән аутсоринг, менеджмент, тренд, анимация, спикер, тендер, консенсус, агломерация, кластер, пассаж, акциз, бутлегер, маркетинг, эмиссия, демфер һәм башҡа шундай һүҙҙәрҙең мәғәнәһенә төшөнөп, синонимдарын табып, үҙебеҙсә әйтергә йә яҙырға булмаймы ни? Әллә киң ҡатлам халыҡҡа аңлайышлыраҡ булған һәйын, шул һүҙҙәрҙе ҡушып һөйләүселәр үҙҙәрен текәрәк, белемлерәк, юғарыраҡмын тип күрергә теләйме икән? Ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та...

Тағы ла ҡыҙғаныслырағы, әлбиттә, телмәребеҙ таҙалығын, уның гүзәл яңғырашын, бөйөклөгөн әшәке рәүештә тапап, бысратыусы һүгенеү һүҙҙәре ҡулланыу. Һүгенгән әҙәмде мин яҡшы күңелле, саф, мәҙәни кимәлле кешелер тип уйламайым. Өлкәнерәк йәштәге ундай кешеләрҙе тәрбиәләү һуңдыр ҙа, бәлки, ә бына уларҙан күпкә уҙҙырып ебәреүсе йәштәр, үсмерҙәр менән ни эшләргә? Был йәһәттән уларҙы мәктәп тәрбиәләргә тейеш, тиҙәр. Дөрөҫ, ләкин мәктәптән алда бит баланың ғаиләлә формалашыуын онотмайыҡ. Әгәр өйҙә баланың атаһы йә әсәһе шаҡшы һүҙле һәм һүгенергә ярата, сабый уны көн дә ишетеп-күреп үҫә икән, был яман ғәҙәт уның ҡанына һеңәсәк! Бына нимәһе ҡурҡыныс.

Мәктәп, әлбиттә, баланан алда уҡыусыларҙың ата-әсәһен саҡыртып, дөйөм йыйылышта улар менән ошо хаҡта ныҡ һәм күҙмә-күҙ һөйләшергә тейештер. Һәм был һөйләшеүҙә класс етәксеһе генә түгел, мәктәп директоры һәм бөтөн педсовет ҡатнашһын ине. Бына шунан һуң инде балаларҙан да саф телмәр талап итеү мөмкин буласаҡ, тип уйлайым. Дөрөҫ, балаларҙа, йәштәрҙә туған телебеҙгә тоғролоҡ һәм ихтирам тәрбиәләү бурысын мәктәп менән ғаиләгә генә ҡайтарып ҡалдырырға ярамай. Был эштә беҙ, яҙыусылар, журналистар һәм мәҙәниәт, сәнғәт вәкилдәре лә, үҙ өлөшөбөҙҙө индерергә тейешбеҙ. Ынғай герой образдарын тыуҙырайыҡ, бөгөнгө ил һаҡсыларыбыҙ өлгөһөндә яңы әҫәрҙәр яҙайыҡ, кинофильмдар төшөрәйек. Илебеҙ һағында хеҙмәт иткән яугир егеттәребеҙ туған телебеҙ сафлығы һәм уҙаллылығы өсөн дә көрәшселәр булыуын күрһәтәйек, улар йырлаған йырҙарҙы өйрәнәйек.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан спортсыһы Эдуард Латипов Пермь крайының Чайковский ҡалаһында барған биатлон буйынса Рәсәй кубогының финал этабында спринт еңеүсеһе булды. Ул 10 саҡрым арауыҡты, бер тапҡыр ғына яҙа атып, 23 минут 57,2 секунд эсендә үтте.

✓Стәрлетамаҡ ҡалаһының 2-се балалар һәм үсмерҙәр спорт мәктәбе Рәсәйҙә иң яҡшыһы тип танылды. Ул 2021-2022 уҡыу йылындағы эш йомғаҡтары буйынса физкультура-спорт йүнәлешендәге өҫтәмә белем биреү ойошмалары араһында Бөтөн Рәсәй конкурсында еңеү яуланы. "Өҫ һәм унан күберәк спорт төрҙәре буйынса өҫтәмә дөйөм белем биреү программаларын тормошҡа ашырған физкультура-спорт йүнәлешендәге иң яҡшы өҫтәмә белем биргән муниципаль ойошма" номинацияһында беренсе урын өсөн Рәсәйҙең 29 спорт мәктәбе көс һынашты.

✓Рәсәйҙең Һаулыҡ һаҡлау министрлығы Бөтә Рәсәй табиптар конкурсы, урта медицина һәм фармацевтика белеменә эйә булған иң яҡшы белгескә конкурс иғлан итте. Конкурсанттарҙы коллективтар тәҡдим итергә, шулай уҡ үҙ-үҙенде күрһәтергә мөмкин. Табиптар конкурсында еңеүселәргә аҡсалата премия тапшырыла. Конкурс йәй көнө тамамлана. Һөҙөмтәләр тураһында мәғлүмәт Рәсәй һаулыҡ һаҡлау министрлығының рәсми сайтына урынлаштырыла.

✓Башҡортостанда 2023 йылдың беренсе кварталына торлаҡтың бер квадрат метрының уртаса баҙар хаҡы раҫланылар. Тәҙәләш һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығының бойороғонан билдәле булыуынса, ул 97 656 һумға тиң. Билдәләнеүенсә, "квадрат"тың уртаса баҙар хаҡы республикала даими йәшәгән һәм торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаж граждандарға субсидияны иҫәпләү өсөн кәрәк. Аҡса торлаҡ төҙөүҙә (һатып алыуҙа) ҡатнашыу өсөн федераль һәм республика бюджеттары иҫәбенә бүленә.

✓"Профессионалитет" федераль проектын тормошҡа ашырыу сиктәрендә Башҡортостандың 31 муниципалитетында "Һин дә булдыраһың!" һөнәри лабораторияһының оҫталыҡ дәрестәре уҙҙы. 8-9 класта белем алыусы 4053 уҡыусы "Электромонтаж", "Лаборатор химик анализ", "Ашнаҡсы эше" кеүек һөнәрҙәр менән танышты.

ҠЫҪҠАСА

# ДЕПУТАТҠА - ТАЛАП

**25 ғинуарҙа Дәүләт Думаһы алты ай рәттән сәбәпһеҙ барлыҡ ултырыштарға килмәгән төбәк һәм муниципаль депутаттарҙың вәкәләттәрен ваҡытынан алда туктатыуҙы күҙ уңында тоткан закон ҡабул иткәйне.** Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай ҙа ултырышҡа килмәгән депутаттарҙы мандаттан мәхрүм итеү башланғысын хупланы. Башҡортостан парламентында федераль ҡануниәттең яңы формаһы ("Рәсәй Федерацияһы субъекттарында асыҡ власты ойоштороуҙың дөйөм принциптары тураһында" һәм Рәсәй Федерацияһының айырым закон сығарыу акттары) Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышының эшмәкәрлегенә үҙгәрештәр индермәй, тип хәбәр итә республика парламентының матбуғат хеҙмәте. Башҡортостанда 2005 йылда уҡ "Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы Ҡоролтай депутаты статусы тураһында" Законға үҙгәрештәр индерелеп, был мәсьәләгә нөктә ҡуйылды. Законда ошо положениеның булыуы парламент дисциплинаһын тәьмин итә. Әгәр депутат объектив сәбәптәр, мәсәлән, ҡусенеүгә йәки тығыҙ эш графигына бәйле бурыстарын үтәй алмай икән, ул ғариза яҙып, вәкәләттәрен ваҡытынан алда туктата. Депутат мандаты билдәләнгән тәртиптә алмаштырыла.

✓ **Инновацияларға ярҙам итеү фонды "Студент стартап"ы конкурсында ҡатнашыу өсөн ғаризалар ҡабул итә башланы.** Ул студенттар һәм аспиранттар араһында үтәсәк. Грант күләме - 1 миллион һум. Улар шәхси фәнни-техник һәм ғилми-технологик тикшеренеүҙәре нигеҙендә төҙөлгән, коммерциализация потенциалы булған проект авторҙары булырға тейеш. 2023 йылда бындай бәхет 1,5 мең Рәсәй студентына йылмаясаҡ. Студент һәм аспиранттар проекттарын конкурсҡа ете тематик йүнәлеш буйынса ебәрә ала: һаҡлы технологиялар, медицина һәм һаулыҡ һаҡлаусы технологиялар, химик технологиялар һәм яңы материалдар, яңы приборҙар һәм интеллектуаль сәнәғәт технологиялары, биотехнологиялар, ресурстарҙы һаҡлаусы энергетика һәм креатив индустриялар. Еңеүселәр бизнесын яйға һалыу өсөн 1 миллион һум аласаҡ. Улар юридик шәхес булараҡ теркәлеп, бизнес-план төҙөргә һәм стартаптың сайтын төҙөргә тейеш. Ғаризалар 2023 йылдың 3 апреленә тиклем ҡабул ителә. "Бәйгенең беренсе һәм икенсе сиратында Башҡортостандың 59 студенты грант алды ла инде. Беҙҙең төбәк ғаризалар тапшырыу буйынса алдынғы 3 лидер араһында", - тип билдәләне республикала Инновацияларға ярҙам итеү үҙәге директоры Руслан Шәймөхәмәтов.

✓ **Сибай гимназия-интернаты Бөтөн Рәсәй конкурсында Башҡортостан исемен яҡланы. Санкт-Петербургта "Рәсәй - дөйөм йортобоҙ" халыҡ ижады балалар фестивале" сиктәрендә "Ҙур медиакитапҡа туған фольклорым тураһында бүлек яҙабыҙ" тип аталған медиатекстар конкурсына йомғаҡ яһалды.** Гимназия уҡыусылары Гөлнәзирә Йосопова менән Сынғыҙ Ильясов эштәрҙе башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Әлнисә Кәримова етәкселегендә башҡара. Беренсе этапҡа төшөрөлгән видеоролика башҡорт фольклоры һәм йолалары милли кейемдәр аша сағылдырыла. Ошо этапта еңгән 15 команда Санкт-Петербургҡа саҡырыла. Беҙҙең гимназистар унда милли кейемдәрҙә сығыш яһай, башҡалар менән бергә Рәсәй халыҡтары фольклорына арналған арт-проекттарын күрһәтә. Сарала ҡаланың төрлө урындарына экскурсиялар ҙа, оҫталыҡ дәрестәре лә ойошто108рола.

*ПРЕЗИДЕНТ ӘЙТТЕ!*

# РӘСӘЙҘЕҢ ХОҠУҒЫ - КӨСЛӨ БУЛЫУ!



**21 февралдә ил Президенты Владимир Путин сираттағы Мөрәжәғәтнамә менән сығыш яһаны.**

Тәүҙән үк ил башлығы документтың Рәсәйҙең һәм халыҡтың киләсәген билдәләгән, һәр кемдең иңенә ҙур яуаплылыҡ һалған, ил өсөн артылышлы, тотош донъя тамырынан үҙгәреш кисергән мөһим тарихи ваҡиғалар осоронда яңғырауын билдәләне һәм Украинала махсус хәрби операция башлауҙың етди сәбәптәренә туҡталды.

2014 йылдан алып Донбасс халҡы үҙ ерендә йәшәү һәм үҙ телендә һөйләшеү хоҡуғы өсөн даими утҡа тотоу һәм блокада, Киев режимының асыҡтан-асыҡ нәфрәте шарттарында бирешмәй көрәшә, Рәсәй ярҙамға килер тип ышана һәм өмөтләнә. "Шул уҡ ваҡытта беҙ был проблеманы тыныс юл менән хәл итеү өсөн мөмкин булғандың барыһын да эшләнек, ҡатмарлы низағтан тыныс юлдар менән сығыу тураһында һөйләшеүҙәр алып барҙыҡ. Әммә беҙҙең артта бөтөнләй икенсе сценарий яҙылды. Көнбайыш хакимдарының вәғәҙәләре ялған булды. Улар сәйәси үлтереүҙәргә, Киев режимының репрессияларына, иманлыларҙы мыҫҡыллауға күҙ йомоп, Украина неонационалистарын хупланы, Көнбайыш академия һәм училищеларында уларҙың офицерҙарын уҡытты, ҡоралландырҙы.

АҠШ һәм НАТО илебеҙ сигендә үҙенең армия базаларын, йәшерен биолабораторияларын урынлаштырҙы, буласаҡ хәрби хәрәкәттәр театрын үҙләштерҙе, үҙҙәренә буйһондоролған Украинаны ҙур һуғышҡа әҙерләне, һәм быны йәшермәй. Улар Югославияны, Ираҡты, Ливияны, Сүриәне емергәндә лә шулай икейөҙләнде, алдаҡ символына әүерелде, НАТО-ны беҙҙең сиккә тиклем киңәйтергә, Европала һәм Азияла яңы ракета оборонаһы райондары булдырырға, йәғни хәрби контингенттар йәйелдерергә уйланы: әлеге ваҡытта донъяла АҠШтың үҙ территорияһынан ситтә булдырған хәрби базаларынан тыш, бер генә илдең дә хәрби базаһы юҡ", - тине ил Президенты.

Шулай уҡ Владимир Владимирович уларҙың, урта һәм бәләкәй арауыҡтағы ракеталар тураһындағы килешеүҙе лә индереп, ҡоралланыу өлкәһендәге килешеүҙәрҙән сығыуын, донъяла тыныслыҡты һаҡлаусы килешеүҙәрҙе бер яҡлы өҙөүҙәрен һәм быны бер нигеҙһеҙ эшләмәүҙәрен дә билдәләне. "Беҙ 2021 йылдың декабрендә АҠШ һәм НАТО-ға хәүефһеҙлекте гарантиялаусы килешеү проекттары ебәрҙек, әммә беҙҙең өсөн мөһим булған барлыҡ позициялар ҙа кире ҡағылды. Шул ваҡытта - 2022 йылдың февралендә уларҙың Донбасста сираттағы ҡанлы каратель акцияһын башлауы өсөн барыһы ла әҙер булыуы тураһындағы мәғлүмәт бер ниндәй шик ҡалдырманы. Һуғышты улар башланы, ә беҙ уны туҡтатыу өсөн көс ҡулландыҡ һәм ҡулланабыҙ. Уларҙың Донецк, Донбасс, Лугансктан һуң артабанғы сәбе - Ҡырым һәм Севастополь булыуын аңланыҡ. Беҙ кешеләр ғүмерен һәм тыуған йортобоҙҙо һаҡлайбыҙ, ә Көнбайыштың маҡсаты - сикһеҙ власҡа эйә булыу", - тине ил башлығы. Был маҡсатта Көнбайыш 150 миллиард доллар исраф иткән дә инде, ә АҠШ-тың 2001 йылдан алып барған һуғыштарында 900 мең самаһы кеше һәләк булған, 38 миллионы - ҡасаҡ статусында.

Бөгөн Көнбайыштың Украинаны Рәсәйгә ҡаршы таран һәм полигон итеп ҡулланыуы сер түгел, һәм маҡсаттарының "Рәсәйҙе стратегик юҡ итеү", йәғни урындағы низағты глобаль кимәлдәге ҡаршы тороуға әйләндереү икәнлеген йәшермәй һәм бында инде һүҙ Рәсәйҙең артабан йәшәү-йәшәмәүенә бәйле. Көнбайыш Рәсәйҙе яу ҡырында еңеү мөмкин булмағанын аңлап, агрессив мәғлүмәт һуғышын алып бара, уны йәштәр араһында тарата, тарихты боҙоп күрһәтә, беҙҙең рухи һәм мәҙәни, дини ҡиммәттәребеҙҙе үҙгәртергә тырыша. Шундай шарттарҙа, "күп милләтле халҡыбыҙҙың күпселеге беҙҙең ғәмәлдәребеҙҙең асылын аңланы, ысын илһөйәрлек барлыҡҡа килде", тине ил башлығы һәм граждандыҡ бурысын намыҫ менән үтәүселәрҙең барыһына ла рәхмәт белдерҙе, шәһиттәрҙе бер минут тын ҡалып хәтерләргә саҡырҙы.

Көнбайыш Рәсәйгә ҡарата төрлө санкциялар булдырып, теҙләндерергә тырышыуына ҡарамаҫтан, был ил иҡтисадын нығытыуға тағы бер аҙым булды, тип билдәләне Владимир Владимирович һәм киләсәктә нимәләр эшләнәсәгенә ҡыҫҡаса байҡау яһаны. Үҙгәрештәр социаль-иҡтисади тармаҡтарҙың барыһына ла ҡағыласаҡ һәм, әлбиттә, граждандар тормошона ла ыңғай йоғонто яһаясаҡ *(тулы текст менән интернет селтәрендә танышырға мөмкин).*

Ил Президентының сығышында "яҡлап ҡаласаҡбыҙ" тигән һүҙ бик йыш яңғырауы, ниһәлер, "Артта - Мәскәү!" тигән оранға ауаздаш кеүек ишетелде. Ысынлап та, ошо бер йыл халыҡтың берҙәмлегенә һынау булды. Берҙәмлектең генә рух көсөн нығытыуын раҫланы. Юҡҡа ғына Владимир Владимирович сығышында билдәле дәүләт эшмәкәре Петр Столыпиндың һүҙҙәрен иҫенә төшөрмәне: "Рәсәйҙе яҡлағанда барыбыҙ ҙа тырышлығыбыҙҙы, бурыстарыбыҙҙы, хоҡуҡтарыбыҙҙы бер тарихи юғары хоҡуҡ - Рәсәйҙең көслө булыу хоҡуғын яҡлау өсөн берләштерергә тейешбеҙ". Артыҡын әйтеп тороу ҙа кәрәкмәй.

**Зәйтүнә НИҒӘМӘТЙӘНОВА әҙерләне.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөлә Республика балалар клиника дауаханаһы территорияһында гематология һәм онкология үҙәге төҙөлөшө дауам итә. Балалар бында онкологик ярҙамдың бөтөн төрөн дә аласаҡ. Төҙөлөш 2021 йылдың көҙөндә "Һаулыҡ һаҡлау" милли проекты сиктәрендә башланғайны. Яңы бинала онкология, гематология, иммунология бүлектәре, көндөҙгө стационар, операция блогы буласаҡ.

✓Башҡортостан Хөкүмәтендә үткән ултырышта табипҡа яҙылыу буйынса ситуация үҙгәгенең эше тикшерелде. Халыҡ табиптарға әләгә алырға тейеш, был һаулыҡ һаҡлау өлкәһенең төп бурысы, тине Премьер-министр Андрей Назаров. Көн һайын республика поликлиникаларында 4 мең табип ҡабул итә. Уларға яҙылыуҙың иң популяр ысулы - 122 берҙәм номеры. Контакт-үҙәк көнөнә 35 меңгә яҡын мөрәжәғәт ҡабул итә. Шулай уҡ республикала бер нисә айҙан яҙылыу өсөн роботлаштырылған тауыш ярҙамсыһын ҡулланыу башланасаҡ.

✓25, 26 февралдә Башҡортостандың ҡала һәм райондарында ауыл хужалығы йәрминкәләре үтәсәк. Фермерҙар етештергән продукцияны 41 майҙанда, шул иҫәптән, Өфөлә лә һатып алып буласаҡ. Ит, һөт продуктары, бал, йәшелсәләр артынан өфөләрҙе "Тулҡын" паркы эргәһендә, Спорт һарайы, Серго Орджоникидзе, Йәштәр һарайы майҙандарында ойошторласаҡ йәрминкәләргә саҡыралар.

✓Өфөлә Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Флорид Бүләковҡа таҡтаташ асылды. Драматург булараҡ, Флорид Бүләков үҙ ижадында милли фольклорҙы, башҡорт халҡының тиңһеҙ тарихын һәм үҙенсәлекле холҡон сағылдыра алды. Уның төрән фәлсәфәһе халҡыбыҙҙың йолаларына ҡыҙыҡһыныу уята, йәшәйеш мәғәнәһе, тормоштоң төрлө күренештәре хаҡында уйландыра. Ижады бөгөн дә әһәмиәтле, илдең тиҫтәләгән театрҙарында әҙиптең әҫәрҙәре сәхнәләштерелә.

✓Быйыл Өфөлә 107 йортта 311 лифт алыштырыласаҡ, тип белдерҙеләр БР Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығынан. Әле белгестәр 6 күп фатирлы йортта лифт алыштырыу менән мәшғүл. 2022 йылда 604 яңы лифт ҡуйылған. Ведомствонан хәбәр итеүҙәренсә, ҡоролмалар Регоператор булған саралар иҫәбенә башҡарыла, лифттарҙың бер өлөшө республика бюджетынан яңыртыла.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*АФАРИН!*

# БАШҠОРТ ТЕЛЕ...

## Федераль олимпиадала



**Ошо көндәрҙә Өфө фән һәм технологиялар университетында Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән Рәсәй халыҡтарының туған телдәре һәм әҙәбиәте буйынса II Федераль олимпиаданың йомғаҡлау этабы үтте. Унда республиканың төрлө район-ҡалаларынан 228 мәктәп уҡыусыһы ҡатнашты.**

Төньяҡ-көнсығыш олимпиадаһы үткән уҡыу йылында федераль исемлеккә ингәйне. Уның сиктәрендә Рәсәй халыҡтарының 29 теле буйынса 18 вузда ярыштар үткәрелә. Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән иһә, Башҡорт дәүләт университеты (хәҙер Өфө фән һәм технологиялар университеты) төп ойоштороусы булып тора. Быйыл ярыштың һайлап алыу турында 514 уҡыусы ҡатнашып, шуларҙың 228-е йомғаҡлау турына баш ҡалаға йыйылды. Республиканың 20 районы һәм 7 ҡаланынан төрлө милләт вәкилдәренән торған 8-11 класс уҡыусылары башҡорт теленә һөйөү берләштерҙе. Ойоштороусылар әйтеүенсә, олимпиадала башҡорт телен туған һәм дәүләт теле булараҡ өйрәнеүселәр ҙә бар, әммә бөтәһе лә бер төрлө һынау үтә. Был үсмерҙәрҙең белем кимәлен ғәҙел баһалау өсөн кәрәк, сөнки олимпиадала уңыш ҡаҙанғандарҙы бик шәп өстөнлөктәр көтә: еңеүсе һәм призерҙар Рәсәйҙең филология һәм педагогия йүнәлешле барлыҡ юғары уҡыу йорттарына имтихандар тапшырмай уҡырға инә ала. Бының өсөн абитуриенттың рус теле буйынса Берҙәм дәүләт имтиханы һөҙөмтәһе 75 балдан юғары булырға ғына тейеш. Бынан тыш, Өфө фән һәм технологиялар университетын һайлағандар быйылдан 50 мең һум стипендия алып уҡыясаҡ. Уҡыусыларҙың еңеүсе таныҡлыҡтары дүрт йыл дауамында үҙ көсөндә була, ә был иһә үҙ сиратында 8-се класта уҡығанда ҡатнашҡан һәм юғары һөҙөмтә күрһәткән бала олимпиадала йыл да ҡатнашмаһа ла, юғарыла телгә алынған өстөнлөктәр менән ҡуллана ала, тигәнде аңлата.

- Был олимпиада шундай юғары кимәлдә икенсе йыл үткәрелә. Быйыл ҡатнашыусылар һаны тағы ла күберәк булыуы ҡыуандыра. Олимпиада үҙенсәлекле шарттар тәҡдим итеүе менән мәктәп уҡыусылары өсөн үткәрелгән башҡа ярыштарҙан айырылып тора. Әйткәндәй, былтыр олимпиадала еңеү яулағандарҙың береһе Динара Григорьева беҙҙең Башҡорт филологияһы, шәрҡиәт һәм журналистика факультетына имтихандарһыҙ ҡабул ителеп, 27 мең һум стипендия алып уҡып йөрөй. Был башҡорт телен өйрәнергә теләүселәр һанын арттырыуға, уны популярлаштырыуға булышлыҡ итер, тип ышанабыҙ, - ти факультет деканы Гөлфирә Абдуллина.

Олимпиаданың йомғаҡ һынауҙары башҡорт теле һәм әҙәбиәтенә ҡағылған һорауҙарҙа яуаптар һәм текст өҫтөндә эш рәүешендә булып, уҡыусыларға 4 сәғәткә яҡын ваҡыт бирелде. Ҡатнашыусыларҙың береһе, Стәрлетамаҡ ҡалаһы 30-сы мәктәбенең 11-се класс уҡыусыһы Әҙилә Ырыҫҡолова әйтеүенсә, бындағы байрамса һәм дуҫтарса мөхит уңғай көйләнергә ярҙам иткән. "Мин икенсе тапҡыр ҡатнашам был олимпиадала һәм ойоштороусыларҙың эшен телгә алып китмәй булмай: юғары уҡыу йортона килеп ингәс тә әйҙүкләп ҡаршы алып торалар, бинаның өсөнсө ҡатында эҫе сәй эсеп алырға тәҡдим иттеләр, тамаша залында йөкмәткеле сәләмләү өләшө лә көйәфтә күтәреп ебәрҙе. Бындай асыҡ, ихлас мөхиттә күңелем тынысланып, еңеүгә көйләнде. Әйткәндәй, былтыр мин призер булғайным, быйыл үҙаллы әҙерләнһәм дә, тағы юғарыраҡ һөҙөмтәгә ынтылырға тырышам. Быға тиклем 17-се мәктәптә белем алдым, башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса Земфира Мөхәррәм ҡыҙы Хәйруллина бәләкәй кластарҙан алып мине төрлө ярыштарға, олимпиадаларға, конференцияларға әҙерләгәйне. Бөгөн бында тороуыма тап уға рәхмәтлемен, сөнки яңы уҡыу йылы башланғас күсергә тура килгән 17-се мәктәптә башҡорт телен туған тел булараҡ өйрәнеүсе төркөмгә балалар һаны тулмағанлыҡтан, дәрестәр юҡ", - ти Әҙилә.

Ә бына Бөрйән районы Әбделмәмбәт ауылы мәктәбенең 10-сы синыф уҡыусыһы Сынтимер Билалов башҡорт теленән ойошторолған төбәк-ара олимпиадала ҡатнашыуын, бында төүгә тапҡыр килеүен һөйләне. Ул киләсәктә программист һөнәрен һайларға ниәтләһә лә, туған телде белеү мотлаҡ кәрәк, тип иҫәпләй. Бына шундай аңлы, аҡыллы һәм маҡсатлы балалар йыйылғайны был II Федераль олимпиаданың йомғаҡлау этабына. Улар дәррәү йыйылып, университеттың аудиториялары буйлап таралғас, уҡытыусылар балаларҙың һөләттәрен үҫтереү буйынса тәжрибә уртаҡлашырға ҡалды. Олимпиаданың һөҙөмтәләре саҡ ҡына һуңғараҡ билдәле буласаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Рәсәй халыҡтары телдәрен үҫтереү буйынса шундай оло эш башҡарылыуына, был исемлеккә беҙҙең туған телебеҙ ҙә индерелеүенә Федерация советының Мәғариф, фән һәм мәҙәниәт буйынса комитет рәйесе Лилиә Ғүмәроваға бурыслыбыҙ. Икенсе тапҡыр ғына ойошторолған был олимпиаданың ғүмере оҙон була күрһен. Сөнки ул башҡорт теле һәм әҙәбиәтен яратып өйрәнгән, белгән уҡыусыларға тырышлыҡтарының һөҙөмтәһен ысынлап та асыҡ күрһәтә, лайыҡлы баһалай торған сара.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

*ҠЫҪҠАСА*

# ТАҒЫ БЕР ПАРК...

**Быйыл май аҙағында Өфөнөң Черниковка бистәһендә Нефтехимиктар паркы асыла. Был турала Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡаланың 1947 йылда нигеҙ һалынған боронғо рекреацион зоналарының береһен яңыртыу барышы менән танышҡандан һуң әйтте.** Нефтехимиктар паркын реконструкциялау проектында иң мөһиме - ингән ерҙә тарихи арканы тергеҙеү ине. Радий Хәбиров яңы арканы төҙөү барышы менән танышты. Подряд ойошмаһы вәкилдәре әйтеүенсә, колонналарҙың бейеклеге - 8,5 метр, арканың киңлеге - 13 метрҙан ашыу. "Паркта балалар һәм спорт майҙансыҡтары тулыһынса әҙер, яҡтыртыу ҡорамалдары ҡуйылған, юлдар һалынған, видеокүҙәтеү камералары монтажлау бара. Колонналар граниттан һәм тәбиғи таштан эшләнгән", - тип билдәләне төҙөүселәр. Парктың ландшафт үҙенсәлеге һаҡлап ҡалынған - ҡарт һәм ауырыу ағастарҙы ғына йыҡҡандар, уларҙың урынына бейек ағастар ултыртҡандар. Парк биләмәһен йәшелләндереүгә, ағастар, ҡыуаҡтар һәм сәскәләрҙең төрлө сорттарын арттырыуға иғтибар бүленгән.

✓ **Башҡортостанда "Үлем юлы" тип йөрөтөлгән Өфө - Благовещен трассаһында аварияларҙы һаны алты тапҡырға кәмегән.** Үҙған йылдың ете айында туғыҙ кеше һәләк булған, күрелгән сараларҙан һуң биш айҙа - бер генә кеше. Был юл республика трассаларының иң хәүефлеһе ине. Участка яҡшы торошта булған, ләкин водителдәр йыш ҡына ҡаршы һыҙатҡа сыҡҡан. Радий Хәбировтың ҡушыуы буйынса чиновниктар һәм ЮХХДИ ҙур комплекслы план төҙөгән. Участкала һул яҡҡа боролоуҙы тыйғандар, кәртәләр һәм тауышлы һыҙаттар ҡуйғандар, 300-гә яҡын юл билдәләре һәм яңы фотовидеотеркәү комплекстары урынлаштырғандар, тип һөйләне транспорт һәм юл хужалығы министры Александр Клебанов. Ошондай комплекслы эш тәжрибәһен уңышлы тип танығандар. Радий Хәбиров уны фажиғәләр күп теркәлгән башҡа юл участкаларында ла ҡулланырға ҡушты.

✓ **Башҡортостанда туғандары махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан студенттарға булышлыҡ итеү буйынса ситуация үҙәге эшләй башланы.** Ул ауыр тормош хәлендә ҡалған һәм йөмғиәттең, дәүләттең өҫтәмә ярҙамына мохтаж студенттарға адреслы социаль ярҙам өсөн республика юғары уҡыу йорттары ректорҙары советының ҡарары буйынса булдырылды. Хәбәр ителеүенсә, үҙәк республиканың юғары уҡыу йорттары ресурстарын берләштерә, бер нисә йүнәлеш буйынса студенттарға, хеҙмәткәрҙәргә ярҙам күрһәтеү ҡарала. Мәҫәлән, мобилизацияланған граждандарҙың ғаиләләренә юридик яҡтан ярҙам итеүҙе Өфө фән һәм технологиялар университеты контролдә тота. М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты белгестәре телефон аша психологик ярҙам күрһәтә. Ирекмәнлек эшмәкәрлеге өсөн Башҡорт дәүләт медицина университеты яуаплы. Мобилизацияланғандар һәм уларҙың ғаилә ағзалары өсөн гуманитар ярҙам йыйыу менән Башҡорт дәүләт аграр, Өфө дәүләт нефть университеттары вәкилдәре шөғөлләнә. Ситуация үҙәгенә 8 (800) 550-67-01 телефоны буйынса шылтыратырға мөмкин. Колл-үҙәк эш көндәрендә иртәнге 9-ҙан киске 5-кә тиклем эшләй.

# Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклеге онотмағыҙ.**

## Теш ҡаҙнаһы

**Пародонтоз һәм теш ҡаҙнаһы ҡанаған осраҡта түбәндәге халыҡ ысулдарын ҡулланып, хәлде яҡшыртырға мөмкин.**

❖ Пародонтоздан ҡотолоу өсөн теш ҡаҙнаһына тоҙ ҡушылған бал ыуырға кәрәк. Бының өсөн 20 грамм балға 5-10 грамм аш тоҙо ҡушырға һәм ирегәнсе болғатырға, сепрәк киҫәгенә һалырға һәм тешкә ышҡырға.

❖ Пародонтоз йәки теш ҡаҙнаһының башҡа ауырыуҙарынан теш онтағына 0,5 грамм ҡылыс үлән (аир болотный) онтағын ҡушырға: был әҙерләмә бер тапҡыр ҡулланыуға иҫәпләнгән. Шуның менән көнөнә 3 тапҡыр тешкә таҙартырға.

❖ Кариес һәм пародонтоз булғанда ауыҙҙы прополистың 10-15 процентлы спиртлы экстракты менән сайҡарға кәрәк: 1 стакан һыуға 20 тамсы.

❖ 5 ҡалаҡ ваҡлап туралған ҡарағай ылыҫы (ботаҡтарһыҙ), 2 ҡалаҡ төйөлгән гөлйемеш емеше һәм 1 ҡалаҡ ваҡлап туралған һуған ҡабығын бергә ҡушып, 1,5 литр ҡайнар һыу ҡойорға һәм ҡайнар хәлгә еткереп, тағы 5 минут утта тоторға. Был бер көнлөк дауа. Теш ҡаҙнаһы ҡанһырағанда уны йылы көйөнсә сәй кеүек эсергә.

❖ Бинтты аҡ шыршының таҙа майына манып, теш ҡаҙнаһына 10-15 минутҡа ябырға. Шунан артыҡ тотмаҫҡа, юғиһә, яндырыуы ихтимал. Шул рәүешле 15-20 тапҡыр дауаланырға. Тағы ла 6 айҙан ҡабатларға кәрәк.

❖ Теш ҡаҙнаһы ҡанағанда уға меңъяпраҡ үләненен яңы һығып алынған һутын һөртөү кәңәш ителә.

❖ Теш ҡаҙнаһын нығытыу өсөн көн һайын һарымһаҡ менән ыуырға кәрәк. Был рәүешле 2 аҙна дауаланырға. Кәрәк булһа, тағы 5 көндән ҡабатларға була.

❖ Теш ҡаҙнаһы ҡанағанда ауыҙҙы имән ҡайырыһы һәм йүкә сәскәһенән эшләнгән йылымыс төнәтмә менән сайҡарға була. Бының өсөн йүкә сәскәһе һәм имән ҡайырыһы онтағын 1:2 нисбәтендә ҡушырға. Шуның 1 балғалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, талғын утта 3 минут йылытырға һәм һөҙөргә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

## ЙОЛАНДАН ЙӨН ТАП!



# БАШҠОРТ БИҘӘҮЕСТӘРЕ

### Селтәр

Ғәҙәттә, селтәр тураһында һүҙ барғанда уның ҙур булыуы һыҙыҡ өҫтөнә алына. Үрҙә ҡарап киткән фотолағыһы ла 54 см тәшкил итә. Шул уҡ ваҡытта, музей фондтарынан, шәхси коллекцияларҙан һәм яҙма сығанаҡтарҙан күренеүенсә, селтәрҙең ҡыҫҡараҡтары ла бар. Мәҫәлән, 30 см оҙонлоғондағы селтәр Археология һәм этнография музейында һаҡлана (Йылайыр районынан).



Ҡыҫҡараҡ итеп эшләнгәндәрен айырым да, һаҡал менән бергә лә тағып йөрөү традицияһы булғанлығына ишара яһаусы мәғлүмәттәр бар. Миҫал рәүешендә 2015 йылда донъя күргән "Башҡорттар" китабында бирелгән фотоны ҡарап китергә мөмкин. Өс ҡатын-ҡыҙ ҙа ҙур булмаған селтәр тағып алған. Шул уҡ ваҡытта, һул яҡтан икенсе торғанында тағы бер биҙәүес күренә. Формаһы һәм төҙөлөшөнә ҡарағанда - һаҡал. Был күренеш осраҡлы ғына түгел. Тәбәкте өйрәнеүсе ғалимдарҙың, яҙыусыларҙың яҙмаларында башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының бер юлы ике төрлө биҙәүес тағып йөрөүҙәре тураһында һүҙ бара. Быҙдай күренешкә, мәҫәлән, Һаҡмар буйы башҡорттарында булып киткән П. Небольсин тап була. Ул һаҡалдың селтәр аҫтынан тағылыуы тураһында яҙа.



### Биҙәүестәрҙең нигеҙе

Биҙәүестәрҙең тарихы тураһында һүҙ алып барғанда тағы бер мөһим мәсьәләне иғтибарҙан ситтә ҡалдырырға ярамай - ул да булһа селтәр, һаҡал, яғаларҙың нигеҙе. Яҙма сығанаҡтарға, бөгөнгө көндә музей фондтарында һәм шәхси коллекцияларҙа һаҡланыусы ҡомартҡыларға нигеҙләнеп, шуны әйтергә мөмкин: башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары биҙәүестәрҙең нигеҙен эшләү өсөн тула, киндер һәм кизе-мамыҡ туҡымаларға өҫтөнлөк биргән.

**Азат ҒАРИПОВ,**
**этнограф.**
**"Башҡорт биҙәнеү әйберҙәре"**
**китабынан.**

## УЙЛЫҒА - УЙ

# ИЛ ҺАҠЛАУ ҺӨНӘРЕ...

## ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған

**Халҡыбыҙҙа "Атанан күргән - уҡ юна, инәнән күргән - тун бесә" тиҙәр. Элегерәк ошо әйтемдең мәғәнәһенең төпкөлөнә әллә ни төшөп ҡарағаным юҡ ине. "Тун бесә" тигәне, әлбиттә, ҡыҙ баланың тормошта кәрәк була торған шөғөлдәрҙе башлыса әсәһенән өйрәнеүе хаҡында инде: бала ҡарау, аш бешереү булһынмы, иҙән, кер йыуыу йә иһә, әлеге әйтмешләй, ниҙер бесеү-тегеү - барыһы ла гүзәл заттарыбыҙға ғүмерлеккә бәйләнгән кәсеп бит инде ул. Һәр заманда ла. Ә бына "уҡ юныу"... Ни өсөн әлеге мәҡәлдә тап ана шул "уҡ" телгә алына? Ир (атай) кешенең иң төп кәсебе - ҡорал менән бәйләнешле булыуына ишара түгелме был? Икенсенән, был мәҡәл, башлыса, беҙҙең халыҡҡа ҡағылышлы булыуға ла оҡшай.**

Әйе, борон-борондан ата-бабаларыбыҙ үҙенең тыуған төйәген һаҡлап ғүмер иткәнен иҫләткән һымағыраҡ шул был әйтем. Ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ әлеге үҙ эше менән булышҡан кеүек, ир-егеттәрҙең дә үҙҙәренә генә хас төп кәсебе булыуы хаҡында. Тыныс шарттарҙа, әлбиттә, көслө зат ер һөрә, иген сәсә, урман киҫә, йорт һала, мал тәрбиәләй, ғаиләһенең ашауын, кейенеүен хәстәрләй. Әммә был донъяла әҙәм балаһы бер ваҡытта ла тиерлек дошмандан азат булмай. Шуға күрә лә тыуып үҫкән төйәген тышҡы илбаҫарҙарҙан һаҡлау электән ир-егеттәребеҙҙең төп һөнәре булғандыр. Ата-олаталарыбыҙ бер ҡасан да уҡ-һаҙаҡһыҙ, йәғни, ҡоралһыҙ булмаған тимәксемен. "Яҡшы атҡа менгән, ҡулына алған, уҡ-һаҙаҡ та тиген ҡоралын. Аямаған йәнен, түккән ҡанын, һис бирмәгән башҡорт Уралын". Әйтемдең әтнәкәһе тап ана шул ир-егеттәребеҙ иңенә әленән-әле төшөп тора торған йөкләмәгә ишара булһа кәрәк. Шуны ла һәр саҡ иҫебеҙҙә тотайыҡ: ҡартатайҙарыбыҙ борон-борондан бер ҡасан да сит ерҙәргә хужа булыу, уларҙы яулап алыу менән булышмаған, һәр саҡ гәҙел көрәш алып барған.

Ерен, һыуын, урманын башҡаларҙан ҡурсалап, йыш ҡына ихтилалдар күтәреп торған ата-бабаларыбыҙ менән солох төҙөгәс, Рәсәй милләтебеҙгә тигенгә генә мотлаҡ хәрби бурыс йөкмәтмәгәндер. Ил батшаһы ир-егеттәребеҙҙең һуғышсанлыҡ һәләтен, ҡыйыулығын, үҙ бурыстарын үтәүгә намыҫ менән ҡарауын, әлбиттә, бик яҡшы белгән. Ошоғаса "Башҡортостан" тип аталған төйәгебеҙҙең бөтөнлөгө һаҡланып килеүе өсөн дә беҙ ана шул ҡаһарман ҡартатайҙарыбыҙға бурыслыбыҙ, тип һанайым. Ер йөҙөндә әленән-әле сыҡҡылап торған һуғыш афәттәре халҡыбыҙҙы бер ҡасан да урап үтмәгән шул. Һуңғы ике быуатты ғына алып ҡарағанда ла Наполеон яуына ҡаршы утыҙлаған башҡорт полкы, Бөйөк Ватан һуғышы мәлендә айырым "Башҡорт атлы кавалерия дивизияһы" тәҙәлөү ҙә күп нәмә тураһында һөйләй (Башҡорттоң Француз яуына ҡаршы торған "утыҙлаған полкы" ни тиклем ҙур көс булыуын күҙ алдына килтереү өсөн ошо сығыштарыуға иғтибар итәйек: бөгөнгө мото-уҡсыларҙың утыҙ полкы ете-нигеҙләгән дивизияны тәшкил итә).

Беҙ, инде олпат йәштәге ир-аттар быуыны, Совет Армияһында хеҙмәт иттек. Бына ошо СССР-ҙың ҡоралы көстәре сафында граждандыҡ бурысын үтәгән егеттәребеҙ ҙә үҙҙәренең намыҫлылығы, эш һөйөүсәнлеге менән әрме коллективында һәр саҡ бик юғары баһаланды. Был - шапырныу түгел, ҡәҙерле туғандар, был - ысынбарлыҡ! "Ваши ребята - самые лучшие. Они надежные, добропорядочные..." тигән һымағыраҡ һүҙҙәрҙе башҡа офицерҙарҙан әленән-әле ишетеүем күңелгә бәлзәм булып ята ине. Башҡортостандан килгән



егеттәр әрмелә әллә ҡайҙан уҡ айырылып тора шул, әйтерһең дә, улар - бер атаәсәнең улдары (Йәшерен-батырыны юҡ: һәр халыҡтың да ир-аттары араһында бер аҙ "тәртипһеҙерәктәре", урыҫса әйткәндә, "хулигандары" була. Бәгзе малайҙарыбыҙ ҙа был йәһәттән ташлама түгел. Хатта ана шул егеттәр әрме сафына килеп эләгеү менән, күпселек осраҡта бөтөнләйгә икенсе төрләгә әйләнә. Күп кенә шундай малайҙарҙың армиянан ифрат та етди, әҙәпле егет булып ҡайтҡас та матур ғаилә төҙөп, йорт һалып, һин дә мин йәшәп китә улар). Үҙем оҙайлы хәрби хеҙмәт кисергән отставкалағы офицер булараҡ, ана шул хаҡта һәр саҡ кинәнеп һөйләргә яратам. Ҡасандыр яҙыусыы Әхмәр Үтәбай әрмеләге егеттәребеҙҙе бөтә донъяға даны таралған, иң юғары сифатлы булған башҡорт балы менән дә сағыштырғайны. Хәйер, бөгөнгө әрмебеҙ ҙә ана шул Совет Армияһының балаһы бит инде. Тигеҙ сафта һоро шинель кейеп, билдә ҡайыш менән һыҡтыра быуып, әҫәрләнеп йырлап йөрөгәндәребеҙ әле генә булған һымаҡ. "Родилась ты под знаменем алым, в восемнадцатом грозном году. Ты всегда всех врагов побеждала, победила фашистов орду..." Хатта Советтар Союзы тарҡалғас та, һаман да ана шул йырҙы йырланыҡ. Бәлки, бөгөнгө һалдаттарыбыҙҙың "строевой" йыр репертуарында ла барҙыр әле ул йыр.

Тик, үкенескә, һәр саҡ йырлап ҡына йөрөп булмай шул. Бар нәмә лә беҙҙең ихтыярыбыҙҙа түгел. Күп кенә егеттәребеҙ ошо көндә Ватаныбыҙ ҡушҡан ифрат хәүефле булған сираттағы йөкләмәне үтәү өҫтөндә. Ғүмерен үлем ҡурҡыныслы аҫтында тотоп, ауыр задаилар үтәгән "камуфляж" кейемдәге көслө зат вәкилдәре айырыуса оло ихтирамға лайыҡ тип һанайым. Махсус операцияға алыныусы ир-егеттәргә кәңәшем шул: Аллаһы Тәғәләне һис бер ваҡыт иҫегеҙҙән сығармағыҙ, "Лә иләһә иллә Аллаһ"ты телегеҙҙән төшөрмәгеҙ!

Күптән түгел телетапшырыуҙарҙың береһендә Азат Саҙриевтың репортажын күреп ҡалғайным. Яугир яҡташтарыбыҙҙың ҡумаҡлашып ултырып намаҙ уҡығанын төшөрөп алғандар. Миләттәштәремдең Аллаһы Тәғәләгә һыйынып, Уға баш эйеүен күреп, күңелем тулды, егеттәребеҙ өсөн именлек һорап, Раббыбыҙға доға ҡылдым. Бына ошо "махсус хәрби операция"нан һалдаттарыбыҙҙың именаман ҡайтыуын үтенеп, барыбыҙ ҙа Аллаһы Тәғәләнән ялбарып торайыҡ, ҡәҙерле туғандар. Һәммәбеҙҙең именлеге фәҡәт Раббыбыҙҙан ғына булыуы һәм һәр саҡ Уға ғына һыйыныу кәрәклеге хаҡында онотмайыҡ. Ошо юҫыҡта миҫал итеп йыш ҡына Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан үҙемдең ҡайнымды килтерәм. Гвардия ефрейторы Арыҫланов Усман Дәлха улының 1945 йылдың мартында һуғыштан әсәһенә яҙған һуңғы әсмөйөшлө хатында ошондай юлдар бар: "...Польшаны азат итеп, хәҙер инде Германияның үҙ ерендә һуғышабыҙ. Берлиндан ҡырҡ саҡрымда торабыҙ. Тиҙҙән ул да беҙҙеке буласаҡ. Баш осонан снарядтар бер-бер артлы осоп тора. Әсәй, Ҡыҙыл Армияның фашистарҙы еңеүен һорап, Аллаһы Тәғәләгә һәр саҡ доға ҡылып тор. Инде мин ошо һуғышта юғалып ҡалһам да, һис ҡайғырмағыҙ. Аллаһ ҡушһа - үленер, ҡушмаһа - йөрөләр..." Фәҡәт Аллаһы Тәғәләнең Үҙенә генә һыйынып, Уға ғына тәүәккәлләгән был һуғышсы ошо хатын ебәргәс тә, бер-ике көндән ҡаты яраланып, тыл госпиталенә оҙатыла. Раббыбыҙ уға 89 йәш йәшәргә насип иткән. Баймаҡ районы Байым ауылында иң һуңғы һуғыш ветераны булып донъянан китте. Борон ата-бабаларыбыҙ ҙа ниндәй генә яуҙа булмаһын, Аллаһҡа ғибәҙәт хаҡында бер ҡасан да онотмаған. Илдәге атай-әсәйҙәр, ҡартатай-ҡартәсәйҙәр, барыбыҙ ҙа бына ошо малайҙарҙың иҫән-һау әйләнеп ҡайтыуҙарын, һуғыштың тиҙерәк тамамланыуын Аллаһтан һорайыҡ, үҙебеҙ ҙә мотлаҡ ғибәҙәттә булайыҡ!

Бынан тыш, мәктәп йәшендәге малайҙарыбыҙға ҡағылышлы тағы бер мәсьәлә. Уларға ир-егеттәрсә тәрбиә биреүгә иғтибар йүнәлтеү зарур тип һанайым. Беҙ мәктәптә уҡығанда әрме хеҙмәтен тамамлап ҡайтҡан ағайҙар "башланғыс хәрби әҙерлек" дәресе алып бара торғайны. Военрук ағайҙарыбыҙҙың дәрескә үҙенең значоктар менән биҙәлгән "дембель" кейемендә килеүе беҙгә айырыуса ныҡ оҡшай ине. Башлыса хәрби устав, ҡорал менән эш итеүҙе өйрәттеләр. Ҡырға сығып мылтыҡтан, хатта автоматтан да аттырҙылар. Малай халҡы, әлбиттә, ошо дәресте яратты. Хәҙер, отставкалағы хәрби табип булараҡ, шул хаҡта уйлайым: ана шул дәрестәрҙә, ни өсөндөр, яралыларға "тәүге һәм үҙ ярҙам" (само и взаимопомощь) итеү ҡағиҙәләрен беҙгә бөтөнләй өйрәтмәнеләр. Ошо мәсьәләне күтәреүемдең сәбәбе - һуңғы осор мәктәптәрҙә НВП-ны (начальная военная подготовка) ҡабаттан тергеҙеү хаҡындағы хәбәрҙәр йөрөүе. Бик хуп. Тик ана шул дәрестәрҙә тәү ярҙам мәсьәләләренә күберәк ваҡыт бүлһендәр ине. Куйбышев хәрби медицина факультетында уҡығанда беҙҙең, академия курсанттарының, иғтибарын был мәсьәләгә ныҡ ҡына йүнәлтә торғайнылар. Үҙ-үҙенә йә яралы иптәшенә ярҙам күрһәтә белеү - яу ҡырында күп кенә һалдаттың ҡан юғалтыу, травматик шок һәм башҡа әҙләгөүҙәрен иҫкәртеп, нәтижәлә уларҙың ғүмерен һаҡлап ҡалыуға сәбәпсе була. Беҙҙең уҡытыусыларыбыҙ - тәжрибәле хәрби врачтар генерал Ватутиндың ни сәбәпле һәләк булыуын миҫал итеп килтерәләр ине. Немецтарҙың засадаһына эләгеп, бот тамыры ("бедренная артерия") йәрәхәтләнеүе арҡаһында күп ҡан юғалта был генерал. Ә уның менән машинала бергә барған башҡа хәрбиҙәр уға тейешенсә тәүге ярҙам күрһәтә алмай... Артериаль ҡан ағыуын туктатыу өсөн дөрөҫ жгут һала белеү һәм башҡа ысулдарҙы рядовой һалдаттан алып генералғаса белеү мотлаҡ. Донъялар тыныс түгел бит. Иртәгә ни булырын бер Аллаһ ҡына белә. Әленәнәле һуғыш маҙар сыҡҡылап тора. Шуға күрә лә, мөмкин тиклем, һәр нәмәгә әҙер булыу кәрәк.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**отставкалағы хәрби табип.**

✓ *Ошо дәүерҙә Көньяҡ Уралда һыу культы барлыҡҡа килә. Миҫал итеп "Урал батыр" героик эпосында һыу эйәһенең мәрхәмәтенә өлгәшеү маҡсатында ҡыҙҙарҙы ҡорбан итеү хаҡындағы сюжет булыуын килтерергә була.*



ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Беренсе киҫәк. Боронғо дәүер.

### Өсөнсө бүлек. Иртә тимер эпохаһы



Урта Азия территорияһында зороастризм бындағы дәүләттәрҙең рәсми дине статусын алһа, Ҡаҙағстан, Үҙәк Азия, Көньяҡ Себер, Көньяҡ Урал һәм Түбәнге Волга буйы күскенселәрендә зороастризмдың төп идеялары урындағы дини культтар менән тығыҙ үрелә барып, үҙенсәлекле төҫ ала. Шуға күрә ортодоксаль, йәғни рәсми зороастризмды уның маздеистик тип нарыҡланған периферия варианттарынан айырып ҡарайҙар. Ошо положениеға ярашлы, Көньяҡ Уралдың малсылыҡ менән шөғөлләнгән ҡәбиләләренең динен шулай уҡ маздеистик тип классификациялау яҡшыраҡ.

Көньяҡ Урал малсылары диненең маздеистик характерҙа булыуы ҡурғандарҙа табылған материалдарҙа асыҡ сағылыш тапҡан. Уларҙа, мәҫәлән, ер өйөмө аҫтында, уның боронғо өҫкө ҡатламы кимәлендә, ҙур усаҡ ҡалдыҡтары табылған. Ҡәберҙең ағас түшәме өҫтөнән ер өйөмө күтәрелгән, ҡәбер эсенә үтеп инеү урыны асыҡ ҡалдырылып, күпмелер ваҡыт үтеүгә ҡәберҙең ағас ҡоролмаларына ут төртөлгән, ул янып бөтә барыу менән өҫтән ер емерелеп төшөп, утты һүндергән кеүек тойола. Һирәк-һаяҡ мәйетте яндырыу осраҡтары ла булған.

Ҡурғандарҙың ер өйөмдәре аҫтында ҙур усаҡтар булыуын ошолай аңларға була: Урта Азияның ул замандағы халыҡтарында ут культы иң мөһимдәрҙән һаналған, баш илаһ Ахура Мазданы кәүҙәләндергән ут күк йөҙөнә, ҡояшҡа тиңләнгән. Массагеттар ҡояшты шулай уҡ үҙҙәренең хужаһы итеп хөрмәтләгән. Урта Азия ҡалаларында изге уттар янып торған ғибәҙәтханалар төҙөлөүе, уларҙа ҡорбан килтерелеүе билдәле. Төньяҡ Каспий һәм Көньяҡ Урал арауығындағы далаларҙа йәшәгән дах-массагеттарҙа ут, культ объекты булараҡ, шулай уҡ хөрмәт ителгән. Улар тураһында Геродот шулай яҙа: "...массагеттар, бер урында йыйылышып, усаҡ тоҡандыралар һәм шунан ян-яҡлап ултырышалар һәм утҡа емештәр ташлайҙар. Яндырылған емеш еҫенән улар, эллиндар шараптан иҫергәндәге кеүек үк, иҫереү халәтенә инәләр. Утҡа ни тиклем күберәк емеш ташлаһалар, уларҙы иҫереү шул тиклем нығыраҡ биләй: ахырҙа улар, һикерешеп тороп, бейей башлайҙар, йырлайҙар..." "Улар табынған берҙән-бер илаһ - ҡояш. Улар ҡояшҡа аттарын ҡорбан итәләр, ошолай итеп ҡорбан килтереүҙең әһәмиәтен иң шәп булған илаһҡа ер йөҙөндәге иң шәп йән эйәһен ҡорбан итеүҙә күрәләр".

Ошо дәүерҙә Көньяҡ Уралда һыу культы барлыҡҡа килеүе мөмкин, һәм уға шулай уҡ ҡорбан килтерелгән, шул иҫәптән кешеләр ҙә. Ошоға миҫал итеп "Урал батыр" героик эпосында һыу эйәһенең мәрхәмәтенә өлгәшеү маҡсатында ҡыҙҙарҙы ҡорбан итеү хаҡындағы сюжет булыуын килтерергә була. Ә ҡош культының иң юғары кимәлгә етеүен ошо дәүер ҡәүемдәре инаныстарында ҡоштарҙы ҡурсалаусы Һомай алиһәһе булыуы раҫлай. Был күренеш иң боронғо Урта Азия дәүләттәрендә (Кангюй, Хорезм, Согд һәм башҡалар) ҡош культына мөһим урын бирелгән зороастр динен ҡанунлаштырыу менән туранан-тура бәйле.

Ҡош культы ата-бабаларыбыҙҙың иртә яҙ етеү менән, риүәйәттәрҙә бәйән ителгәнсә, "ҡар һыуҙары аға башлағас, ҡоштар ҡайтҡас, үлән йәшәргәс" байрам итә торған бер байрамында (культында) асыҡ сағылыш тапҡан (бында башҡорттарҙың "Ҡарға бутҡаһы" байрамы күҙ уңында тотола. - **Тәрж. иҫк.**). Зороастризм тәғлимәтенә табыныусылар өсөн яҙ килеүе билдәле бер сәбәп арҡаһында айырыуса иҫтәлекле булған. Ошо тәғлимәткә ярашлы, үлгәндәрҙе ерләрҙән алда уларҙың мәйеттәрен ҡоштар һәм йәнлектәр ашаһын өсөн йылына ике тапҡыр ғына, ҡоштар осоп ҡайтҡанда һәм дә көҙҙәрен, үләндәр һарғайғас һәм япраҡтар ҡойола башлағас, күтәренке урындарға һалып ҡуйылырға тейеш булған. Әгәр ҙә кеше башҡа бер миҙгелдә вафат булһа, Геродот яҙғанса, уның "тынһыҙ тәне үлектәр өсөн тәғәйенләнгән махсус йорттарҙа бер көн... ун... етмеш... көн, ҡоштар осоп килгәнсе..." ятырға тейеш була. Инаныстарға ярашлы, өс тәбиғәт стихияһын: һыуҙы, утты һәм ерҙе кеше мәйете менән бысратмау талап ителә. Ошо маҡсатта мәйеттәр махсус түшәмәләргә, ағастарға йәиһә ошондай башҡа нәмәләргә генә һалып ҡуйылған. Икенсе бүлектә әйтелгәнсә, мәйеттәрҙе билдәле бер урынға һалып ҡуйыу ритуалында үлгәндәрҙең йәндәре ҡоштар ярҙамында Ахура Мазда батшалығына осоп барып, һуңынан ямғыр тамсылары йәиһә башҡа тәбиғәт күренештәре рәүешендә тормошҡа яңынан ҡайтһын өсөн булышлыҡ итеү сағыла. Тамам таҙаланған кеше һөйәктәре балсыҡ һауыттарға, кес кенә табуттарға (оссуарийҙарға) һалынған һәм ерләнгән. Урта Азия территорияһында ошо рәүешле ерләү йолаһы б.э. тиклем VII-VI быуаттарҙан алып VIII быуат баштарына ҡәҙәрле, ошо төбәктә мосолман дине таралғансы, өҙлөкһөҙ итә. Евразия далаларының маздеистик динде тотҡан, малсылыҡ менән шөғөлләнеүсе ҡәбиләләрендә ошо ритуал төрлө төҫмөрләнеш ала. Бында, Көньяҡ Уралда, үлгәндәрҙе ер өҫтөнә ҡуялар (бура эсенә), уны таш өйөмө менән ҡаплайҙар, йәиһә тау түбәләрендә тәрән булмаған ҡәберҙәрҙә ерләйҙәр. Был тулыһынса зороастрик ерләү йолаһы талаптарына тура килә. Ошо фекер башҡорт фольклоры материалдарында ла сағылыш тапҡан. "Урал батыр" эпосында ҡоштарға кешене ҡорбан итеү, үлгәндәрҙең мәйеттәрен ҡоштарға ем итеп сығарып ҡуйыу күренештәре иҫкә алына.




*Карта № 4. Археология мәғлүмәттәре буйынса Көньяҡ Уралда иртә тимер быуаты эпохаһы ҡәбиләләре йәшәгән төбәктәр: 1 - городец мәҙәниәте; 2 - ананьин мәҙәниәте; 3 - Көнсығыш Урал аръяғының һунарсы-малсылар ҡәбиләләре; 4 - күскенсе малсылар ҡәбиләләре: дайҙар, исседондар, иирктар, аримаспtар, аргиппейҙар, сактар, массагеттар; 5 - скифтар, савроматтар*

Б.э. тиклемге V быуатҡа ҡараған Мечетсай ҡурғанын ҡаҙып асҡанда мәйет яндырыу эҙҙәре һаҡланған ҡәберҙә 60 см оҙонлоғондағы күмерләнгән тирәк сыбыҡтары бәйләме табыла. Тикшеренеүсе К. Ф. Смирнов дах-массагеттарҙа ошондай сыбыҡтар күрәҙәлек итеү сараһы итеп ҡулланылған, тип иҫәпләй. Грек тарихсыһы Геродот мәғлүмәтенә ярашлы, скифтар "...күп сыбыҡтар ярҙамында ошолай күрәҙәлек ҡыла. Бик ҙур сыбыҡ бәйләмдәрен килтерәләр һәм ергә һалалар. Шунан бәйләмде сисәләр һәм һәр сыбыҡты берبер артлы теҙеп һалалар һәм шунан алда ни буласағын әйтәләр. Шул саҡта күрәҙәселәр сыбыҡтарҙы яңынан берәмләп йыйып алалар һәм тағы ла бергә ҡушалар. Ошолай итеп күрәҙәлек итеү алымы уларҙа скифтарҙан ҡалған". Зороастризм диненең боронғо табыныусылары сыбыҡ бәйләмдәрен күрәҙәлек итеүҙең изге саралары иҫәбенә индергән, ул замандағы Евразияның күсмә ҡәбиләләрендә ошондай күрәҙәлек итеү алымының киң таралыуын был тәғлимәттең йоғонтоһо һөҙөмтәһе итеп аңлатыу фарыз.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 77



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Днепр ярҙары - батырлыҡ майҙаны

Нивки - Асаревичи рубежында плацдармды киңәйтеү өсөн барған алыштар барышында корпус частары бер-бер артлы Днепрҙың уң ярына сығыуын дауам итә. 30 сентябрҙә 148-се гв. артиллерия-миномет полкы ла йылға аша сыға башлай. Орудиелар һәм аттар алдан әҙерләнгән паромдарға тейәлә. Атлы полктарҙың ат йөрөтөүселәре аттары менән һәм 160-сы танк полкы армия саперҙары һалған понтон күпер аша уң ярға сыға. 27 сентябрҙән 30 сентябргә тиклем ошо понтондарҙан 14-се һәм 15-се атлы дивизияларҙың частары ла Днепр аша сығып өлгөрә. 14-се гв. атлы дивизияһы яугирҙары беҙҙең 16-сы гв. дивизияһына уң ярҙағы плацдармды киңәйтергә ярҙам итә. Ошо дивизияның 56-сы атлы полкы Березки, Иҫке Иолча, Яңы Иолча ауылдарын дошмандан азат итә, Вяле һәм Галки ауылдары йүнәлешендәге һөжүмдә ҡатнаша. 1 октябргә Нивки - Галки - Усохи, Чернево - Комаринка, Рожнев, Березки, Асаревичи рубеждарында плацдармды киңәйтеү һәм нығытыу буйынса командование ҡуйған бурыстар ғәмәлгә ашырыла. 7-се гв. атлы корпусы соединениеларының йөҙәрләгән яугирҙары Чернигов ҡалаһы һәм Днепр өсөн барған яуҙарҙа күрһәкән иҫ киткес батырлыҡтары өсөн орден һәм миҙалдарға лайыҡ була. Бөтөн корпустан 75 яугирға Советтар Союзы Геройы исеме бирелһә, уларҙың 55-е 16-сы Чернигов гв. атлы дивизияһы атлылары була.

Армия һәм фронт командованиеһы дивизия командиры, гв. полковнигы Г.А. Беловтың һәм Днепрҙы аша сыҡҡанда корпустың десант авангарды ролен үтәгән 58-се гв. атлы полкы командиры, гв. подполковнигы Т.Т. Кусимовтың ошо тиңһеҙ операцияға етәкселек иткәндә күрһәткән ойоштороу һәләттәрен юғары баһалап, уларға Советтар Союзы Геройы исемен биреүҙе юллай, ил етәкселеге ошо тәҡдимде хуплай. Комдив Григорий Беловҡа генерал-майор званиеһы бирелә.

Григорий Андреевич Белов 1901 йылда Ульяновск өлкәһенең Сурский районында тыуған. Ул граждандар һуғышында ҡатнаша, Хәрби-сәйәси академияла уҡый. Атлы полк комиссары, һуңынан уның командиры вазифаһын башҡара. Төплө белемле офицер Юғары кавалерия курстарында, М.В. Фрунзе ис. Хәрби академияла уҡыта. 1942 йылдың июленә тиклем Мәскәү янындағы запас атлы полк командиры була. 112-се Башҡорт атлы дивизияһы Брянск фронтына килгәс, Григорий Белов дивизия командиры М.М. Шайморатовтың урынбаҫары вазифаһына тәғәйенләнә. 1942 йылдың ноябрендә ул 8-се кавкорпус командирының тыл буйынса урынбаҫары итеп ҡуйыла. М.М. Шайморатов рейдтан сыҡҡан саҡта батырҙарса һәләк булғас, Г.А. Белов 16-сы гв. атлы дивизияһы (элекке 112-се Башҡорт атлы дивизияһы) командиры вазифаһына тәғәйенләнә. Ул һуңынан беҙҙең дивизиябыҙ менән һуғыш бөткәнгә тиклем етәкселек итә. Уға 1953 йылда генерал-лейтенант званиеһы бирелә. Генерал Г.А. Белов хәрби хеҙмәттәре өсөн өс Ленин ордены, дүрт Ҡыҙыл Байраҡ ордены, Суворов ордены, Ҡыҙыл Йондоҙ, "Почет Билдәһе" ордендары, Польшаның "Виртути Миллитери" ордены, бик күп миҙалдар менән бүләкләнә.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Балаларҙың телде онота башлауының икенсе яғы бар: күбеһе интернетта ултырып, йәнһүрәт, блогерҙарҙы, һ.б. ҡарай, уйындар уйнай. Йәғни уларҙың уйындары интернеттағы цифрлы тормошҡа күсте.*



# ЯҺАЛМА башҡортса

**Һуңғы бер нисә йылда ҡыуандыра бит замандаштарыбыҙ! Әле яңы ғына башҡорт теленең донъяның 200 теле араһында халыҡ-ара лингвистик проектҡа әләгеүенә шатланғайныҡ, хәҙер иһә үҙебеҙҙең башҡортса һөйләшкән колонкабыҙ буласаҡ, Аллаһ бойорһа, тип шатланабыҙ. Һәр хәлдә, был йүнәлештә тәүге һөҙөмтәләр бар һәм, башланған эш - бөткән эш күҙлегенән сығып ҡарағанда, тамамланыр ҙа. Һәм быларҙың барыһын да бер кеше - Бөрйән районының Иҫке Монасип ауылында тыуып, хәҙер инде баш ҡалала йәшәгән программист тормошҡа ашыра. "4-се класҡа тиклем - ауылда, артабан Белорет лицей-интернатында уҡыным. 10-11-се синыфта Хазанкиндың компьютер мәктәбендә белем алдым. Баш ҡалала Өфө дәүләт авиация-техник университетын тамамланым. Бәләкәй саҡта математика уҡытыусыһы булырға хыяллана инем. Компьютер мәктәбендә уҡығандан һуң программалар яҙыу ныҡ оҡшап ҡалды", - ти ул. Айгиз ҠУНАФИН - бөгөнгө ҡунағыбыҙ.**

**Башҡорт теле бөгөн апаруҡ темптар менән цифрлашыу процесына инә бара. Википедистар: "Әгәр Википедияның һинең телеңдәге бүлеге юҡ икән, тимәк, һинең телең дә юҡ", - ти. Шуның кеүек, әгәр һинең телең цифрлаштырылмаған икән, яҡын киләсәктә, тимәк, ул юҡ, тип әйтергә мөмкин. Бөгөн һеҙ башҡорт телен цифрлаштырыу өлкәһендә иң киң ҡарашлы белгес. Ошо эшкә тотоноурға нимә этәргес булды?**

- Һүҙемде Википедиянан башлайым әле: википедистарҙың фекере менән тулыһынса килешәм, сөнки ул бөгөнгө цифрлаштырыуға ла нығ бәйле. Ентекләп аңлатҡанда, әлеге ваҡытта мин эшмәкәрлегемдә эре халыҡ-ара компанияларҙың хеҙмәттәре менән ҡулланам, сөнки ундай цифрлаштырыу эштәрен башҡарып сығыу өсөн күп финанс ресурстары һәм белгестәр кәрәк. Башҡорттар араһында ғына түгел, хатта рустар араһында ла ундай белгестәр юҡ, булһа ла, бик әҙ. Халыҡ-ара компанияларға ышаныслы һәм ирекле ҡулланыуҙа булған мәғлүмәт кәрәк. Донъяла берҙән-бер шундай сығанаҡ булып Википедия тора. Мин әле шөғөлләнгән өлкә - ул NLP (тәбиғи телде эшкәртеү) тип атала, унда күберәк текст һәм телмәр кәрәк. Белгестәр тексты иң элек Википедиянан ала. Минә Башҡорт Википедияһы, унда башҡортса, шулай уҡ парраллель башҡортса-русса текстарҙың күп булыуы нығ ярҙам итә.

Эште башлап ебәреүемә килгәндә инде, 2017 йылда туған телдәрҙе уҡытыуға төрлө яҡлап һөжүмдәр башланды, шул осорҙа телде яҡлап, ата-әсәләр комитеты ойошторҙоҡ һәм ауылдарға йөрөп, балаларға ни өсөн телде өйрәтергә кәрәклеге тураһында аңлатыу эштәре алып барҙыҡ. Шунда улай йөрөүҙең әллә ни файҙаһы булмауын күрҙем, сөнки бер барғанда 2-3 ауылда ғына йөрөп өлгөрәбеҙ. Һәр береһендә 50-шәр кеше булғанда ла, уларға аҙаҡ мәғлүмәтте һәр даим тыҡҡып торорға кәрәк.

Балаларҙың телде онота башлауының икенсе яғы бар: күбеһе интернетта ултырып, йәнһүрәт, блогерҙарҙы, һ.б. ҡарай, уйындар уйнай. Йәғни уларҙың уйындары интернеттағы цифрлы тормошҡа күсте. Шуға ла үҙем IT белгесе булараҡ, ауылдар буйлап йөрөүгә ҡарағанда, IT белгесе булараҡ ярҙам итһәм, халыҡҡа ярҙамым нығыраҡ тейер ине, тиған ниәт менән башланым.

**Телде цифрлаштырыу нисек башҡарыла? Ул ниндәй этаптарҙан тора?**

- Ниндәй генә телде цифрлаштырабыҙ тиһәк тә, бер нисә этапты үтергә кәрәк. Иң элек клавиатураларҙа башҡортса шрифт булырға тейеш. Шуныһы яҡшы булды - был этапты беҙ алданыраҡ үткәйнек. Икенсенән, сканланған, тәҙәтелгән (расшифровка) текстар күп булырға тейеш. Был процесс әле һаман дауам итә, шул уҡ ваҡытта сканлағанда текстарҙа килеп сыҡҡан хаталарҙы автоматик табыу юлы эшләнмәгән. Өсөнсө этап - компьютерҙа телмәр синтезы (тексты башҡортса һөйләү) һәм телмәрҙе аңлау (телмәрҙе текстҡа әйләндереү - распознавание речи) программалары булырға тейеш. Яңы программалар, моделдәр ҙур компаниялар тарафынан эшләнә һәм, ғөмүмән, улар инглиз телендә. Яһалма интеллектты алғанда ла, инглиз теле өсөн мәғлүмәт нығ күп, шуға ла башҡорт теленән инглиз теленә, инглиз теленән башҡорт теленә ауҙарыусы программа кәрәк. Минең эшкә бәйле бына ошо өс синтез бар, һәм уларҙы һайлағанда иң беренсе урында текст форматы тора.

**Башҡорт телен цифрлаштырыу хыялы бөгөн генә тыумаған, һәр кем үҙ ваҡытында быны өсөн күпмелер эш башҡарған. Һеҙ әлеге ваҡытта ошо ниәттә эшләүселәрҙең нисәнсе тулҡыны?**

- Ысынлап та, беренсе тапҡыр был темаға БСТ-ла эшләгән бер егет тотонған һәм 2014 йылда цифрлаштырыу буйынса нығ эшләгән, әммә һуңынан дәрте һүнгәнме - туҡтап ҡалған. Икенсе тулҡыны 2018 йылдарҙа Илдар Кинйәбулатов башлап ебәрҙе һәм уларҙың командаһы тарафынан да ҙур эш башҡарылды. Иң мөһиме - улар башҡортса клавиатура эшләне. Шуға күрә үҙемде өсөнсө тулҡын, тием.

Күҙәтеүҙәремә нигеҙләнеп, шуны әйтә алам: әгәр ярҙам, хуплау булмаһа, 3 йылдан кешенең дәрте һүнә. Шуға ла мин эшләгәндә барлыҡ эштәремде асыҡ итеп күрһәтеп, реклама эшләп һәм барыһы ла ҡуллана алырлыҡ итеп һалып барам. Әгәр ҙә әле минең менән бергә эшләргә йәки һуңынан эшләргә теләүселәр булһа, берәй килеп минең дә дәртем һүрелеп, ташлап ҡуйһам да, улар дауам итә ала, уларға еңел була һәм бөгөн эшләгән эшем барыбер юғалып ҡалмаясаҡ. Бында бер генә миҫал килтергем килә: татар коллегалар, аҡса эшләү ниәтенәнме икән, барлыҡ эшләнмәләрен яба, кеше ҡулынан йәшерә. Шуға күрә бөгөн улар артта ҡалды, тип әйтһәм дә хата булмаясаҡ.

**Был һорауҙы мин башҡорт телен донъя кимәленә сығарырға тырышҡан һәр кемгә биреп, фекерҙәрен белешәм. Мәҫәлән, беҙҙә дәүләттән финансланып, параллель текстар йыйыу, корпус төҙөү, һүҙлектәр эшләү менән шөғөлләнгән учреждениелар, хатта министрлыҡ бар, әммә һеҙ әйтмешләй, улар ҙа татарҙарҙың эштәре кеүек үк ябыҡ, цифрлаштырыу майҙанына сығарылмаған, йәғни яһалма интеллект йылдамыраҡ башҡорт телен өйрәнһен тигән ярҙамдары юҡ, тип әйтергә мөмкин. Ни сәбәптән, ни өсөн ирекмәндәр телде һаҡлау һәм үҫтереү өлкәһендә нығыраҡ һәм һөҙөмтәләрәк эшләй?**

- Бөтөн эште башлаған саҡта ла бәләкәй арбаны этеп алып китеүе еңелерәк. Был йәһәттән ирекмәндәр үҙҙәренең хәләнән килгән тиклем йөктө һөйрәй, тиҙ генә яраҡлаша һәм бороолоштарҙа йөгөн ауҙармай. Ҙур ойошмаларҙы алғанда, улар - ҙур организм. Уларҙың билдәле йүнәлеше бар һәм ниндәйҙер икенсе йүнәлешкә бороу һәр саҡ ҡыйныу, һ.б.) эйәһеҙ форматта дөйөм ҡулланыуға һалырға ҡарар иттеләр. Тиҙҙән бындай указ барлыҡ тармаҡтар буйынса ла, шул уҡ ваҡытта тел өлкәһендә лә булыр, тип өмөтләнәм, сөнки шунһыҙ алға китеп булмай.

Рәсәйҙең цифрлаштырыу министрлығы төрлө конкурстар үткәрә, мин дә ҡатнашып торам, һәм улар өсөн төрлө өлкәләрҙә программистар әҙерләгән эштәрҙе үҙҙәрендә ҡуллана. Был йәһәттән Цифрлаштырыу министрлығына дәғүәм юҡ. Улар цифрлаштырыуҙы нығ алға этәрә һәм халыҡ өсөн һәр саҡ асыҡ. Хатта аралашҡан ваҡытта: "Был эште әлегә эшләй алмайбыҙ, сөнки икенсе министрлыҡ ҡамасауын. Шулай уҡ эш башлағанда ҙур хәүеф була: уның килеп сығамы, юҡмы икәнен әйтеүе ҡыйын. Ҙур ойошмаларҙа ла шундай хәүеф бар һәм ул нығ ҙур, сөнки ул аҡсаға бәйле. Эшләп сығарһалар - яҡшы, эшләп сығара алмаһалар, хатта еңәйәт язаһына тиклем яуаплылыҡ ҡаралған. Был йәһәттән улар нығ сикле һәм үҙаллылыҡ, башбаштаҡлыҡ хәүефле. Шуға әлеге ваҡытта уларҙы ғәйепләп тә булмай. Әлбиттә, беҙҙең менән бүлешһәләр, бергә эшләһәк, яҡшы булыр ине һәм шуны ғына әйтә алам: тиҙҙән улар ҙа яйлап мәғлүмәтте ирекле ҡулланыуға сығарыуға киләсәктәр. Мәғлүмәттәр телгә бәйле өлкәлә генә ябыҡ түгел бит. Яңыраҡ ил Президенты Владимир Путиндың Указы булды, уға ярашлы, беренсе тапҡыр дата сет (мәғлүмәт туплан ған йыйынтыҡ) тигән формулировканы юғары кимәлдә ҡуллана башланылар. Әлеге ваҡытта дәүләт кимәлендә медицинала булған мәғлүмәтте (диагноз, анализдар, дауалалай, шул проблеманы хәл итмәйенсә, килтерепп сығара алмайбыҙ", - тиҙәр. Бер-беребеҙгә асыҡ булғас, беҙҙең мөнәсәбәттәр вертикаль түгел, ә горизонталь. Медицина буйынса датасет асыу ҙа - ул Цифрлаштырыу министрлығының ҙур ҡаҙанышы. Шулай уҡ улар яңыраҡ ҡына бер сарала ҡатнашты, унда Сбербанк та булды. Был сараның маҡсаты - юғалып барған телдәрҙе цифрлаштырыу булды. Ул халыҡтарҙың үҙ программистары юҡ, ә башҡалар, хатта ул телде белмәһәләр ҙә, ниндәйҙер ярҙам күрһәтә ала. Бында Сбербанк тураһында ла әйтеп китер инем - күптәр уны банк тип кенә күҙ алдына килтерә, ә уның яһалма интеллект буйынса эшләгән бүлексәһе бар. Улар ҙа күп эш башҡара һәм, ғөмүмән, Рәсәйҙә йәшәгән халыҡтар телдәрен тел моделенә ҡушып, бик ҙур эш эшләне.

**Мәғлүмәттәрҙе асыҡ доступҡа һалыу тураһында указ бик һәйбәт, тимәк, ошо мәғлүмәт ярҙамында яһалма интеллект тиҙ генә диагноз ҡуя аласаҡ...**



- Улар әле лә бар. Мәҫәлән, беҙ ЭКГ - электр кардиограммаһы үтәбеҙ. Яһалма интеллектты шуның буйынса өйрәтәләр. Табип, шундай тулҡын булһа - ниндәйҙер ауырыу икәнен күрһәтә, нормаль тулҡын булһа - нисек булырға тейешлеген аңлата. Ошо барлыҡ варианттар күрһәтелеп бөткәс, компьютерға шул мәғлүмәтте индерәләр һәм пациентҡа ЭКГ үткәргәс, компьютер шунда уҡ диагноз ҡуя ала. Әле бит рентген, МРТ, КТ буйынса белгестәр һүрәттәрҙе ҡарап диагноз ҡуя, нимәнәлер күрмәй йәки иғтибарға алмаҫы мөмкин, был йәһәттән компьютер күҙенән бер нәмә лә ситтә ҡалмай.

**Әлеге ваҡытта компьютер менән уйнап, шахматсылар уны еңгәне юҡ. Хәҙер журналистар мәҡәләне яһалма интеллект ярҙамында яҙа, яһалма интеллект ярҙамында бер төндә диплом яҙып, яҡшы билдәне алған осраҡтар ҙа бар. Мин дә һеҙ эшләгән бот ярҙамында ҡыҫҡа интервьюларҙы яһалма интеллектҡан текст вариантына күсертеп алам... Ошо процестар кешене ҡулланыусы итеп кенә тәрбиәләмәйме?**

- Мәҡәләләргә килгәндә, уларҙы тик бот ярҙамында яҙылған бер журнал бар. Кешеләр уны ҡарап, уҡып сығып, етешмәгән ерен инструкция рәүешендә өйрәтеп кенә ебәрәләр. Әммә улар әле интернетта булған мәғлүмәт нигеҙендә яҙылған, шуға ул ниндәй стилистиканы алып, ниндәй темаға нисек яҙырға

✓ ***Кеше эшен тиҙ генә башҡарып, икенсе нәмәләр уйларға ваҡытын бушата. Шул уҡ ваҡытта компьютерҙың етешһеҙлеге нимәлә - ул уйлай белмәй.***

# ИНТЕЛЛЕКТ ҺОМАЙ...

**һөйләшә**

белә. Шул уҡ ваҡытта бөтә нәмә үҙгәреп тора, кеше тиҙ генә ҡулайлашып, икенсе төрлө уйлай, икенсе төрлө яҙа башлай. Ә компьютер тиҙ генә яңы стилистикаға күсеп китә алмай. Әгәр ул элек булып, һуңынан онотолоп, ҡабат тергеҙелһә - ул ваҡытта проблема юҡ.

Дөрөҫөн әйткәндә, әлеге ваҡытта революция бара. Октябрь революцияһынан һуң, индустриализация осоро башланып, заводтар төҙөлгәс, элек берәрләп итек эшләгән кешеләр эшһеҙ ҡалған: заводтар уларҙы күпләп сығара башлаған, хаҡтар төшкән. Кемдер эшһеҙ ҡала, әммә икенсе эштәр барлыҡҡа килә. Хәҙер бөтә нәмәнең тиҙлеге артты. Бер шулай яҙыусыларҙың форумында булғайным, улар әйтеүенсә, китап әҙерләп бирәләр ҙә, нәшриәттә баҫылып сыҡҡансы 5-6 йыл үтә. Миҫал өсөн Һомайҙан: "Балаларға "Урал батыр" эпосы буйынса бәләкәй генә әкиәт яҙ әле", - тип һорағайным, ул миңә өс минутта шул әкиәтте яҙып бирҙе. Тәүҙә ошо эпос тураһында һөйләштек, шунан ғына әкиәт яҙырға ҡуштым. Шунда ҡайһы бер урындарын тағы ла төҙәтергә, өҫтәргә кәрәк, һәм мин уға, ошо урындағы мажараларҙы нығыраҡ тасуирла әле, тип әйтәм, йәғни, эш ҡушам (промТинженеринг - ҡайһы тирәлә нимәне үҙгәртергә икәнлеген күрһәтәм). Яһалма интеллектты ныҡлап өйрәтһәк, бер көн эсендә төрлө темаға йөҙләгән әкиәт яҙҙырып сығарырға була. Әгәр артабан да бер китап сығарыу 5-6 йыл көтөп ята икән, киләсәктә был йүнәлеште тиҙ эшләгәндәре баҫып аласаҡ.

Бөгөн хатта программаны ла бот ярҙамында яҙып була. Минең менән эшләгән егет, бер эшен бер сәғәт эшләп ултырҙы ла, һуңынан бот ярҙамында биш минутта эшләп бөтөрөп ҡуйҙы. Йәғни кеше эшен тиҙ генә башҡарып, икенсе нәмәләр уйларға ваҡытын бушата. Шул уҡ ваҡытта компьютерҙың етешһеҙлеге нимәлә - ул уйлай белмәй. Нимәлер эшләгәндә беҙ физик ғәмәл менән мәшғүл, ә уйлау - ул эмоция, хистәр - былар компьютерға ят. Шуға ҡурҡыу кәрәкмәй. Киреһенсә, тиҙ генә ҡулайлашһаҡ, был беҙгә киләсәктә нығыраҡ ярҙам итәсәк.

**Һуңғы эштәрегеҙҙең береһе - башҡортса һөйләшкән аҡыллы колонка. Ә ни өсөн тап Һомай тип атарға булдығыҙ?**

- Башҡорттарҙа иң бөйөк әҫәр - ул "Урал батыр" эпосы. Ундағы персонаждарҙың береһе - Һомай, ул Уралдың ҡатыны, уға ярҙам итә. Был - бер яҡтан, икенсе яҡтан, Һомайҙа башҡортта ғына булған "Һ" өнө бар. Рустарҙың Марусялары бар икән, тимәк, башҡортта ул башҡорт исеме менән аталырға, ул ғына ла түгел, барлыҡ төрки милләттәргә аңлашылып торорға тейеш, сөнки аҡыллы колонкалар үҫешенең тағы бер этабы - башҡа төрки телдәргә лә ярҙам итеү. Мәҫәлән, беҙҙә булған ҡоралдар татар телен яҡшы аңлай һәм уларҙы татар теленә күсереү ҡыйын түгел.

**Колонка тигәс, ул нисек буласаҡ - компьютерға индерелгән колонкамы, әллә айырым, беҙ күреп өйрәнгән ғәҙәти колонкамы?**

- Һомай - ассистент, интернетта йәшәгән ярҙамсы тип күҙ алдына килтерһәк, колонка - ул ошо ярҙамсының кәүҙәһе. Әммә Һомай төрлө кәүҙәләргә урынлашырға мөмкин. Шуға колонка - уның бер төрө генә. Әлеге ваҡытта беҙҙең Һомай - ул компьютерҙа текст форматында яҙыу варианты. Шулай уҡ смартфонда кнопкаға баҫып һөйләшеп тыңлау форматы буласаҡ.

Әле был колонканың төп маҡсаты - кешегә тиҙ генә мәғлүмәт биреү. Эшләй башлағанда Яндекс аша һорау яҙып эҙләү кеүек итеп күҙ алдына килтерә инем, халыҡ менән аралашҡанда уларҙың колонканы кеше менән аралашҡан кеүек итеп күрергә теләүҙәре асыҡланды: һиңә нисә йәш, исемең нисек, ҡайҙа тыуҙың, һ.б. Шундайыраҡ һорауҙар менән башын ҡатыралар, ә уның төп функцияһы - тупланған, мәҫәлән, шул уҡ Башҡорт Википедияһында булған мәғлүмәтте ҡыҫҡартып ҡына биреү.

Программист булараҡ, күп осраҡта, компьютерымда шуныһы боҙолдо, тегеһе ватылды, ворд эшләмәй, башҡорт клавиатураһын нисек ҡуйырға йәки шундай башҡа һорауҙар менән мөрәжәғәттәр күп булғас, уларға яуапты ассистентҡа өйрәттем һәм хәҙер был йәһәттән Һомай нисек ярҙам итергә белә.

**Һомайға тест үткәреү осоронда һорау биреп ҡараным да, рәхәтләнеп көлдөм. Дөрөҫөн әйткәндә, үҙемдән көлдөм, сөнки Һомайҙың яуабы һинең һорауҙы нисек итеп биреүеңдән тора. Дөрөҫ һорау бирһәң, ул дөрөҫ яуап ҡайтара, әгәр һорауың дөрөҫ булмаһа, ул һорауҙағы айырым һүҙбәйләнешкә генә яуап бирә...**

- Һомай әлеге ваҡытта яуап биреү буйынса Алисаны үтеп китә, тиһәк тә була, сөнки OpenII компанияһы эшләгән әҙер ботты ҡулланам, ул инглиз телендә. Йәғни беҙҙә булған мәғлүмәтте башҡорт теленән инглиз теленә тәржемә итәм дә, тегегә ебәрәм, ул миңә яуап бирә һәм мин уның яуабын кире башҡорт теленә тәржемә итәм. Һәм башҡорт теленән инглиз теленә тәржемә иткәндә ҡайһы берҙә яңылыш тәржемә итә һәм шуның арҡаһында көлкөлө хәлдәр килеп сыға. Йәғни бот инглиз телендә ниндәй һорау була, шуға дөрөҫ яуап ҡайтара. Ә бында башҡорт теленән инглиз теленә тәржемә итеү аҡһай. Шуға параллель текстарҙы йыйыуҙы туҡтатырға ярамай, сөнки уның ярҙамында барыбер киләсәктә тәржемәсене яҡшырта алабыҙ. Тәржемәсе яҡшырһа, Һомай ҙа дөрөҫөрәк яуап бирә. Шулай уҡ яуаптар һорауҙың дөрөҫ бирелеүенә лә бәйле. Ҡыҫҡаһы, һорауҙар ике кеше һөйләшеп ултырғандағы кеүек булырға тейеш. Яуап дөрөҫ булмағанда: "Һин аңлап етмәнең, ошо һорауға яуапты дөрөҫләп бир әле", - тиһәң, Һомай яуапты дөрөҫ ҡайтара. Йәғни һорауҙарҙа эҙмә-эҙлеклелек булырға тейеш.

Әлеге ваҡытта ҡала башҡорттары һәм бәләкәй балаларҙың телмәр төҙөлөшө рус теленеке кеүек. Мәҫәлән, мин киттем тышҡа, мин ашаным аш, һ.б. Ә ассистент аңлаһын өсөн дөрөҫ һөйләргә кәрәк һәм яйлап телмәребеҙ ҙә үҙгәрәсәк.

**Был ассистент балаларҙы башҡорт теленә өйрәтеүгә ҙур этәргес буласаҡ. Ә әлеге ваҡытта уны балалар араһында һынап ҡарау тәжрибәһе үткәрелмәйме?**

- Әле ассистентты халыҡҡа сығарыуға бик аҙ ваҡыт үтте, ә балалар алдына сығарыуы ҡурҡынысыраҡ, сөнки улар ныҡ ҡыҙыҡһыныусан, шуға енси мөнәсәбәттәр тураһында, ярамаған темаларға һорау биреүҙәре мөмкин. Бер яҡтан, бот ундай темаларҙы, һорауҙарҙы үткәрмәй, әммә ҡайһы берҙә мәғлүмәт биреүе лә бар. Шуға ла бында өҫтәмә фильтр булырға тейеш. Әле бирелгән һорауҙарҙы күҙәтеп барғанда ла мосолмандар өсөн тыйылған темалар буйынса һорауҙар 10 процентты тәшкил итә, тип әйтә алам. Был яҡшы, сөнки мин ниндәй һүҙҙәргә фильтр ҡуйырға кәрәклеген асыҡлайым.

**Нисек кенә тимәйек, әммә республикалар араһында барыбер дәғүәселек бара. Беҙ ғүмер буйы Татарстан менән ярышабыҙ. Ә Волга буйы федераль округында шундай ассистент тағы бармы, юҡмы?**

- Был йәһәттән беҙ беренсе, сөнки быдай чат-боттарҙы эшләүе ныҡ ауыр. Әйтәйек, рустар Маруся ассистентын (mail.ru, ВКонтакте колонкаһы) эшләгән саҡта уларҙың беренсе варианты мәғәнәһеҙ булды, сөнки улар ниндәй һорауға ниндәй яуап бирергә тейештәр, тип, күп кешегә ҡушҡандар ҙа, бер һорауға 5-6 вариант яуап килеп сыҡҡан. Шуға ул "Сәғәт нисә, будильникты ҡуй" кеүек ябай һорауҙарға ғына яуап бирә ала ине. Әле мин ҡулланған бот интернетта булған мәғлүмәтте туплап, уларҙы ҡыҫҡартып, үҙе шунан һеҙгә генә кәрәк мәғлүмәтте табып бирә ала. Хатта ул эҙләү аша һиңә кәрәкле мәғлүмәтте лә таба, әммә айырма нимәлә - эҙләү системаһы бер нисә сайтҡа һылтанма бирһә, Һомай ошо 10 сайтта булған яуаптарға ҡарағанда дөрөҫөрәк яуап ҡайтара. Татарстан Хөкүмәте кимәлендә: "Нишләп беҙҙә һаман да бот юҡ?"- тип һорау күтәрҙеләр, тимәк, эш башларҙар тип уйлайым, сөнки хәҙер был күпкә еңелерәк һәм күпкә осһоҙ.

Икенсе телдәргә ярҙам итеүгә килгәндә, мин мариҙарға телмәрҙе аңлау программаһын эшләп бирҙем. Улар был эшмәкәрлекте беҙҙән алда башлап, икенсе юл менән баралар ине, белешеп, беҙ икенсе юл һайланыҡ тип күрһәттем. Һөҙөмтәне күргәс, улар ҙа беҙҙең юл менән китте һәм мин уларға ҡушымтаны бот форматында эшләп бирҙем. БМО-ның Генераль Ассамблеяһы 2022-2033 йылдарҙы аҫаба халыҡтар телдәре ун йыллығы тип иғлан итте һәм төрлө ҙур эштәр башҡарылырға тора. Әлеге ваҡытта телде цифрлаштырыу буйынса янып йөрөгән кешеләрҙең һаны күп түгел, шуға берберебеҙгә ярҙам итергә тейешбеҙ, сөнки мин уларға ярҙам иттем, улар, үҙ сиратында, икенсе телдәргә ярҙам итәсәк.

**Быйыл республикала дәүләт телдәрен һәм туған телдәрҙе үҫтереү буйынса гранттарға бүленгән аҡса күләме арттырылды. Һеҙ ошо грант программаларында ҡатнашҡанығыҙ һәм еңгәнегеҙ бармы?**

- Дүрт тапҡыр ҡатнаштым һәм дүрт тапҡыр үтмәнем. Әлбиттә, төрлө ваҡытта төрлөсә һөйләнем, үтмәгәс, "Эй, һеҙгә кәрәкмәгәс, мин уны үҙем дә эшләйем", тигән ваҡыттар ҙа булды. Хәҙер иһә бының саҡ ҡына икенсерәк юлын таптым. Беренсенән, өмөтләнеп йөрөгәндән һуң грант ала алмаһаң, ныҡ ҡыйын була, кәйеф төшә, эшкә тотонғо килмәй торғайны. Хәҙер иһә ундай күренештәргә иммунитет барлыҡҡа килде. Үтмәнем, ярай, икенсе юлы үтермен, тиемм. Әммә үтһәм, грант аҡсаһына тиҙерәк эшләп булыр ине.

Хәҙер ваҡытымды грант яҙыуға күп бүлмәйем, икенсе кешеләргә ҡушам да, грантта нимәгә иғтибар итәлергә тейешлеген аңлатам һәм һуңынан тикшереп сығам. Әммә мөмкинлек булғанда - ҡулланырға кәрәк. Грант алыуҙың тағы бер бәләһе - коммерцияға ҡарамаған ойошма табыу, сөнки һәр кем үҙенең проекттарын үткәрергә тырыша йәиһә уларҙы күптән бүлешеп алып бөткәндәр.

**Киләсәктә тағы ниндәй яңылыҡтарығыҙ менән ҡыуандырырға ниәтләйһегеҙ?**

- Бер эште оҙаҡ эшләһәң, ул ялҡыта, шулай уҡ ытырғыныу барлыҡҡа килә, шуның өсөн мин бер юлы бер нисә проект алып барам. Параллель эштәрҙән - башҡортса ҡулъяҙманы цифрлаштырыу менән шөғөлләнәм. Уның төп маҡсаты - уҡытыусыларҙың өйгә эш, дәфтәр тикшереүенә ярҙам итеү, уларҙың эшен еңеләйтеү. Бынан тыш, Искәндәр Шакировтың һорауы буйынса сканерлаған текстарҙағы хаталарҙы тикшереү буйынса эш алып барам, сөнки тексты сканерлағанда хаталар китә. Уларҙы эҙләп, төҙәтеп ултырыуы бик ҡыйын, ә автоматик рәүештә башҡарыу эште еңеләйтә. Тағы ҙур һәм кәрәкле, күп сығымдар талап иткән проект - ул ютубта булған барлыҡ йәнһүрәттәрҙе башҡорт теленә тәржемә итеү.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һомайҙы тест рәүешендә тикшергәндә булған фекерҙәр араһында "хата өҫтөнә хата", тигәндәрен дә уҡырға тура килә. Әңгәмәсемдән шундай яҙмаларға ниндәй ҡарашта булыуын да белештем. "Башта шундай тәнҡиткә ныҡ иғтибар бирә, ауырға ала һәм ҡайһы берҙә талашып та китә торғайныҡ. Хәҙер ҡарашым бөтөнләй икенсе: ниндәйҙер хата бар икән - ул минең өсөн ваҡ күренеш, сөнки бер урында хата китеүенән башҡорт телең юғалып ҡалмай, боҙолмай. Әгәр башҡорт теле Һомайҙың бер хата эшләүенән генә юғала икән, тимәк, ул тел көслө түгел. Минеңсә, башҡорт теле быуаттар буйына һаҡланып килеп, уның үҙгәрештәргә иммунитеты бар, үҙгәрә, әммә тиҙ генә үҙгәрмәй, кәрәкмәгәнен төшөрөп ҡалдырып бара. Шуға бер кешенеңме, яһалма интеллекттыңмы бер хата эшләүенән телгә бер зыян да юҡ. Быныһы - бер яҡтан. Икенсе яҡтан, әгәр ҙә мин энергиямды шуның һымаҡ ваҡ мәсьәләләргә бүлһәм, ул ваҡытта киң күләмле проекттарҙа эшләй алмаясаҡмын. Шуға минең көйләнеш: мин киң күләмле эштәр эшләйем, ә кемдер минең эште матурларға, дөрөҫләргә, камиллаштырырға теләй икән, ҡушылып, ярҙам итә ала", - ти ул. Хаҡ һүҙҙәр. Һәр кем башҡорт телен үҫтереүгә бәләкәй генә өлөш индерһә лә, һөҙөмтәлә берлектәге эшмәкәрлек күләмле һәм сифатлы буласаҡ.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

20

Ғаиләм-ҡәлғәм

25-3 февраль - март
(шаҡай - буранай)
2023 йыл
№7 (1049)

БАШҠОРТ ҒАИЛӘҺЕ

# МӘҘӘНИӘТЕБЕҘ...

## ауылдарҙы һаҡлар усаҡ бит ул

(Башы 1-се биттә).

**➔ Мәҙәниәт өлкәһендә эшләү бала саҡ хыялы инеме?**

**Рәмзиә:** Мин бала саҡтан һәр сарала, конкурстарҙа ҡатнашып йөрөнөм. Төрлө түңәрәктәрҙә шөғөлләндем, айырыуса бейергә яраттым. 7 йәштә үк сәхнәлә бейей, бейеүсе булыу хыялы менән яна инем инде. Тик был хаҡта бер туған апайым Зиләнән башҡа бер кем дә белмәне. Әсәйем мине башланғыс класс уҡытыусыһы итеп күрергә теләне. Мәктәпте тамамлағас, "Ҡайҙа уҡырға бараһың?" тип һорағайны, "Аҡсаңды ғына бир ҙә, ҡайҙа уҡырға барырға үҙем беләм", - тип яуаплағанымды асыҡ хәтерләйем. Ғаиләлә дүрт бала үҫтек: ике ҡыҙ, ике ул. Мин - кинйә бала. Аҙыраҡ иркәрәк тә, үҙһүҙле лә булғанмындыр инде әсәйгә шулай тип әйтә алғас. "Юҡ, апайың һымаҡ институтҡа бараһың", - тине әсәйем һәм ҡулыма документтарымды тоттороп, Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтына оҙатып ҡалды. Институт тупһаһында оҙаҡ ҡына баҫып торҙом. Әхирәтем Гөлнара менән барғайным. "Әйҙә, инәйек", - ти ул. "Юҡ, минең бында уҡығым килмәй", - тием. "Ҡайҙа бараһың?" - ти Гөлнара. "Культпросветҡа", - тием. Бер аҙ аптырап ҡалды әхирәтем, шулай ҙа: "Барғың килгәс, бар!" - тине лә, мине өгөтләүҙең файҙаһыҙ икәнен аңлапмы, институт бинаһына инеп китте. Ә мин кешеләрҙән һораша-һораша Стәрлетамаҡ мәҙәни-ағартыу училищеһын барып таптым. Тапҡас та уны тирәләп оҙаҡ ҡына уралып йөрөнөм әле. Ағартыу һүҙе мине бер аҙ шикләндергәйне. Штукатур-малярҙар уҡый торған уҡыу йортолор, тип уйлағайным.

**Рәүеф:** Мин дә бала саҡта уҡ мәҙәни тормош уртаһында ҡайнаным тиһәм, арттырыу булмаҫ. 1-се класта уҡығанда гармунда уйнап, бала-сағаны бейетә инем инде. Гармунда уйнарға Зиннәт ағай Бикбовтан өйрәндем. Ул урамда балаларҙы йыйып алып, гармунда уйнап ултыра торғайны. Уға ҡарап, унын төймәләр буйлап бармаҡтарын йөрөткәнен диҡҡәт менән күҙәтеп, мин дә өйрәндем. Мәктәптә тиҫтерҙәремде генә түгел, кис көнө уйында йәштәрҙе лә бейетә торғайным. Әсәйҙәр рөхсәт итмәгәс, апайҙар мине асыҡ тәҙрәнән "урлап" алып сыға ине. Магнитофон һымаҡ уйнап тик ултыра торғайным. Ул ваҡытта гармун уйнаған егеттәр армияла ине булһа кәрәк.

10-сы класты тамамлағас, комбайнға ултырҙым. Ҡыуанып ҡына эшләп йөрөһәм, профком рәйесе Марат Усман улы саҡырып алды ла, "Яҡут ауылына яңы клуб төҙөйбөҙ, һиңә уҡырға барырға кәрәк", тип кәңәш бирҙе. Шулай итеп, яҙмыш елдәре мине лә Стәрлетамаҡ мәҙәни-ағартыу училищеһына алып килде, маҡсатлы йүнәлтмә менән тынлы оркестр бүлегенә уҡырға индем, ҡурайҙа ла уйнаным. Уҡыу миңә еңел бирелде. Унда иң матур, иң аҡыллы ҡыҙҙарҙың береһе Рәмзиәне осратыуым менән дә бәхетлемен. Аҙаҡҡы курста уҡығанда өйләнештек тә, минең тыуған ауылым Яҡутҡа



ҡайттыҡ. Рәмзиә менән икебеҙ ҙә мәҙәниәттә үҙебеҙҙе, үҙ урыныбыҙҙы тапҡанбыҙҙыр, тип уйлайым.

**➔ Ул ваҡытта эшкә урынлашыу хәлдәре нисек ине? Йәш белгестәргә ниндәй хеҙмәт шарттары булдырылғайны?**

**Рәмзиә:** Беҙҙе Стәрлелә эштә ҡалырға өгөтләгәйнеләр. Рәүеф колхоздан йүнәлтмә менән уҡығас, Яҡутҡа ҡайттыҡ. Туҡһанынсы йылдар башы. Һәр өлкәләге кеүек, мәҙәниәттә лә үҙгәрештәр көтә ине беҙҙе. Эш башлауы еңелдәрҙән булманы. Клуб буш, аппаратура ла, баян да, костюм-маҙар ҙа юҡ. Хатта тәҙрәләрҙә ҡорма ла юҡ ине. Ә талаптар иһә бик ҡаты булды: мәҙәниәтте күтәрергә кәрәк ине.

**Рәүеф:** Ул заманда халыҡ клубҡа киноға ғына йөрөй ине. Шулай ҙа уларҙың йыр-бейеүгә оҫталығын, илһамын, дәртен бәләкәйҙән күрә-белә йөрөнөм бит инде. Эште шул юҫыҡта ла яйға һалдыҡ. Балалар түңәрәктәргә йөрөй башланы. Рәмзиәнең ике бейеү төркөмө барлыҡҡа килде. Унда 30-ҙан ашыу балалар йөрөгән ваҡыттар бар ине. Һабантуйҙарҙа сығыш яһарға бер түгел, ике автобус менән барған мәлдәрҙе йыш ҡына һағынып иҫкә алабыҙ. Ансамблдең уңыштарын күреп, етәкселәр ярҙам ҡулы һуҙа башланы. Тиҙҙән "Өлгөлө бейеү ансамбле" тигән маҡтаулы исем яуланыҡ. Яйлап кейемдәр, сәхнә костюмдары тектерелде. Был йәһәттән "Киров" ауыл хужалығы етәксеһе Әсхәт ағай Таңатаров аҡсалата ярҙам итте. Төрлө ҡалаларға конкурстарға юл асылды. Үҙем тағы ҡурайсылар ансамбле ойоштороп ебәрҙем. Ул осорҙа ансамблгә егермеләп ҡурайсы йөрөнө. Ғөмүмән, беҙҙең тирә элек-электән ҡурайсылары менән дан тотҡан. Әле ансамблдә 12 бала уйнай. Һигеҙе ныҡлы шөғөлләнә. Түңәрәккә теләп йөрөйҙәр, репетицияға 3-кә тиһәң, 2-гә килеп етәләр. Кәрәк икән, башҡортса бейейҙәр, йырлайҙар. Бер йыл эсендә 26 көй өйрәнде улар, теләктәре шулай һүрелмәһен ине. Дәртләнешеп, ағай, был көйҙө өйрәндек, әйҙә икенсене өйрәнәйек, тип киләләр...

**➔ Һәр замандың - үҙ заңы. Һеҙ эш башлаған йылдарҙа ниндәйерәк киң күләмле саралар үткәрелә торғайны?**

**Рәүеф:** "Башҡорт ҡунаҡханаһы" ойоштороп, ауылдаштарыбыҙҙың ялын, буш ваҡытын файҙалы үткәрергә тырыштыҡ. Лимонад һатып алып, өҫтәлдәр ултыртып, халыҡты йыйып, шиғыр һөйләтеп, йырлатып, бейетеп, аҙна һайын бик күнелле итеп үткәрҙек был сараны. Ритайым һымағыраҡ ине ул. Халыҡ көтөп тора торғайны.

**Рәмзиә:** Яҡташтарыбыҙ араһында йырмоң яратыусылар күп ине. Районда беренселәрҙән булып "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!", "Шәжәрә" байрамындарын үткәрҙек. Үҙемдең тыуған яғыма, Йылайыр районы Яманһаҙ ауылына "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!" байрамына барып, уның бик матур сара икәнен күреп ҡайттым һәм 2001 йылда беренсе булып уны Яҡутта үткәрергә булдыҡ. Бик матур килеп сыҡты. Әле булһа халыҡ һағынып һөйләй. Ҡунаҡтарҙы аттар, флагтар менән ҡаршы алдыҡ. Һәр ырыу тирмә ҡорҙо, шәжәрәләрен барланы. Аҙаҡ был байрамды ҙур итеп ике тапҡыр үткәрҙек. Һәм 2022 йылда, финанс яғы ауырыраҡ булыу сәбәпле, "Ауыл байрамы" итеп ябайлаштырҙыҡ.

**➔ Һәр ауылдың үҙенең традицияһы, ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары бар. Ә шулай ҙа районда һеҙҙең һымаҡ эшләгән ауылдар бармы? "Айыҡ ауыл" буйынса ла иң тәүгеләрҙән булып һеҙ инициатива күрһәткәнһегеҙ бит инде?**

**Рәмзиә:** Һәр ауыл үҙенсә тырышып эшләй, әлбиттә. Хәҙер бөтә тораҡ пункттарҙа "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!", "Шәжәрә" байрамдары үтә. "Айыҡ ауыл" конкурсын беҙ һис уйламағанда ҡабул иттек. Район башҡорттары ҡоролтайы ултырышына саҡырғайнылар. Республика "Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнашырға өгөтләй башланылар. Башҡалар баш тартты, ә мин сәләмәт йәшәү рәүешен пропагандалаған был етди сараның маҡсатын, приз фондының унлата артыуын, ауылда хәл итәһе мәсьәләләр барлығын күҙ алдына килтерҙем дә, "Ә ниңә ҡатнашмаҫҡа?" тигән һүҙҙе ысҡындырҙым. Әйткән һүҙ атҡан уҡтай осто ла ҡуйҙы.

Был конкурсҡа ярашлы талаптарҙы ғәмәлгә ашырыу өсөн махсус программа ҡабул иттек. Эште уға ярашлы алып барҙыҡ: халыҡ менән һөйләштек, имен булмаған ғаиләләргә рейд менән сыҡтыҡ, төрлө йәштәгеләрҙе сәләмәт тормошҡа, спорт һәм физик культураға йәлеп итеү буйынса күп эшләнде. Халыҡ шунда уҡ тартылды. Конкурс сиктәрендә үткәрелгән сараларҙы ғәмәлгә ашырғанда бер ваҡытта ла еңеүебеҙгә шигем булманы. Аҙнаһына икешәр сара үткәрә торғайныҡ. Бөтә ауыл менән тырыштыҡ. Төрлө кимәлдәге етәкселәр, депутаттар, ситтә йәшәгән яҡташтар, ағинәйҙәр, фольклор коллективы, ауылдың, балаларҙың киләсәгенә битараф булмағандар барыһы ла ҡатнашты, ҡулынан килгәнсә ярҙам итте. Еңербеҙ тип уйланыҡ һәм еңдек.

**Рәүеф:** "Айыҡ ауыл" конкурсында еңеү өсөн көрәш барышында тораҡ пунктты төҙөкләндереү йәһәтенән ҙур эш башҡарылды. Ауылда Ҡурай стелаһы барлыҡҡа килде. Уны 1812 йылғы Ватан һуғышының 100 йыллығы айҡанлы үткән йыйында ҡурайсылар бәйгеһендә беренсе урынды алған Яҡут ауылы ҡурайсыһы иҫтәлегенә ҡуйҙыҡ.

Сараларҙың тағы береһе бик тә әһәмиәтле булды. Минең бер инәйем бар ине, исеме - Фәниә Ҡәҙерғолова. Уларҙың өй алдында ҡоҙоҡ булды. Килен төшөрөүселәр элек уға барып, ҡоҙоҡ һыуын алып, шунда йола үтәй ине. Инәйем килгән кешеләргә ҡоҙоғонан һыу алып биреп, ҡотлап, йәш киленгә теләген әйтеп, бүләген тотторо ебәрә торғайны. Хәҙер ҡоҙоҡ та, инәй ҙә юҡ инде. Ә башҡорт туй йолаһын үтәү өсөн Килен ҡоҙоғо бик кәрәк. Бураға заказ биреп, ҡоҙоғон ҡаҙытып, эшләттек тә ҡуйҙыҡ. Эргә-тирәһен төҙөкләндереп, ағас ултырттыҡ. Шулай итеп, матур йола тағы әйләнеп ҡайтты... Хәҙер урамда ла эсеп, болғанып йөрөгән кеше күренмәй. Килен ҡоҙоғона ла шешә тотоп килгән кеше юҡ. Ағинәйҙәребеҙ Килен ҡойоһо янында йәштәргә изге теләктәрен әйтеп ҡотлайҙар, еңгә кеше балаларға бүләктәр, тәмлекәстәр өләшә, ауылыбыҙ менән шулай ҡаршы алабыҙ йәш киленде. Бөтә республика кимәлендә айыҡ исеме менән танылыу алғас, араҡы һатырға баҙнат итеүселәр ҙә юҡ. Ауылда йыйылыш үткәреп, спиртлы эсемлек һатыуҙы тыйыу хаҡында Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайға мөрәжәғәт итеүебеҙ ҙә ыңғай хәл ителде. Ҡултамғалар йыйғанда берәү ҙә ҡул ҡуймай ҡалманы.

**Рәмзиә:** Ауылда үткәрелгән сараларҙың ойошҡан һәм матур үтеүендә ағинәйҙәрҙең роле ҙур. Йәш быуынға ғына түгел, төрлө йәштәгеләргә рухи-әхлаҡи, илһөйәрлек тәрбиәһе биреүҙә бик тырышып эшләй улар. Башҡарған эштәре бик фәһемле һәм файҙалы. Матур-матур йолалар үткәрәбеҙ, Килен төшөрөү, Һыу юлы, Һалдат оҙатыу йәки ҡаршы алыу йолаларын күркәм традицияға әйләндерҙеләр. Йоланы еренә еткереп, те-

ләктәр теләп, бүләктәр биреп, доғалар ҡылып үтәйҙәр.

➔ **Республикала "Ир-егеттәр ҡоро" эш башланы. Ә һеҙҙең ауылда бындай ойошма бармы?**

**Рәүеф:** Беҙҙең ауылда эшкә һәләтле йәштәге ир-егеттәрҙең күбеһе вахта ысулы менән ситтә эшләй. Ҡайтҡандарында, әлбиттә, һәр береһе ҡулынан килгәнсә өмә, тәҙәкләндереү кеүек эштәрҙә ҡатнаша. Ауылыбыҙға күркәм мәсет төҙөүгә ҙур өлөш индергән Ялсыҡаевтар ғаиләһе, мәҫәлән, һәр саҡ ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер тора. Әле бына Яңы йыл бүләге тип балаларға спорт инвентарҙары, конькиҙар алып бирҙеләр.

➔ **Һеҙҙең ике улығыҙ бар. Улар һеҙҙең нindәй сифаттарҙы үҙ иткән? Һеҙҙең кеүек ижади һәләтлеләрме? Икеһенең береһе атай-әсәй юлын һайламанымы?**

**Рәмзиә:** Икеһе лә бәләкәйҙән йырланылар, бейенеләр. Сәнғәтте, мәҙәниәтте белеп, күреп үҫтеләр. "Ирәндек моңо", "Байыҡ" кеүек мәртәбәле республика конкурстарында ҡатнашып, юғары һөҙөмтәләргә лә өлгәштеләр. Ҡурайҙа ла уйнайҙар. Йырсы, бейеүсе, ҡурайсы булһалар ҙа, һеҙҙең кеүек көнө-төнө эштә йөрөгәбеҙ килмәй, тип, икенсе һөнәрҙәрҙе һайланылар. Икеһе лә юғары уҡыу йортон тамамланы, икеһе лә башлы-күҙле. Өлкән улым менән киленем бер ҡыҙ, бер ул үҫтерәләр. Ейәнсәребеҙ үҙебеҙ менән сәхнәгә сыға башланы инде. Улдарыбыҙҙың икеһе лә машиналарында аталарының бүләге булған ҡурайҙы алып йөрөй, теләгән ваҡыттарында алып уйнайҙар, йырлайҙар, бейейҙәр.

➔ **Бөгөн мәҙәниәт һүнде, халыҡ рухи-мәҙәни мираҫ менән ҡыҙыҡһынмай, тибеҙ. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ, ысынлап та, шулаймы?**

**Рәүеф:** Юҡ, улай тип әйтмәҫ инек беҙ. Халыҡта дәрт-илһам бар, уны тик уятырға, йәлеп итергә, ҡыҙыҡһындырырға ғына кәрәк. Быны беҙ һуңғы ваҡытта үткәрелгән ҙур күләмле сараларҙан да сығып әйтә алабыҙ. Ауыл байрамында һәр урам әүҙем ҡатнашты. Концерт номерҙары әҙерләне, ҡунаҡтарҙы матур итеп ҡаршы алдылар. Үҙҙәренең урамына бағышлап йыр ҙа сығарыусылар булды. Һәр урам үҙенең тарихын, данлы кешеләрен барланы, концерт номерҙары әҙерләп, дәртләнешеп сығыш яһанылар.

➔ **Ауылда төшөнкөлөк һиҙеләме?**

**Рәүеф:** Һуңғы йылдарҙа ауылдарҙа, киреһенсә, йәнлелек һиҙелә. Мал тотам тигән кешегә көтөүлек тә, бесәнлек тә бар, асыҡкан кеше юҡ. Тырышлыҡ ҡына кәрәк. Беҙҙең ауылда оло йәштәгеләр генә малын бөтөрҙө. Ә йәштәр барыһы ла дәртләнеп донъя көтә. Һәр ғаилә үҙенә етерлек йәшелсә үҫтерә. Мал һуйыу, һуғым, ҡош-ҡорт өмәләре үтә, кеше бер-береһенә ярҙам итә, ҡулалмаш эшләйҙәр. Ауыл тормошо дауам итә.

**Рәмзиә:** Балалар баҡсаһы, башланғыс мәктәп бар. Унда эшләгән хеҙмәткәрҙәр, балалар, уҡыусылар менән һәр саҡ бәйләнештәбеҙ. Балалар баҡсаһы менән айырыуса ағинәйҙәр тығыҙ бәйләнеш тота. Һәр кем үҙенең эшен, бурысын белә, шуға күрә эшләүе ауыр түгел. Мәҙәниәт булһа, ауыл юғалмай ул. Беҙҙең милләтте, рухыбыҙҙы тик мәҙәниәт кенә ҡотҡара. Ҡайҙа мәҙәниәт эшләй, шунда ауыл бар. Әле ауылыбыҙ эргәһендәге Тоҙло күлебеҙҙә санаторий төҙөлә башланы, уның эшмәкәрлеге яйға һалынып китһә, был үҙе үк бик ҙур мөмкинлектәр аса ауыл халҡы өсөн. Яҡутыбыҙ тағы ла йәнләнеберәк китер, йәштәр ауылға ҡайтыр, тип өмөтләнәбеҙ.

Мәҙәниәтте бик үк һанға һуҡмаған, һалҡын ҡарағандар ҙа бар, әлбиттә. Әммә мәҙәниәтһеҙ йәшәүҙең йәме булмай. Ауыл ерендәге мәҙәниәт хеҙмәткәре - ул иҙән йыйыусы, бесән сабыусы, ҡар көрәүсе, тырма, һөнәк һаплаусы ла, кәрәк икән, штукатур-маляр, электрик та ул. Күп йүнәлешле, киң профилле һөнәр. Психолог булырға ла тура килә. Кешене сәхнәгә сығарыр өсөн һөйләшә белергә, уның кисерештәрен, һәләтен асырға, үҫтерергә кәрәк. Ҡыҫҡаһы, ҡайҙа ла эшкә елкә кәрәк. Ҙур сараларға әҙерләнгәндә икебеҙ ҙә төн йоҡламай эшләгән ваҡыттар булды, сценарий яҙыу, сәхнәнде, костюмдарыңды әҙерләү һәм башҡа ваҡ мәшәҡәттәре етерлек инде. Әле үҙем яҙған сценарийҙар бер китаплыҡ булды.

➔ **Бөгөнгө көндә һеҙҙең тормошта нимә етешмәй, тип уйлайһығыҙ?**

**Рәмзиә:** Барыһы ла етешә, Аллаһҡа шөкөр. Йорт мәшәҡәттәрендә генә түгел, эшебеҙгә лә балалар ярҙам итә. Бер нәмәгә лә борсолмағыҙ, тыныс күңел менән йәшәгеҙ, тип, өйгә лә, клубҡа ла видеокамералар алып ҡуйҙылар. Анау хәтле матур эш башҡарылғас, бер нәмәне лә боҙҙорғо килмәй. Тренажерҙа махсус шөғөлләнергә килеүселәрҙе өйҙән үк күреп торабыҙ. Спортҡа, сәләмәт тормошҡа ылығыусылар күбәйеүе ҡыуаныслы.

➔ **Йыш ҡына заман йәштәрен тәнҡитләгәндәрен ишетергә тура килә. Һеҙҙең ауылда йәш быуын нисек? Әсеп-тартып йөрөмәйҙәрме?**

**Рәүеф:** Бөгөнгө йәштәрҙең тормошҡа ҡарашы ла, ҡылыҡ-фиғеле лә беҙҙекенән айырыла, әлбиттә. Улар төрлө яҡлап үҫешергә теләй. Беҙҙең ауылда бар балалар ҙа тиерлек мәктәптән һуң ҡурай, бейеү түңәрәктәренә йөрөй һәм уларҙың насар ғәҙәткә ваҡыттары ҡалмай. Дәрестәренә әҙерләнгәс, йә хоккей, йә футбол майҙанына сығалар. Араларында кемдәрелер тәмәке тартырға маташһа, бер-береһен тәрбиәләүҙәренә шаһит булғаным бар. Сөнки мәҙәниәт, спорт үҙе үк тәрбиәләй. Спорттың башҡа төрҙәре лә үҫешә, волейбол, футбол уйнарға ярата йәштәр.

➔ **Ҡулығыҙҙан килмәгән нindәй эш бар һеҙҙең? Эх, шуны эшләһәң ине, быны эшләһәң ине, тигән теләктәрегеҙ күпме?**

**Рәүеф:** Күңел биреп тотонһаң, бөтә эште лә эшләргә була. Бына мин иретеп йәбештереүсе эшен белмәйем, тип уйлай инем. Тотоноп ҡарағайным, килеп сыҡты ла ҡуйҙы. Кәрәк булғас, тракторҙы ла һүтеп-йыйырға өйрәндем. Ғөмүмән, мәҙәниәт хеҙмәткәренә балта, көрәк һапларға ла, бесән сабырға ла белергә кәрәк. Сараларға, конкурстарға декорациялар, күргәҙмәлектәрҙе барыһын да үҙебеҙгә эшләргә, байрам үткәрелә торған биләмәне таҙартырға, сүп үләндәрен сабырға тура килә.

**Рәмзиә:** Әсәйем бәйләргә, ҡул эштәренә шәп. Ә минең әлегә бәйләмгә тотонорға ваҡытым юҡ. Ырғаҡ менән бәйләргә өйрәнгем килә. Үҙемде, пенсияға сыҡҡас өйрәнермен һәм бәйләрмен әле, тип йыуатам.

➔ **Ҡалаға күсергә уйламанығыҙмы?**

**Рәмзиә:** Балаларҙың балалары тыуғас, улар янында булып, ейән-ейәнсәрҙәрҙе ҡарашырға ярҙам итеү ниәте менән ҡалаға күсәйек тигәйнем дә, Рәүеф теләмәне. Бынау тиклем донъяны, яратҡан эшебеҙҙе ташлап китеүҙе үҙем дә күҙ алдына килтермәнем. Ауыл халҡы ла күҙ төбәп тора, тигәндәй. Ҡалаға китергә теләүемдең тағы бер сәбәбе - балалар тәркемө ойоштороп, матур бейеүҙәр һалғым килгәйне. Юғиһә, үҙебеҙҙең ауылда бер тиҫтер балалар кәмене, юҡ тип әйтергә мөмкин. Был хыялым барып сыҡмағас, хәҙер бар көсөмдө фольклор ансамбле, ағинәйҙәр менән эшләүгә һалам. Күп ерҙәрҙә сығыш яһаныҡ, төрлө конкурстарҙа юғары баһаға лайыҡ булдыҡ. Киләсәктә лә яҡташтарыбыҙ мәҙәни бергә-бергә эшләргә, ауылды күтәрергә, башҡорт халҡының мәртәбәһен арттырырға насип булһын!

➔ **Ошо көндәрҙә генә Рәмзиәгә Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре исеме бирелде. Оҙаҡ көттөгөҙ, ахыры, был лайыҡлы исемде?**

**Рәмзиә:** Һәр нәмәнең үҙ ваҡыты. Мин бик шатмын һәм яҙмышыма, эшемде юғары баһалауҙы етәкселәребеҙгә, һәр саҡ минә терәк булған тормош иптәшемә, балаларыма, коллективыма рәхмәтлемен. Был исемде алыу миңә, әлбиттә, тағы ла ҙурыраҡ яуаплылыҡ өҫтәй. Халҡыбыҙҙың мәҙәниәтен үҫтереү генә түгел, ә киләсәк быуынға еткереү бурысын да атҡарыу өсөн көс-дәрт бирһен Хоҙай.

**Лена АБДРАХМАНОВА**
**яҙып алды.**

АҢЛАТАБЫҘ!

# БЕРҘӘМ ПОСОБИЕ ТУРАҺЫНДА

**2023 йылда илдә дәүләт ярҙамының яңы төрө - берҙәм пособие барлыҡҡа килде.**

12 аҙнаға тиклем ҡатын-ҡыҙҙар консультацияһында иҫәпкә торған йөклө ҡатын-ҡыҙҙарҙың һәм 17 йәшкә тиклемге балалар тәрбиәләгән ата-әсәләрҙең ошондай түләүҙәргә хоҡуғы бар. Бер кешегә иҫәпләгәндә, килеме йәшәү минимумынан кәмерәк булған ғаиләләр пособиеға дәғүә итә ала. Башҡортостан Республикаһы буйынса уның күләме - 12 650 һум.

# ӘСӘЛЕК КАПИТАЛЫН...

**2023 йылдан өс йәшкәсә балаһы булған һәм аҙ тәьмин ителгән ғаиләләр Әсәлек капиталы аҡсаһынан айлыҡ түләү алырға мөмкин.**

Бының өсөн ғаиләнең йән башына уртаса килеме Башҡортостанда йән башына билдәләнгән йәшәү минимумының ике дәүмәленән артмаҫҡа тейеш. 2023 йылдың 1 ғинуарынан йәшәү минимумы күләме - 12 650 һум. Түләү тәғәйенләгәндә ғаиләнең ғариза тапшырғанға тиклемге 12 айлыҡ килеме ҡарала. Түләү күләме - 12 271 һум.

Ғаиләгә айлыҡ түләү балаға 3 йәш тулғансы бирелә. Пособие түләй башлау ваҡыты түбәндәгесә билдәләнә: бала тыуған көндән - әгәр атаәсә бала тыуған көндән 3 айҙан да һуңға ҡалмайынса мөрәжәғәт итһә, алдағы айҙарға түләү тулы күләмдә күсерелә; мөрәжәғәт иткән көндән - бала тыуып 3 ай үткәс, түләү тәғәйенләүҙе һорап мөрәжәғәт иткән осраҡта. Әгәр ғаилә айлыҡ түләү шарттарына тап килһә, аҡса ғаризала күрһәтелгән иҫәпкә киләсәк.

Ғариза биреүҙең 2 ысулы бар: Дәүләт хеҙмәттәрендә шәхси кабинет аша; Социаль фондтың клиенттар хеҙмәте аша.

# ЕТЕМДӘР...

**2023 йылдан опека һәм попечителлек өлкәһендәге яңы закондар көсөнә инде.**

- Башҡортостанда етем балаларҙы, ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған һәм опекаға (попечителлеккә), ғаиләгә бирелгән баланы ҡарауға айлыҡ пособие күләме 10 процентҡа артты.

- Торлаҡ менән тәьмин итеү буйынса төбәк исемлегенә индерелгән һәм 23 йәшкә еткән етем балалар торлаҡ һатып алыуға сертификат алырға мөмкин. Был исемлектә 7 меңдән ашыу етем бала бар, уларҙың 980-ене 23 йәш тулған.

- Етем һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған, даими йәшәү урыны булмаған һәм торлаҡ менән тәьмин ителергә тейешле балаларҙың урындағы хакимиәт адресы буйынса теркәлеү хоҡуғы бар. Шуның ярҙамында улар социаль түләүҙәргә, шулай уҡ мәшғүллек өлкәһендәге хеҙмәттәргә иҫәп тота ала.

Өҫтәмә мәғлүмәтте йәшәгән урын буйынса Башҡортостандың опека органдарында, күп функциялы үҙәктәр аша алырға була.

# ЭШ БИРЕҮСЕ ТҮЛӘЙ

**2022 йылдың 19 декабрендәге "Рәсәй Федерацияһы хеҙмәт кодексының 302-се һәм 351-7-се статьяларына үҙгәрештәр индереү тураһында"ғы 545-ФЗ һанлы законына ярашлы, 2023 йылдың 1 мартынан вахта ысулы менән эшләүселәрҙе эш биреүсенең торған еренән йәки йыйылыу пунктынан эш урынына тиклем һәм унан кире алып ҡайтыу эш биреүсе иҫәбенә тормошҡа ашырыласаҡ.**

Шулай уҡ эш биреүсе хеҙмәткәргә юл хаҡын ҡаплай ала. Компенсация түләү күләмен һәм тәртибен хеҙмәт йә коллектив килешеүҙә йәки локаль норматив актта билдәләргә мөмкин.

# ЯРҘАМҒА МОХТАЖДАРҒА...

**Үҙен өлөшләтә йәки тулыһынса хеҙмәтләндерә алмаған оло йәштәгеләр өсөн республика социаль координаторҙар хеҙмәте эшләй.**

Уның бурысы - кешене ярҙамға мохтаж тип таныу, стационар йәки ярым стационар учреждениеға урынлаштырыу, оло йәштәге кешене ҡабул итеүсе ғаиләне әҙерләү. Социаль координаторҙар хеҙмәте республиканың һәр районында һәм ҡалаһында булдырылған. Юридик яҡтан улар өлкән кешеләр һәм инвалидтар өсөн тәғәйенләнгән интернаттарҙың структур бүлексәләре булып тора. Улар мөрәжәғәт итеүсене тыңлай, проблеманы хәл итеү алгоритмын билдәләй; игтибар бүлеп, хәстәрлек күрәләр; кешегә нindәй ярҙам кәрәклеген билдәләйҙәр; кешене социаль хеҙмәтләндереүгә мохтаж тип танығайҙар; стационарға билдәләйҙәр йәки социаль хеҙмәткәр беркетәләр.

Был ярҙамды алыу өсөн районығыҙҙың социаль координаторҙар хеҙмәтенә мөрәжәғәт итергә кәрәк. Шулай уҡ, ҡыҙыу линия телефоны аша социаль хеҙмәтләндереү мәсьәләләре буйынса квалификациялы ярҙам алырға мөмкин: 8 (800) 775 00 14

ИНТЕРНЕТТАН



# КӨНДӨҘ ЙОҠЛАМА

■ Төнөн йоҡо туймағанда, шул сәбәпле нервылар ҡуҙғып торғанда көндөҙгө йоҡо сәләмәтлек өсөн файҙалы, тип билдәләй Гарвард дауаханаһының йоҡо медицинаһы бүлеге табиптары. Шулай ҙа көндөҙ йоҡлауҙың кире яҡтары ла бар. Быны бер нисә эре эпидемиологик тикшеренеүҙәр күрһәткән. Мәҫәлән, көндөҙ йоҡларға яратҡандар араһында диабет, йөрәк сирҙәре йышыраҡ осрай, депрессия ла улар өсөн ят түгел. Көндөҙ йоҡо килә икән, тимәк, төндә насар йоҡлайһығыҙ, был хроник сирҙәрҙә аҙҙырып ебәреүе ихтимал. Төнөн насар йоҡлау шулай уҡ йоҡо менән бәйле тәрлө тайпылыштар тураһында һөйләй. Көндөҙ ятып алғандан һуң, кисен йоҡлап китә алмаусылар ҙа бар.

■ Йәшелсә, емеш-еләк антиоксиданттарға бай икәнен беләбеҙ. Әммә антиоксиданттар, мәҫәлән, Е витамины иттә лә бар. Япония ғалимдары тикшеренеүҙәр үткәреп, иттә имидазол дипиптидтары (карнозин һәм ансерин) ғына түгел, уларға яҡын торған башҡа берләшмәләр булыуын да асыҡлаған. Үҙенсәлеге шунда, уларҙа ябай берләшмәләргә ҡарағанда, кислород атомы бөрәүгә артығыраҡ. Ошо берләшмәләр антиоксидант әүҙемлегенә эйә лә инде һәм организмдан ауыр металдар иондарын сығара алалар. Шуға ла иттән тулыһынса баш тартыу кәрәкмәй. Ә бына эшкәртелгән ит ризыҡтары - колбаса, сосискаларҙы һатып алмағыҙ ҙа, улар эсәк яман шеше хәүефен арттыра.

■ Киҙеү, киҫкен вируслы сирҙәр әүҙемләшкән ваҡытта күпләп имбир ҡуллана башлайбыҙ. Ысынында иһә, тамыры эфир майҙарына бай был тропик үҫемлектең файҙаһы бармы һуң? Мюнхен техник университетының Биологик аҙыҡ системаһы институты үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, имбир организмдың көсөн уятып ебәрә. Унын әсе тәме бактериялар менән көрәшеүсе күҙәнәктәрҙе әүҙемләштереп ебәрә икән. Аҙыҡтарҙа булған бындай сифаттарҙы иммунитетты көсәйтеү өсөн ҡулланыу бик дөрөҫ, тип иҫәпләй белгестәр.

■ Иммунитетҡа бәйле тағы ла бер ҡыҙыҡлы яңылыҡ. Ниндәйҙер кимәлдә стресс кеше организмын нығыта һәм уның һаҡлаусы функцияларын әүҙемләштереп ебәрә. Әйтәйек, спорт менән шөғөлләнеү организм өсөн стресс иҫәпләнә, әммә ул кешене көслөрәк һәм сызамлыраҡ итә. Һыуыҡ та кеше өсөн файҙалы була ала. Кеше күптән инде үҙе өсөн комфортлы мөхит булдырып өйрәнгән, тышта минус булғанда ла өйҙәрҙә йылы. Бының кире яғы ла бар, организм үҙенең яраҡлашыу һәләтен юғалта, наҙлы, инерт кешегә әүерелә. Кеше өшөгәндә организмда физиологик реакциялар бара: пульс арта һәм тын алыу йышая. Ошо рәүешле кеше йылыны һаҡларға тырыша. Тимәк, өшөп алыуҙың да иммунитет өсөн файҙалы яғы бар. Шуға ла ҡыш башланғанда өшөп барһаҡ та, аҙаҡтан һыуыҡтарға өйрәнеп киткәс, уны һиҙмәйбеҙ ҙә. Һалҡын һыу менән ҡойонған кешеләр һирәк ауырый. Уларға киҙеү ҙә ҡурҡыныс түгел. Әммә спорт менән шөғөлләнмәгән кеше, әйтәйек, һалҡын ямғыр аҫтында ҡала икән, организм шунда уҡ бирешәсәк, сөнки ул сыныҡмаған. Шуға ла организмды һыуыҡ менән дә сыныҡтырырға һәм һалҡын миҙгелдәрҙе яратырға өйрәнәйек.

ТӘРБИӘ МӘКТӘБЕ

**Элегерәк балаһын мәктәпкә уҡырға алып барғанда атай-әсәйҙәрҙең: "Ите - һиңә, һөйәге - миңә", - тип әйтә торған йолаһы бар ине. "Өйҙәге биш-алты баланы тыңлатып булмай, ҡырҡ ата балаһын уҡытыусылар нисек тыңлата икән?" - тип, уҡытыусыларыбыҙҙың түҙемлек-сабырлығына хайран ҡалып, атай-әсәйҙәребеҙҙең үҙ-ара һөйләшкәндәре хәтерҙә нык ҡына уйылып ҡалған. Ошондай һөйләшеүҙәр иҫкә төшкәндә: "Ай-һай, беҙҙең менән дә проблемалар булғандыр, юғиһә, атай-әсәйҙәребеҙ ауыҙынан бындай хәбәрҙәр сыҡмаған булыр ине", - тип уйланыла. Ысынлап та, проблемаһыҙ бала саҡ бөтөнләй булмайҙыр ҙа ул, әммә ниндәй айырма бар һуң ул беҙҙең быуын ата-әсәләренең проблемалары менән хәҙерге быуын ата-әсәләренеке араһында? Беҙҙең быуын балаларында өҫтөнлөк иткән шаянлыҡ-шуҡлыҡ ҙурыраҡ проблемамы, әллә алдашыу, яҡшатланыу, ошаҡлашыу ҡурҡынысыраҡ проблемамы? Ошо һорауыма яуап итеп, уҡытыусы булып эшләгән танышымдан ишеткән бер ваҡиғаны бәйән итеп китмәксемен.**

# АТЫНА КҮРӘ САНАҺЫ,

## заманына күрә - балаһы

Мәктәптә һәр балаға ниндәйҙер карточкалар таратырға ҡушылған икән. Шул карточкаларҙы уҡыусыларына таратып та бөтмәҫ борон шылтыраған телефонын алыуға, теге остан: "Һеҙ нишләп минең балама карточка бирмәнегеҙ!" - тигән ҡәтғи тауыш ишетә уҡытыусы. Ғәжәпләнеүенең сиге булмай уның: "Әллә бер ерҙә видеокамера торамы икән? Мин ул карточкаларҙы бит класымдың яртыһына ла таратып өлгөрмәгәнмен әле... Был ни хәл?" Баҡһаң, балаһы телефон аша әсәһенә смс-хәбәр ебәреп өлгөргән, ә әсәй кеше, аңын-тоңон уйлап та тормай, уҡытыусынан ғәйеп эҙләй ҙә башлаған. Ошондай әсәйҙәр балаһын нисек оло тормошҡа әҙерләр? Үҙе ғаилә ҡороп йәшәй башлаһа, хәләл ефетенең һәр ҡылығын ата-әсәһенә еткереп смстар яҙа башлаһа, был ғаилә ныҡлы булырмы? Һәм тағы ла: йәмғиәт төймәнән дөйә яһарға яратҡан атай-әсәйҙәрҙән уҡытыусыны яҡлап, берәй ғәҙел һүҙен әйтә алырмы? Уҡытыусы уҡытыусы булырҙан иң алда кеше бит әле!

Ошо ваҡиғаны ишеткәндән һуң һәм шулай уҡ яңыраҡ "Киске Өфө" гәзитендә баҫылған ошаҡлашыу тураһындағы мәҡәләне уҡығас, үҙемдең бала сағым, атайым, әсәйем иҫкә төшөп, бергилке хәтирәләргә сумып ултырҙым әле. Етенсе класс тирәһендә уҡый инем булһа кәрәк. Класыбыҙға ошоға тиклем урыҫ класында уҡыған Әмир исемле яңы уҡыусы килеп ҡушылғайны. География дәресе алдынан өйгә бирелгән эште ҡабатлап ултырам. Күрһәң, ҡыҫҡырып уҡығанмындыр. "Америка" тип уҡыуым булды, яны малай яныма килеп, миңә тондормаһынмы! Ҡыҫҡырып илап ебәрҙем. Директор ағай (география уҡытыусыһы) дәрескә ингәс, илап ултырыуымды күреп, "Нишләп буҙлап ултыраһың, тым!" тине лә, дәресте башлап та ебәрҙе. Дәрес бөтөп, өйгә ҡайтып ингәс, тағы ла илап ебәргән кеше булдым. Атайымдың ҡоро ғына итеп: "Нимә булып китте?" тигән һорауына үҙемде рәнйетеүсенең исемен әйттем. Атайымдың йөҙө лә үҙгәрмәне.

- Кил әле бында, - тине ул урындыҡ өҫтөндәге тәҙрә янына саҡырып. Барҙым.

- Ҡара әле ана торған бағанаға.

Бер ни ҙә аңламайым. Мине рәнйетеүсе менән был бағананың ниндәй уртаҡлығы бар икән?

- Күрәһеңме шул бағананы? Һин шул бағанаға барып һуғыр инеңме?

Һаман бер ниҙә төшөнмәйем.

- Ул бағананың бында ни ҡыҫылышы бар һуң әле?

- Әнә шул-шул. Һин белмәйһең, ә мин беләм. Тик торған бағанаға һин дә барагилеп һуҡмайһың, мин дә һуҡмайым. Һин дә шул бағана кеүек тәртипле генә, тик кенә торһаң, һиңә лә киләгилеп, Әмир һуҡмаҫ ине.

- Ю-у-уҡ, мин яңы малайға яҡын да барманым!

- Яҡын бармай ғына ла кешене рәнйетергә була. Алыҫтан тороп ҡына, телең менән генә! Үҙең теймәһәң, телең тейгәндер!

Ошо ваҡиға аша атайымдың биргән һабағы минә ғүмерлек һабаҡ булды. Хәҙерге көндә үҙем өләсәй булып, атай-әсәйем күптән инде гүр эйәләре булһалар ҙа, һаман да уларҙың һүҙен тотоп, улар тәрбиәһе менән көн күрәм. Ғөмүмән, тәрбиә мәсьәләһенең ниндәй генә өлөшөнә ҡағылмаһын, баланы мәктәптә уҡытыусылар тәрбиәләргә тейеш тигән хәҙерге заман "ҡанундарын" үҙем йөрәгем менән дә, аҡылым менән дә тулы килеш ҡабул итә алмайым. Сәйер:

ҺАБАҠТАР

# ҮКЕНЕСЕҢ БУЛМАҺА...

**Халиҡ ҡарт һуңғы осорҙа китап уҡыуға әүәҫләнеп китте. Ятһа ла, торһа ла - ҡулында китап, хатта ашарға ултырғанда ла һалмай ул. Ҡарсығы тәүҙә өндәшеп ҡарағайны, һуңынан ҡартайған һайын еңмешләнгән хәләленә ҡаршы килмәне.**



Күп балалы татыу ғаиләлә үҫкән Мәҙинә әбей тауыштыныһыҙ сәй эсеүҙе йәштән мөрхәтһенмәне. Бер-берәнә эшләгән эше, бешергән ашы өсөн рәхмәт әйтеү, кәңәштөнәш итеү, һис юғында, оҙон көн буйы күрешмәгәндән һуң яйлап һөйләшеп ултырыу сараһы һымаҡ күрә ине аш мәлдәрен. Бигерәк тә тәмле-татлы бешереп, киске аш ваҡытын көтөп ала ине. Унда инде бөтә ғаиләһе - биш улы, ире түңәрәк өҫтәл артына йыйыла. Эштән арып ҡайтҡан кешене маҙаһыҙламаһын тип, бәләкәй саҡтарында балаларын аталары ҡайтҡансы ашатып ҡуйыр ине. Һуңғараҡ, үҙҙәре ҡалаҡ тотоп ашай башлағас, берберәһенең үксәһенә баҫып үҫеп килгән улдарын үҙҙәре менән бергә ултыртты. Тик ниңәләр, Мәҙинә теләгәнсә, һөйләшеп, берәһенән-берәһе алсағыраҡ уландары менән күнелле итеп гәпләшеп ултырырырға насип булманы. Балалар баҡсаһында, мәктәптә күргән-ишеткәндәрен, көнө буйы алған тәьҫораттарын һөйләй башлаһалар, атайҙары тыңлау түгел, ороро ярһып, ауыҙҙарын ябып ҡуйыр ине. Уларҙың артыҡ иркә, телдәр булыуына ҡатыныңа ризаһыҙлыҡ белдерҙе, ҡайһы берҙә хатта ҡулындағы ҡалағын өҫтәлгә бәреп тороп китер ине.

Мәҙинә - түҙемле, аҡыллы ҡатын. Балаларын, атайҙарының нык арып ҡайтыуын сәбәп итеп, бәләкәй саҡтағы кеүек алдан ашатырға күнегеп китте. Тик Халиҡ ҡатыны менән икәүҙән-икәү генә ҡалһа ла ҡәнәғәтлек кисермәне, йөҙөн сирып, үсеккән бала кеүек өнһөҙ-тынһыҙ ашауын дауам итте. Туйғас, ауыҙы әсенән ниңәлер мөнгөрҙәне лә тороп китте, әллә шулай үҙенсә "әпәр" итте, әллә ҡатынына тәмле аш менән һыйлағаны өсөн рәхмәт әйтте. Мәҙинә уны ҡартайғансы аңламаны...

Хаҡлы ялға сығыуына тиҫтә йылдан ашыу ваҡыт үтте инде. Йәштән бер ҡыҙыҡһыныуы ла, яратҡан шөғөлө лә булмағас, тәүҙә Халиҡ үҙен ҡайҙа ҡуйырға белмәй аптыраңды. Күршеһенә эйәреп, балыҡ ҡармаҡларға ла йөрөгән булды, әммә уға тигән балыҡ, гел уның емен урап үтеп, күршеһенә әләгеүенә сыҙар хәле ҡалмағас, тиҙҙән был мауығыуын ташларға булды. Баҡсасылыҡҡа ла бармы юҡ, был эште баштан уҡ тулыһынса Мәҙинәһенә, улдарына тапшырған. Шуға ла ҡартайған көнөндә белмәгәненә ҡыҫылырға теләмәне.

Ауылға ҡайтып, туған-тыумасаһы араһында булырға ла, көс-кәре булып та, уларға хужалыҡ эшендә ярҙам итергә лә атлыҡып торманы. Йылына бер тапҡыр һөнәри байрамдары көнөндә мәҙҙәтле ялға киткән эш урынына барып килә лә, башҡаса халыҡ араһына ла сыҡманы.



баланың яҡты донъяға тыуыу-тыумауы тураһындағы ҡарарҙы ата-әсә ҡабул итеп, балаһының киләсәген яҡынса күҙаллай, пландар ҡора, ә баланың ҡылған ҡылыҡтары өсөн мәктәп яуап бирә. Төнгә сәғәт 1-ҙәме, таңғы 5-тәме бала ҡылған яуызлыҡ өсөн тыуҙырған ата-әсәһе түгел, ә уҡытыусыһы яуап тота. Уҡытыусыға ҡуйылған хәҙерге талаптар буйынса, "шулай файҙаһы ҙур булыр ине" тип түгел, ә "ошолай беҙҙең өсөн уңайлыраҡ" принцибы менән эш итеүҙән яуаплылыҡ уҡытыусы елкәһенә һалыналыр, күрәһең. Миҙалдың икенсе яғында уҡытыусының үҙен шәхес булараҡ, кеше булараҡ һанға һуҡмау, уҡытыусының да үҙ ғаиләһе барлығын, үҙе тыуҙырған балалары өсөн үҙенән башҡа бер кемдән дә тәрбиә өмөт итмәүен күрергә теләмәү ап-асыҡ яҙылған. Был фекеремде дәлилләп, уҡыусыһы юл ҡағиҙәләрен боҙған өсөн дә, ҡайҙалыр әҙәпһеҙ һүҙҙәр яҙып китһә лә, кемдер менән һуғышһа ла, хатта тикшереүсе органдар ҙа уҡытыусының тәрбиәүи эш планын тикшереп, хеҙмәтенә баһа бирә башлауы ғәҙел хәлме?

Ошаҡлашыу тигәндән, ғаиләбеҙҙә өс төрлө: әсәйһеҙ - алтау, атайһыҙ - икәү, бишәүебеҙ атай-әсәйле булып, төрлө-төрлө балалар тәрбиәләнгәнлектән, ошаҡлашыу ҡәтғи тыйыла торғайны. "Хәйерниса апайығыҙҙы яманлап, минә килеп ошаҡлап йөрөмәгеҙ, мин апайығыҙҙың арҡырыһын-буйын белеп бөткәнмен инде!" тип тәүге ҡатынынан етем ҡалған алты балаһын исҡәртеп ҡуйыуы ла атайымдың өйҙәге тынлыслыҡ, татыулыҡ хаҡына алдан күрелгән хәстәрелер тип аңлайым хәҙерге аҡылым менән. Өйҙә балалар үҙ-ара талашып, һуғышып китеп, әсәйемә әйтәм, йә атайыма әйтәм, тип илай башлаһаҡ, беҙгә "Ошаҡ тоҡсайы!" тигән исем тағыла торғайны. Атай ҙа, әсәй ҙә ошағыбыҙҙы ҡабул итмәй, ошаҡлаусы булараҡ, тик үҙебеҙҙе ғәйепләрен һиҙгәнгә, үҙ-ара булған ireш-талашты атай-әсәйебеҙ белмәй ҙә ҡала торғайны. Әсәйебеҙ, ғәҙәтенсә, "Ошаҡлашма, оло ат менән уйнаған тайҙың бото аҡһаған", йә булмаһа, "Шулай ул, уйындан уймаҡ сыға" тип, мәҡәл йә әйтем менән "Оло ағайҙарыңды, апайҙарыңды тыңлап йөрөн", тигәнде аңлатып, ҡылығыбыҙға баһа бирер ине. Атайыбыҙ: "Балаларҙы ҡоторторға ярамай, атыу елкәһе менән ултыра улар. Ошаҡлашып өйрәнеп китһә, ишеткән һәр бер хәбәрҙе һөйләп, һүҙ ташыуҙан бушамаҫ та, тартынмаҫ та, унан инде юҡты бар итеп алдаша башлар", - тип, ололарҙы ололай белмәй ҡуйыуыбыҙҙан да, һүҙ йөрөтөүсе булып, ошаҡсы, алдаҡсы булып китеүебеҙҙән дә үҙенсә ҡурсалап ҡына тора ине. Ололар алдына төшөп хәбәр һөйләргә маташҡан сағыбыҙҙа ла атайыбыҙҙың "Оло бәйелләнмә!" тип, тыя һала торған ғәҙәте була торғайны. Бала ҡасан да бала инде ул, шашып киткән саҡтарыбыҙ ҙа байтаҡ булды. Ундай ваҡыттарҙа: "Ана, өрләктә торған шыйыҡ сыбыҡты күрәһеңме?" - тип өҫтә торған сыбыҡҡа ишара булһа, шундуҡ шашыныуыбыҙҙан туҡтар инек. Сыбыҡ әләктереүгә барып етмәһәк тә, шул тал сыбығы ла үҙе бер тәрбиә ысулы булған икән заманында.

Халҡыбыҙҙа элек-электән тәрбиә мәсьәләһенә ҙур иғтибар бирелгәнлектәндер, тәрбиә тураһында бик күп мәҡәл-әйтемдәр ҡалған. "Бала ғәйебе - ата-инәһенеке". "Үҙең ҡарға булһаң, балаң һандуғас булмаҫ". "Баланы табыу һөнәр түгел, ә бағыу - һөнәр". Юғарыла килтерелгән мәҡәл-әйтемдәрҙән күренеүенсә, тәрбиә - ул һөнәр, эйе, бик тә яуаплы һөнәр. Тәрбиә - ул һинең хеҙмәт емешең. Һине бәхетле иткән дә, бәхетһеҙ иткән дә ана шул үҙ хеҙмәтеңдең һөҙөмтәһе - тәрбиә. Баланан бәхетең булһа, ҡарт көнөңдә лә йәш итер, баланан бәхетең булмаһа, иртә йәштән дә ҡарт итер, тигәндәй, халҡыбыҙ борон-борондан тәрбиә дилбегәһен үҙ ғаиләһе ҡулынан ысҡындырмаған. Уҡытыусылар менән бәйләнештә әҙмәү - үсмер балаларының хаталарын ваҡытында төҙәтеп ебәреү өсөн иң кәрәкле ысулдарҙың береһе итеп һаналған. Хәҙерге быуын ата-әсәләренә лә оло быуындарҙан ҡалған бындай тәрбиә ысулын отоп алып ҡулланыу һөҙөмтәлерәк булыр ине, минеңсә.

**Нәзиә БИКБОВА,**
**Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы.**
**Сибай ҡалаһы.**

Ҡатыны менән парлашып йәки ғаилә менән концерт-маҙарға йөрөргә, сәйәхәт итергә лә яратманы.

Шулай, хаҡлы ялының бер нисә йылы диванға ҡырын ятып, телевизор ҡарап үтте. Һуңғы йылдарҙа ғына нисәмә йыл үҙ уҡыусының көткән китаптарға иғтибар итте. Өйөндә етерлек улар, йәштән уҡыһа-уҡымаһа ла китап йыйырға ятраты. Бигерәк тә матур биҙәлешле китаптарға иҫе китте. Ундай осраҡта авторына ла, жанрына ла ҡарамай алыр ҙа, китап шкафының иң күренгән урынына ҡуйып, һоҡланыр ине. Китаптар араһында бите бер тапҡыр ҙа асылмағандары ла юҡ түгелдер, сөнки ул ваҡытта уның уҡырға форсаты ла булманы, яратманы ла, бушҡа ваҡыт үткәреү кеүек ҡабул итте. Хәҙер иһә бына бер нисә йыл инде китап уҡып, йоҡоһонан да, ашынан да яҙыр хәлгә килде.

Күптән түгел уның ҡулына "Батшаларға бүләк, йәки урта быуаттағы әхлаҡи васыяттар йыйылмаһы" китабы эләкте. Уны, әлбиттә, ҡасан, ҡайҙан алғанын иҫләмәй ҙә, уның кәштәгә нисек эләккәнен дә оноҡҡан.

Һәр юлын йотлоғоп уҡыны ул. Бер бүлеген уҡып сыға ла, уны бөгөнгө көҙләктән сығып, төрлөсә фекерләй, анализлай, сағыштыра. Уларҙың һәр береһенең ниндәй ҙур мәғәнәгә эйә булыуын, һәр берешдә ҙур аҡылхазина һаҡланыуын, уҡыған һайын зиһене артыуын тойҙо. Фәҡәт батшаларға ғына ҡағылған этика нормалары түгел икән ул. Дөйөм кешелектең әхлаҡи ҡағиҙәләре йыйылған икән.

Уны нисә ҡат уҡып сыҡҡандыр Халиҡ, иллә-мәғәр һәр бүлекте ятлап тигәндәй алды, үҙенең тормошон күҙ алдына килтерҙе. Нисек дөрөҫ йәшәмәгән ул! Эх, был яҙмалар саҡ ҡына ҡулына алданыраҡ эләкһәме - белер ине нисек йәшәргә, эшләргә! Ғүмер буйы эш тип ғаиләһен ҡайғыртманы, эшендә иһә балалары күп булыуына һылтанып, балалар баҡсаһынамы, мәктәпкәме йыйылышҡа, конференцияға барыуҙы сәбәп итеп, башҡаларҙан алданыраҡ ысҡынырға тырышты. Ә үҙе балаларының ҡайһыныһы нисәнсе класта уҡығанын да белмәгәндер әле. Ярай, нисек тә буй еткерҙеләр, өйләнеп, үҙ аллы тормош юлына баҫтылар. Әле булһа, бер проблемалары тураһында ла һөйләмәй улар Халиҡ ҡартҡа. Аҡса, кәңәш, ярҙам һорамайҙар, тип, быға тиклем ҡыуана ғына ине. Бөгөн килеп, уларҙың тормошонда уның өсөн урын юҡ икәнлеген аңланы...

"Дүрт нәмә дүрт нәмәне тыуҙыра: тиҫкәрелек - хурлыҡты, асыу - үкенеүҙе, яман теллелек - дошманлыҡты, ялҡаулыҡ - ауыр яҙмышты" тигән бүлекте уҡығас, тороп уҡ китте ҡарт. Ниндәй хаҡ һүҙҙәр яҙылған, тип уйланы. Береһенә лә баш бирмәйем тип, эшендә лә, өйөндә лә күпме тиҫкәреләнде ул. Нимәгә иреште һуң? Әсе теле менән күршеләрен, хеҙмәттәштәрен генә түгел, иң яҡын кешеләрен - ҡарсығын, улдарын, туғандарын үҙенән биҙҙерҙе, ситләтте. Уларға яҡты йөҙ күрһәтеүҙе, йылы һүҙ әйтеүҙе кәмһенеү, түбәнһенеү кеүек күрҙе ул. Асыуын теҙгенләй алмай, эргә-тирәһендәгеләрен күп тапҡыр үҙенә ҡаршы ҡуйҙы, шуның өсөн аҙаҡ үҙе күпме үкенде, әммә юҡҡа рәнйеткәне, яңылышҡаны өсөн ғәфү үтенергә теләмәне, теләмәне генә түгел, был уй башына ла инеп сыҡманы.

Ялҡаулыҡ ауыр яҙмышҡа илтә, тиелә. Ялҡау тип һанамаһа ла үҙен, Халиҡ ҡарт артыҡ эшләргә яратманы. Эшендә үҙенә йөкмәтелгәнде, әлбиттә, еренә еткереп үтәне, әммә арттырып, күберәк эшләргә атлығып торманы. Эргә-тирәһендәгеләргә лә ярҙам итергә ашыҡманы, ҙур коллектив булһа ла шәхсән үҙен генә ҡайғыртты, үҙе тураһында ғына уйланы. Шуға ла хеҙмәттәштәренең береһе лә уның менән "разведкаға" барырға риза булмаҫ ине...

...Халиҡ көҙгө алдына килде лә үҙенә текәлде. Оҙаҡ ҡарай алманы ул. Бер нөктәгә текәлеүҙәнме, күҙе йәшләнәме, күҙ алды томаланды. Эргә-тирәһендәгеләрҙе ғүмер буйы күҙ ҡарашы менән ҡурҡытып тотҡан ҡарт ҡарсығының, уландарының күҙенә лә шулай тура ҡарай алмағанын аңланы.

**Ләйсән СӘЛИХОВА.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# АҠСА ҺӘМ ҒАИЛӘ

## Маҡсат ҡуй!

Шул рәүешле кредиттарға батып йәшәгән кешеләрҙең, ғәҙәттә, хыялланып йәшәгән маҡсаты булмай. Шуға ла бурыслы булмайым тиһәң, маҡсат ҡуйырға һәм уны нисек тормошҡа ашырасағыңды планлаштырырға кәрәк буласаҡ. Быныһы мөһим: маҡсатығыҙ һеҙгә көс өҫтәрлек булырға тейеш. Телефон, тун, йорт, машина - былар шул тиклем ваҡ маҡсаттар. Тәүге урында һеҙҙең күңелегеҙҙе тулыһынса биләп алған ниндәйҙер идеялар торһон. Йөрәгегеҙгә ут тоҡандырыусы хыял. Ә аҡса иһә аҙағыраҡ, автоматик рәүештә киләсәк.

Маҡсаттар ҙурыраҡ булған һайын, үҙең дә көндән-көн камиллашырға тейешһең. Шул саҡта тышҡы атрибуттар аша үҙеңде лә, башҡаларҙы ла алдарға теләгең һүреләсәк. Кем тормошон планлаштыра белмәй, ул мотлаҡ йәмғиәт, реклама һәм ысынбарлыҡта кәрәге булмаған теләктәренең йоғонтоһона эләгә.

Маҡсат ҡуйғанда ошондай эҙмә-эҙлелек һаҡланһын, мәҫәлән: көслө һәм үҙ-үҙенә ышанған кеше булам - көсөмдө йәлләмәйенсә эшләйем - маҡсатыма өлгәшәм. Күптәр башҡараҡ планлаштыра. Минең шуным-шуным буласаҡ, ти улар. Әммә "минең шул әйберем буласаҡ" тигәндә "мин шундай буласаҡмын"дан өҫтөнөрәк ҡуйыу ҡулланыусы кредиттарына килтерә лә инде. Үҙеңдән шәхес булараҡ үҫешмәүеңде әйбер артына йәшерәң генә. Ошондай күнегеү эшләп ҡарағыҙ.

**1.** 3, 7, 10 йылдан кем буласаҡмын? Минең турала гәзиттә ниндәй сифаттар ҡулланып яҙасаҡтар?

**2.** Киләсәктә нимә менән шөғөлләнәсәкмен? Көн тәртибем ниндәй буласаҡ? Йыллыҡ эш планын самалап ҡарағыҙ, нимәләрҙе бер ҡасан да эшләмәҫ инегеҙ, ошолар хаҡында ла билдәләгеҙ.

**3.** Ошо уҡ ваҡыт арауығында минең ниндәй әйберҙәрем буласаҡ, йорт, автомобиль һ.б.

Бәлки, тәү тапҡыр был һорауҙарға яуап биреүе еңел булмаҫ, әммә уны аҙна һайын яңыртып эшләп торогоҙ. Быларға өлгәшә алмайым ул, тип уйлайһығыҙ икән, үҙегеҙгә ышанысығыҙҙы арттырыу йәһәтенән эш башлағыҙ. Тормошҡа ышанығыҙ, унан күберәкте өмөт итегеҙ.

Һәм, аҡсаны ятырға өйрәнегеҙ! Аҡсаны һаҡларға өйрәнегеҙ, быының өсөн артыҡ аҡсам юҡ тип иҫәпләгәндә лә, бер аҙ бол туплағыҙ. Үҙегеҙ менән берәй банкнота йөрөтөгөҙ. Әйтәйек, ошо 5000 һумлыҡ банкнотаны бер ҡасан да тотонмағыҙ. Ошо рәүешле гел аҡсалы булыу тойғоһон уятаһығыҙ, үҙегеҙҙе бай итеп күҙ алдына килтерәһегеҙ. Өйөгөҙгә сейф алып ҡуйығыҙ, банкта арендаға алырға ла була. Унда ҡулаҡса йәки алтын слитогы һаҡлағыҙ. Ваҡыты-ваҡыты менән уларҙы сығарып, уйнап алырға, улар менән һоҡланырға кәрәк. Шулай уҡ аҡсалата хәйер бирегеҙ. Һеҙҙең өсөн ул артыҡ аҡса ла түгелдер, әммә кемгәлер ул бер тапҡыр булһа ла туйғансы ашарға мөмкинлек бирер. Йәки 10 евро Африка илдәрендә катарактанан операция яһатыу өсөн етә. Ошо аҡсаны тотоноп, кешене һуҡырлыҡтан ҡотҡарырға була. Шул уҡ аҡсаны йәлләп тә кешене көн яҡтыһынан мәрүм итергә мөмкин. Ошо рәүешле аҡсаның ысын ҡиммәтен аңларға өйрәнәһең.

**Бодо ШЕФЕР.**



### 27 ФЕВРАЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00, 3.00 Новости.
9.10 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.50 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.30 Х/ф "Одинокая женщина желает познакомиться". [12+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.45, 14.15, 18.05, 20.20 Информационный канал. [16+]
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Долгожданная премьера. "Тест на беременность"". [16+]
22.40 "Большая игра". [16+]
23.40 Д/с Премьера. "Век СССР". [16+]
1.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Кто против?" [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Лимитчицы". [12+]
23.25, 1.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
0.05 Д/ф "Новороссия". [12+]
3.00 Т/с "Каменская". [16+]
4.35 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Байык" представляет... [12+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз).**
**11.45, 14.45, 16.00, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Спортивная история. [12+]**
**12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**12.45, 3.15 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.45 Новости (на баш. яз).**
**13.45, 0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Преград. Net. [6+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 История одного села. [12+]**
**18.00 "Бай". [12+]**
**19.00, 20.30 Вечерний телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Пофутболим? [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Д/ф "Майдан. Поворот на войну". [16+]**
**1.15 Спектакль "Прекрасная возлюбленная". [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.00 Следопыт. [12+]**

### 28 ФЕВРАЛЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 20.20 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Долгожданная премьера. "Тест на беременность"". [16+]
22.45 "Большая игра". [16+]
23.45 Д/с Премьера. "Век СССР". [18+]
1.20, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Кто против?" [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Лимитчицы". [12+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Каменская". [16+]
3.45 Т/с "Личное дело". [12+]
4.33 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Ете егет". [12+]**
**10.45 Надо знать. [12+]**
**11.00, 16.00, 6.00 "Дорога к храму". [0+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**12.45, 3.15 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.15 Новости (на баш. яз).**
**13.45, 23.30 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Детей много не бывает. [6+]**
**15.30 Гора новостей. [6+]**
**15.45 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**17.00 Автограф. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Елкән. [6+]**
**19.00 Брифинг.**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 Вечерний телецентр.**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [6+]**
**0.45 Спектакль "Наш одуванчик". [12+]**
**2.30 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**

### 1 МАРТА СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 20.20 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Долгожданная премьера. "Тест на беременность"". [16+]
22.45 "Большая игра". [16+]
23.45 Д/с Премьера. "Век СССР". [16+]
1.35, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Кто против?" [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Лимитчицы". [12+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Каменская". [16+]
3.45 Т/с "Личное дело". [12+]
4.33 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]**
**10.30 Неизвестный Башкортостан. [12+]**
**10.45 Әлләсе... [6+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Дознание. [12+]**
**12.15 Пофутболим? [12+]**
**12.45, 3.15 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45, 23.45 Бәхетнамә. [12+]**
**14.45 Интервью. Доступная среда. [12+]**
**15.00 МузКәрәҙ. [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 "КультУра". [6+]**
**16.00, 6.00 Тайм-аут. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45, 3.00 История одного села. [12+]**
**18.00 Тормош. [12+]**
**19.00, 20.30 Вечерний телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 Автограф. [12+]**
**1.00 Спектакль "Тамарис". [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

### 2 МАРТА ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 20.20 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Долгожданная премьера. "Тест на беременность"". [16+]
22.45 "Большая игра". [16+]
23.45, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Кто против?" [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Лимитчицы". [12+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Каменская". [16+]
3.45 Т/с "Личное дело". [12+]
4.33 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Алтын тирмә". [0+]**
**10.45 Надо знать. [12+]**
**11.00 Автограф. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Историческая среда. [12+]**
**12.45, 3.15 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.45 Новости (на баш. яз).**
**13.45, 0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Сулпылар. [0+]**
**15.30 Гора новостей. [6+]**
**15.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**16.00 Патриот РФ. [12+]**
**16.15 Финликбез. [12+]**
**17.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Башкорттар. [6+]**
**19.00, 20.30 Вечерний телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**1.15 Спектакль "Оставайтесь солнцем". [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.00 "Это моя профессия". [12+]**

### 3 МАРТА ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости.
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Премьера. "ГОЛОС" весны в обновленном составе. [12+]
23.35, 2.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
0.15 Х/ф "Небеса подождут". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Кто против?" [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.30 Ну-ка, все вместе! Битва сезонов. [12+]
0.15 "Улыбка на ночь". [16+]
1.20 Х/ф "Слепое счастье". [16+]
4.38 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [6+]**
**10.30, 18.00 "Йома". [0+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45, 22.00, 6.00 Интервью. [12+]**
**12.00 Слово Земли. 2.0. [12+]**
**12.45, 5.00 Үткән гүмер. [12+]**
**13.15 Ҡурай даны. [12+]**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Автограф. [12+]**
**15.00 "АйТекә!" [6+]**
**15.15 "КультУра". [6+]**
**15.30 Гора новостей. [6+]**
**15.45 Финликбез. [12+]**
**16.00 "Аль-Фатиха". [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**19.00, 3.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45, 23.45, 5.05 История одного села. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Башкорт йыры". [12+]**
**21.15 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00, 3.45 "Ете егет". [12+]**
**0.00 Спектакль "Асылъяр". [12+]**
**2.15 Алтын тирмә. [0+]**
**4.30 Бай. [12+]**
**5.30 "Звезды сцены". [12+]**

### 4 МАРТА СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота". [0+]
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Премьера. "ПроУют". [0+]
11.10 Премьера. "Поехали!" [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" [0+]
13.50 Т/с "По законам военного времени". [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 Д/ф Премьера. "Кто взорвал "Северные потоки"?" Специальное расследование. [16+]
19.20 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 "Время".
21.35 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. [16+]
23.45 "Горячий лед". Финал Гран-при России по фигурному катанию-2023. Женщины. Короткая программа. [0+]
1.20 Х/ф "Поменяться местами". [16+]
3.30 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.50 "Доктор Мясников". [12+]
12.55 Т/с "Акушерка. Новая жизнь". [16+]
18.00 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Развод с препятствиями". [12+]
0.35 Х/ф "Огонь, вода и ржавые трубы". [12+]
4.20 Х/ф "Роман в письмах". [12+]
6.06 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Ете егет". [12+]**
**8.30 Это моя профессия. [12+]**
**9.00 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**9.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**10.00 Елкән. [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 Преград. Net. [6+]**
**11.00 МузКәрәҙ. [0+]**
**11.30 Байтус. [6+]**
**11.45 Семәр. [0+]**
**12.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]**
**12.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**13.00, 4.00 Үткән гүмер. [12+]**
**13.30 Башкорттар. [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Творческий вечер народной артистки РБ Танзили Узянбаевой. [12+]**
**19.00 Специальный репортаж. [12+]**
**19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Байык-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30, 1.45 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**2.15 Спектакль "Эх,невеста, невестушка!..." [12+]**
**4.30 Тормош. [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Мистический Башкортостан. [12+]**

### 5 МАРТА ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10, 1.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 "Часовой". [12+]
8.10 "Здоровье". [16+]
9.20 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
9.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Премьера. "Жизнь своих". [12+]
11.05 Премьера. "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Д/ф "Диагноз для Сталина". [12+]
13.10 Д/ф "Прокофьев наш". [16+]
14.05 Д/ф "Бомба. Наши в Лос-Аламосе". [16+]
15.10 "Горячий лед". Финал Гран-при России по фигурному катанию-2023. Женщины. Короткая программа. [0+]
16.30 Д/ф "Закат американской империи". "Украина". Полная версия". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Три аккорда". Новый сезон. [16+]
21.00 "Время".
22.35 Т/с Премьера. "Контейнер". [16+]
23.30 Премьера. "На футболе с Денисом Казанским". [18+]
23.55 "Горячий лед". Финал Гран-при России по фигурному катанию-2023. Женщины. Произвольная программа. [0+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

6.10, 2.15 Х/ф "Счастливая серая мышь". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
11.50 Большие перемены.
12.55 Т/с "Акушерка. Новая жизнь". [16+]
18.00 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Д/ф "Странная война". [16+]
3.59 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Автограф". [12+]**
**8.15 Тормош. [12+]**
**8.45 "Курай даны". [12+]**
**9.00 Бай. [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**10.00 "Книга сказок". [0+]**
**10.15 "Городок АЮЯ". [0+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "МузКәрәҙ". [0+]**
**11.00 Территория женского счастья.**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30, 4.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 "Честно говоря". [12+]**
**17.45 Концерт Рафиса Сирусина. [12+]**
**19.15, 3.45 Әлләсе... [6+]**
**20.00, 2.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**20.30 Х/ф "53". [12+]**
**21.15 Дознание. [16+]**
**21.30, 6.00 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Спектакль "Ваша сестра и пленница". [12+]**
**1.30 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**2.30 Спортивная история. [12+]**
**3.00 Честно говоря. [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**

✓ *Башҡортостандың Беренсе Президенты Мортаза Рәхимовтың вафатына 40 көн үтте. Ошо датаға бағышлап, Өфө рәссамы Евгения Сковарт республика картаһына Мортаза Ғөбәйҙулла улының портретын төшөргән.*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ӨЛГӨЛӨ ҒАИЛӘЛӘР




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**6-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Илһамов. Лөғәт. Сәүкә. Нужа. Дөлдөл. Лиссабон. Швед. Әй. Аврора. Ағуна. Белов. Сысҡан. Бойҙай. Нарыҫтау. Март. Шарф. Ауыл. Алым. Ырым. Ат.

**Вертикаль буйынса:** Логарифм. Насибуллин. Аҙбар. Салбар. Ыласын. Бай. Һеләүһен. Ре. Ашлама. Әүлиә. Йыуа. Ватандаш. Серафимов. Рәссам. Дудко. Лайла. Ниәт.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1444 һижри йыл.*

| Февраль - Март (Шәғбан) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ахшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 27 (7) дүшәмбе | 6:43 | 8:13 | 13:30 | 17:11 | 18:44 | 20:14 |
| 28 (8) шишәмбе | 6:41 | 8:11 | 13:30 | 17:13 | 18:47 | 20:17 |
| 1 (9) шаршамбы | 6:38 | 8:08 | 13:30 | 17:14 | 18:49 | 20:19 |
| 2 (10) кесе йома | 6:36 | 8:06 | 13:30 | 17:16 | 18:51 | 20:21 |
| 3 (11) йома | 6:33 | 8:03 | 13:30 | 17:18 | 18:53 | 20:23 |
| 4 (12) шәмбе | 6:31 | 8:01 | 13:30 | 17:19 | 18:55 | 20:25 |
| 5 (13) йәкшәмбе | 6:28 | 7:58 | 13:30 | 17:21 | 18:57 | 20:27 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# УНЫҢ ПОРТРЕТЫН...
## рәссәм шулай күрә

**Башҡортостандың Беренсе Президенты Мортаза Рәхимовтың вафатына 40 көн үтте.**



Ошо датаға бағышлап, Өфө рәссамы Евгения Сковарт республика картаһына Мортаза Ғөбәйҙулла улының портретын төшөргән. "Картографик арт техникаһын ҡулланып ҡарау теләге күптән булһа ла, үҙем өсөн лайыҡлы герой таба алмай инем. Ә Мортаза Рәхимов тотош Башҡортостан өсөн оло шәхес, ул республика тарихында шундай булып ҡаласаҡ та. Тап шуның өсөн портрет өсөн Башҡортостандың картаһын һайланым", - ти рәссам.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**28 февраль Әнғәм Атнабаевтың** тыуыуына 95 йыл. Хәтер кисәһе. 6+

**2 март "Мөхәббәт ҡоштары"** (И. Йомағолов), музыкаль комедия. 16+

**3 март "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия. 12+

**4 март "Йәш йөрәктәр"** (Ф. Бурнаш). 18.00 12+

**5 март "Эҙләнем, бәғрем, һине..."** (Т. Миңнуллин), мелодрама. 18.00 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**28 февраль "Уйҙарымдан ғына юғалма"** (Р.Н. Гюнтекин), музыкаль драма. 12+

**1 март "Айболит и Бармалей"** (К. Чуковский), мюзикл. 11.00 0+

**2 март "Йәшәгән ти..."** (М. Ладо), драмеди. 16+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**2 март "Мәрйен теҙәм юлдарыма"** Римма Амангилдина концерты. 6+

**4 март "Музыку слушаю вместе"** Миңлеғәфүр Зәйнетдинов. 11.00 0+

**"Музыкальный интерактив"** 4-7 йәшлек балалар өсөн. 13.00 0+

**6 март "Танцы с саксофоном"**. 6+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**2 март "МИР ОТКРЫТиЯ"** музыкаль-әҙәби лекторий. 17.00 6+

**"Һинһеҙ килгән яҙҙар"** (З. Ҡадырова), мелодрамаһы менән М.Ғафури ис. БАДТ гастролдә. 16+

**4 март "А у моей любви..."** филармония солистары. 18.00 6+

**5 март "Как зажигаются звезды"** музыкаль-әҙәби лекторий. 12.00 0+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**27 февраль** Бөрйән районы Иҫке Собханғол ауылында:

**"Таңбатыр"** (М. Ғиләжев), әкиәт. 12.00 0+

**"Өҙөлгән өмөт"** (Н. Асанбаев), драма. 15.00, 19.00 16+

**1 март "Әлимә, йәки Мырҙаш ҡарт туйы"** (Д. Юлтый, З. Бураҡаева инсц.), драма. 14.00 12+

**2 март** Йылайыр районы Йылайыр ауылында:

**"Таңбатыр"** (М. Ғиләжев), әкиәт. 12.30 0+

**"Өҙөлгән өмөт"** (Н. Асанбаев), драма. 15.00, 19.00 16+

**3 март** Баймаҡ ҡалаһында: **"Әлимә, йәки Мырҙаш ҡарт туйы"** (Д. Юлтый, З. Бураҡаева инсц.), драма. 15.00, 19.00 12+

### БР Милли музейы

**28 февраль "Яҡлауһыҙ аҡ айыу"** лекторий. 15.00 6+

**2 март** Рәссамдар Л. Шаһабутдинова һәм Г. Мостафина менән ижади осрашыу. 12.00 6+

**3 март "Ҡатын-ҡыҙҙар биҙәүестәре: археология һәм бөгөнгө"** экскурсия. 15.00 6+

**4 март "Этно стилдәге сулпы"** оҫталыҡ дәресе. 12.00 6+

**"Малахит ҡумта"** интерактив экскурсия. 13.00 6+

**"Ты взойди, солнце красное"** фильмы күрһәтелә. 16.00 6+

✓ Тәҡдим бер шарт менән ҡабул ителә. Китап бөтөн Башҡортостандағы һуғыш балалары түгел, ә 1944 йылда асылған 9-сы башҡорт республика мәктәбе миҫалында яҙылырға тейеш.



КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

# ҺӘЙБӘТ КИТАП УҠЫҒАНДА...

## таң тиҙ ата

**Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында Башҡортостандың һәм Рәсәй Федерацияһының мәғариф алдынғыһы, Салауат Юлаев ордены, "Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында намыҫлы хеҙмәт өсөн" миҙалы кавалеры, Рәми Ғарипов исемендәге премия лауреаты, хеҙмәт ветераны Марат Мөхәмәтйән улы Хафизов менән тарих фәндәре кандидаты Юлай Марат улы Әбсәләмовтың "Һуғыш балалары" тигән китабының исем туйы булып үтте.**



Китаптың яҙылыу тарихы шулайыраҡ: 2021 йылдың башында Миңзәлә һәм Ҡадурий Фазлетдиновтар авторҙарға һуғыш балалары тураһында китап яҙырға тәҡдим итә. Тәҡдим бер шарт менән ҡабул ителә. Китап бөтөн Башҡортостандағы һуғыш балалары түгел, ә 1944 йылда асылған 9-сы башҡорт республика мәктәбе (бөгөн Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты) миҫалында яҙылырға тейеш. Был уҡыу йортонда ул саҡта аталары һуғышта һәләк булып, ата-әсә һөйөүенән мәхрүм ҡалған балалар тәрбиәләнә.

Был китапта ошо ауыр йылдарҙа һәм һуғыштан һуңғы осорҙа 9-сы мәктәптә уҡыған һәм уны тамамлаған уҡыусыларҙың тормошо һүрәтләнә. 40-лаған шәхестең күптәргә өлгө булырлыҡ, фәһем алырлыҡ яҙмышы, уларҙың үҙ яулаған үрҙәре һәм өлгәшкән уңыштары тураһында бәйән ителә. Китап ошондай тәҡдим авторҙары Фазлетдиновтарҙың матди ярҙамы менән баҫылып сыға.

Марат Хафизовтың сығышын тыңлағанда залда тулҡынланмаған кеше ҡалмағандыр. Ысын мәғәнәһендәге уҡытыусының, оратор педагогтың сығышы булды ул. Телмәре тап-таҙа башҡортса, милли рухта яңғыраны. Фекерҙәре тәрән, мәғәнәле, иғтибарҙы шундуҡ йәлеп итте. Күңелдә шундай уҡытыусының уҡыусыһы булғандарға ҡарата аҡ көнләшеү тойғоһо ла барлыҡҡа килде. Мин уҡыусыларҙың йөҙөндә ысын мәғәнәһендәге ғорурлыҡ балҡышын күрҙем. Шундай уҡыу йортонда белем алыу бәхете тейеүҙән тыуған ғорурлыҡ! Уҡытыусыһының шундайын сығышынан һуң китаптың икенсе авторы Юлай Әбсәләмов тик ике генә һүҙ әйтеү менән сикләнде: "Китап уҡығыҙ!"

Сараның үҙенсәлеге шуға ҡайтып ҡалды: унда гимназия уҡыусылары һәм уҡытыусылары китаптың авторҙарынан тыш, уның төп геройҙары менән дә осрашты. Улар һәр береһе хаҡында айырым китап яҙырлыҡ республикаға танылған шәхестәр, шуға исемдәрен генә атап үтәм: Альбина һәм Фәнис Исхаҡовтар, Эрнст Юлбарисов, Ләлә Биишева, Әхнәф Тимербулатов. Һуғыш осоронаң һәм унан һуңғы йылдарҙың барлыҡ ауырлыҡтарын еңеп сығып, үҙҙәренең исемен бар тулылығында аҡлаусы һуғыш балалары бына улар инде.

"Бәхетле бала сағы булмаған кеше үҙенең бәхетле икәнлеген аңлай алмай", тиҙәр. Ә кисәлә ҡатнашыусы китап геройҙары был әйтемдең нәҡ киреһен раҫлаусылар. Нимә генә тимә, һәр кеше бәхетте үҙенсә ҡора, үҙенсә аңлай.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Кисә барышында экранда халҡыбыҙ шағиры Рәми Ғариповтың "Һәйбәт китап уҡығанда таң тиҙ ата" тигән тәрән мәғәнәле ҡанатлы һүҙҙәре ваҡыты-ваҡыты менән күренеп-күренеп ҡалды. Был һүҙҙәр кисәнең лейтмотивына әүерелде: шундай фәһемле, һәйбәт китап хаҡындағы сараның үткәне һиҙелмәй ҙә ҡалды. Китап хаҡындағы тулыраҡ һүҙҙе "Ағиҙел" журналы биттәрендә дауам итеп әйтермен, тием.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# МУЗЕЙҘА - САМАУЫРЛЫ РИТАЙЫМ




**Үткән аҙнала Башҡортостандың Милли музейында йәнле, дәртле-дарманлы, рухлы осрашыу - "Самауырлы ритайым" байрамы үтте. "Музейҙа матур осрашыу" проекты сиктәрендә уҙған сараға Өфөнән генә түгел, ә республиканың төрлө төбәгендә һәм хатта сит илдәрҙә йәшәгән милләттәштәребеҙ ҙә килде.**

Ҡунаҡтарға музейҙың этнография залдары буйлап бай мәғлүмәтле, тәрән йөкмәткеле экскурсия уҙғарылды. Кисә матур йырҙар һәм дәртле бейеүҙәр, хисле шиғырҙар менән үрелеп барҙы. Ҡурай, баян һәм гитара моңдары, йөрәктәрҙе наҙға һәм моңға сорнаны. Ә "Самауырлы ритайым" командаһы, ғәҙәттәгесә, тәм-томдан һығылып торған өҫтәл ҡуйып, барыһын да мәтрүшкәле сәйҙәр менән һыйланы.

Музейҙың экспонаттар фонды бик бай. Уларҙың һәр береһе тарихи сығанаҡ булараҡ ҡәҙерле һәм баһалап бөткөһөҙ. Музей залдарында ҡуйылған әйберҙәрҙән тыш, бик һирәк осраҡта ғына киң йәмәғәтселек иғтибарына сығарылған экспонаттар була. "Самауырлы ритайым"ға нәҡ ошондай экспонаттар менән биҙәлгән тирмә ҡуйылып, теләге булған һәр кемдең башҡорт милли кейемендә фотоға төшөү мөмкинлеге булды. Кисә барышында тирмәнең бер минутка ла буш тормауы һәм халҡыбыҙҙың милли кейемендә фотоһүрәт эшләргә теләүселәрҙән сират йыйылыуы был йүнәлеште әүҙемләштерергә кәрәк икәненә ишара булды.

Кисәлә балаларҙың күп булыуы айырыуса шатландырҙы. Уларҙың милли кейемдәрҙә килеүе, һәр бер йырҙы иғтибар менән тыңлауы, бейеү көйҙәрен "эрәм" итмәйенсә, бер кемдән оялмай-тартынмайынса, башҡортса бейеүҙәре йөрәктәргә май булып яғылды. Ошондай балалар тәрбиәләгән атай-әсәйҙәргә "Афарин!" тиергә генә ҡала.

Музейға беренсе тапҡыр килеүселәр ҙә бар ине был кисте. Улар музейҙың ҙурлығына, матурлығына, экспонаттар байлығына иҫтәре китеп ҡарап йөрөнө. "Башҡортостандың үткәнен һәм бөгөнгөһөн белергә теләһән, республикаҡың төп музейына килергә кәрәклеген ниңә әлегәсә белмәгәнмен?" тигән уйҙар сорналышында танышты улар залдар менән. Әлбиттә, байрам программаһының тығыҙ, мауыҡтырғыс булыуы был кисте музейҙың бөтә залдарын да ҡарап сығырға форсат бирмәне ҡунаҡтарға, шуға күрә барыһын да икенсе айҙа үтәсәк "Самауырлы ритайым"да көтөп ҡалабыҙ.

**Гөлназ МАНАПОВА,**
**БР Милли музейы хеҙмәткәре.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠАТЫНЫ ЯМАНҒА...

## ләхет кәрәкмәй

Бары ла яҡшы - беҙ яман; бары ла бойҙай - беҙ һалам.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ҡатын күршеһенә зарын һөйләй: йәнәһе лә, уны әхирәте бик ныҡ рәнйеткән. Күршеһе уны тынысландыра, әхирәтен ғәфү итергә кәңәш итә.**

**- Кисерергә? Был мөмкин түгел! Яуызлыҡты кисерергә ярамай! - тип ярһый ҡатын. - Ғөмүмән, мине яратмаған кешеләрҙе ни өсөн мин яратырға тейеш? Тирә-яғымда барыһы ла алдағанда, хыянат иткәндә һәм яуызлыҡ ҡылғанда ниңә мин генә изгелек эшләргә тейешмен һуң әле?**

**- Улайһа, мин һиңә бер тарих һөйләйем, - ти уға күршеһе. - Бер кеше йәшәгән. Ул Тәбиғәт-әсәгә мөрәжәғәт итеп, шундай теләген еткергән: "Зинһар, майшәм яндырмаҫ өсөн төндәрҙе яҡты ит, мейескә яҡмаҫ өсөн ҡыштарҙы йылы ит". Ләкин Тәбиғәт-әсә был кешенең үтенесенә иғтибар итмәй, сөнки уның был теләктәре үтәлерлек булмай. Кеше Тәбиғәт-әсәгә асыулана һәм шундай ҡарарға килә: "Һин шулаймы ни әле? Былай булғас, мин майшәм тоҡандырмайым һәм һинең өсөн төндө яҡтыртмайым. Йылыһы менән һине йылытмаҫ өсөн мейескә лә яҡмайым. Мин хатта һиңә бөтөнләй йылы ҡалмаһын өсөн өйҙөң ишеген асып ҡуясаҡмын..."**

**- Ҡалай алйот булған был кеше... - тип бүлдергән күршеһен ҡатын. - Өйөндәге майшәм менән бөтөн донъяны яҡтыртам, мейесе йылыһы менән урамды йылытам тип уйланымы икән? Был яҡты һәм йылылыҡ бит иң тәүҙә уның үҙенә кәрәк. Тәбиғәт-әсә үҙе тураһында үҙе хәстәрләй ул!**

**- Улай уйлағас, ниңә һуң һин ошо ҡатындың ҡылыҡтарын ҡабатлайһың? - ти күрше ҡатын.**

**- Минме? - тип аптырап һорай ҡатын.**

**- Әлбиттә, һин! Ни өсөн һин әйләнә-тирәндә ҡараңғылыҡ ҡуйырғанда үҙеңдең мөхәббәт утыңды һүндерәһең, ниңә һин әйләнә-тирәндәге кешеләр йөрәгенән һалҡынлыҡ бөркөлгәндә йөрәгең утын яндырмайһың? Ҡараңғылыҡта кемдеңдер килеп ут яндырғанын көтөп ултырғансы, ул утты үҙең өсөн дә, башҡалар өсөн дә үҙең яндырыу яҡшыраҡ түгелме? Ул саҡта бит алдыңдағы юлды һин дә күрәһең, башҡалар ҙа күрәсәк һәм һинең менән бергә етәкләшеп уҙасаҡ. Һалҡында кемдер килеп йылытҡанды көтөп ултырғансы, йөрәк усағыңды тоҡандырып, үҙең дә йылынып, башҡаларҙы ла йылытыу яҡшыраҡ бит, ул саҡта һинең йылыңда йылынған йөрәктәрҙән бер ваҡытта ла һалҡын бәрмәйәсәгенә үҙең дә инанырһың..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
Мөхәрририәт:
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99
Матбуғат таратыу 252-39-99

Ҡул ҡуйыу ваҡыты -
22 февраль 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44 телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – ПР905
Тиражы - 3267
Заказ - 247